✓*Яңы вазифаға килгән саҡта һине дәррәү алҡышлауҙарында түгел хикмәт - килгәндә яҡшы булырға һәр кем булдыра; вазифанан киткән саҡта дәррәү алҡышлау бәхетенә генә һәр кем өлгәшә алмай - бына шунда ул хикмәт.*

***Балтасар Гарсиан.***

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

22 - 28 ОКТЯБРЬ (ҠАРАСАЙ) 2011 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№43 (461)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Атаңдың ғына улы булма,**

халҡыңдың да улы бул...



3

**Уҡытыусыларҙың да...**

уҡытыусыһы булды Абдрахман Ғәлләмов!



7

**Беҙҙекеләр эшләргә теләмәй,**

ә ситтәр йәшәү һәм эш урындарын яулай...



8-9

**Ғаиләләге йәберләүҙәргә...**

ысынында кемдәр дусар?



12-13

14 ТВ-программа

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Халыҡтың пай ерҙәренән баш тартыуына был турағы законды ғәмәлгә ашырыу юлындағы кәртәләр сәбәпсеме, әллә улар ер - беҙҙең матди байлығыбыҙ ғына түгел, йәшәүгә хоҡуғыбыҙ ҙа икәнен һаман аңлап етмәйме?*

***Зифҡәт СӘЙЕТҒӘЛИЕВ, иҡтисад фәндәре докторы, профессор:*** Халыҡ үҙенең меңәрләгән йыллыҡ тарихында тәүге тапҡыр ерҙе шәхси милекселеккә ала. Мин тәүге осорҙа был законға ҡаршы ла булдым. Сөнки һәр бер өләшеүҙең үҙенә күрә кәмселектәре килеп сыға. Ҡайһы берәүҙәр: "Нимәгә кәрәк инде ул ер? Ете гектар менән мин нимә эшләй алам? Ул ер баҫыуҙың уртаһында, уны эшкәртергә ҡайҙа миңә техника, ағыулыҡ?" тигән фәлсәфә һата башлай. Был - ялҡауҙарҙың һәм ерҙең әһәмиәтен аңлап бөтмәүселәрҙең һүҙе. Ер бүлеүҙең сәйәси яғы ла бар. Әле барлыҡ ерҙәр: ауыл хужалығы ерҙәре лә, сабынлыҡ, көтөүлек ерҙәре лә Рәсәй ере иҫәпләнә. Әгәр ҙә беҙ үҙебеҙгә ғүмеребеҙҙә бер тапҡыр бушлай бирелә торған ерҙән баш тартһаҡ, ул ер Рәсәй мөлкәте булып ҡала. Әгәр ҙә ниндәйҙер райондарҙа ҡайһылыр урындарҙа ерҙәр бирелмәй ҡала икән, ул ерҙәр автоматик рәүештә Рәсәй Федерацияһы мөлкәте булып һаналасаҡ.

Донъялағы әйберҙәр араһында ер иң ҡиммәте иҫәпләнә. Бына һеҙ ер өҫтөнә ун ҡатлы яҡшы йорт һалдығыҙ, ти. Ул йорт 400 йыл торасаҡ. Бына ошо йортҡа ҡарағанда ер ҡиммәтерәк, сөнки 400 йылдан һуң был йорт емереләсәк, ә ер емерелмәйәсәк. Уны Ер шары, кешелек йәшәгәндә, мәңге файҙаланып буласаҡ.

> **Беҙҙең башҡорт халҡы үҙен "беҙ ерле халыҡ" тип атай. Шуға ла беҙ бөгөн иң тәүҙә күңеле, эске инаныуы менән үҙен "мин ерле" тип атаған халыҡты ерһеҙ ҡалдырһаҡ, беҙҙе тарих ғәфү итмәйәсәк. Атайҙар иң тәүҙә үҙҙәренән һуң килер быуындарҙы, улҡыҙҙарын, ейән-ейәнсәрҙәрен ҡайғыртырға бурыслы.**

Әгәр ҙә улар үҙ тамағын, үҙ мәнфәғәтен генә ҡайғыртып, өлөшөнә төшкән ерен һатып ебәреүҙе ҡулай күрһә, киләсәктә уларҙың ейәнсәрҙәре "һауаға" тыуасаҡ, уларҙың хатта баҫып китерлек тә ерҙәре булмаясаҡ. Шуға күрә ер Рәсәй законы менән бер тапҡыр бушлай бирелгән саҡта, уға йәбешеп ятырға кәрәк. Урындағы етәкселәрҙең, депутаттарҙың төп эше халыҡҡа ерҙән файҙа алырға ярҙам итеүгә ҡайтып ҡалырға тейеш. Юғиһә күп кенә етәкселәр ер алыусыны һалым мәсьәләһе менән ҡурҡытып маташа. Халыҡ алдында һалым тураһында һөйләүсе кеше - ул халыҡтың дошманы. Ундайҙар барлыҡ ерҙәрҙе үҙҙәренең ҡулына төшөрөргә маташыусылар. Етәкселәр йә арендаторҙар пайсыларҙы күп осраҡта үҙҙәре ҡуйған шарттар менән ерҙәрен арендаға бирергә өгөтләй. Күп осраҡта улар үҙ маҡсатына ирешә лә. Һөҙөмтәлә күпселек халыҡ үҙенең табаны аҫтынан ере ысҡынғанын белмәй ҙә ҡала.

Тағы ла ерҙәрҙе арендаға биреү, алыу сроктары тураһында. Миңеҫә, ерҙәрҙе 7-15-49 йылға арендалау практикаһын бөтөнләй юҡҡа сығарырға кәрәк. Әгәр ҙә ерҙе арендаға алыусы үҙенең йөкләмәһен үтәмәй, ер хужаһына түләмәй йә насар түләй икән, килешеүҙе бер йылдан һуң да өҙөргә була бит.

Беҙ Рәсәй Федерацияһы Законын республикаға ярашлы ҡабул иткән саҡта көтөүлектәрҙе һәм сабынлыҡтарҙы межалауҙы үткәрмәҫкә булдыҡ. Сөнки ауыл кешеһенең элек-электән ата-олатаһы сапҡан ерен башҡаларға бүлеү ҙә ыҙғыштар тыуҙырасаҡ, ә көтөүлеккә килгәндә, һәр хужа үҙ малын айырым көтмәй, мал ауыл көтөүендә йөрөй.

Бар кеше лә ерҙә эшләй алмай. Шуға күрә пай ерҙәре иртәме-һуңмы барыбер ҙә айырым кешеләр ҡулында ҡаласаҡ. Әгәр ҙә ер ситтән килеүселәрҙең ҡулына эләкмәһен тиһәк, һәр урында лидерҙар барлыҡҡа килеүе мотлаҡ. Ер хальҡтыҡы булып ҡалһын тиһәк, ул лидерҙарҙың милли рухлы булыуы мотлаҡ. Киләсәктә еребеҙ башҡорт милләтенеке булып ҡалһын өсөн был иң мөһим шарттарҙың береһе.

***Йәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ, Башҡорт дәүләт аграр университетының Сибай филиалы директоры, биология фәндәре докторы, профессор:*** Пай ерҙәрен һис һүҙһеҙ алырға кәрәк, сөнки беҙҙең халыҡ элек-электән ерле халыҡ булған. Әгәр ҙә ерле халыҡ ерһеҙ тороп ҡалһа, ул юғалыуға дусар. Тик ер менән ни эшләргә тейеш һуң ул? Бында урындағы власть вәкилдәренең мәсьәләне үҙағышына ебәрмәүе мөһим. Һәр хәлдә, ауылда йәшәгән кеше тарафынан алынған ауыл хужалығы тәғәйенләнешендәге ер тауарға, йәғни баҙар объектына әйләндерелергә тейеш түгел. Миңеҫә, бында ауыл кешеһе алдында дүрт юл бар:

- Үҙе эшкәртә, йәғни ул ерҙәге барлыҡ ауыл хужалығы эштәрен үҙе алып барып, шул еренең мәнфәғәтен күрә.
- Урындағы крәҫтиән хужалығына, колхозға биреп тора. Аренда хаҡы уңыштың бер өлөшө рәүешендә, йәғни рентаһын ала.
- Үҙе һымаҡ бер нисә пайсы менән берләшеп, айырым күмәк хужалыҡҡа (колхозға) ойошоп эш итә.
- Урында (ситтән килгәндәр түгел) барлыҡҡа килгән МТС-тарға, агрохолдингтарға пай ерен арендаға биреп, шуның рента хаҡын ала.

Нисек кенә булмаһын, хәҙерге ауыл кешеһе үҙ пайын алып, юғарылағы дүрт юл менән ул ерҙе үҙенә хеҙмәт иттереп, аҙаҡ шул ерен үҙенең балаларына капитал итеп ҡалдырырға тейеш. Ер беҙҙең матди байлығыбыҙ ғына түгел, йәшәүгә хоҡуғыбыҙ ҙа.

**(Дауамы 2-се биттә).**

## ТУҠТА, МӘЛ!



ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Халыҡтың пай ерҙәренән баш тартыуына был туралағы законды ғәмәлгә ашырыу юлындағы кәртәләр сәбәпсеме, әллә улар ер - беҙҙең матди байлығыбыҙ ғына түгел, йәшәүгә хоҡуғыбыҙ ҙа икәнен һаман аңлап етмәйме?

(Башы 1-се биттә).

***Илдар ӘМИНЕВ, БР ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министры урынбаҫары:*** 2006-2010 йылдарҙа республикала граждандарға ауыл хужалығы тәғәйенләнешендәге ерҙән өлөш биреү буйынса төп саралар тормошҡа ашырылды. 2,2 миллион гектарҙан ашыу ер 350 мең кешенең милкенә тапшырылды. Былый 1 сентябргә бөтә районлар буйынса граждандарҙың 80 проценты самаһы ер өлөшөнә хоҡуғын теркәп ҡуйҙы. Был уларға ер өлөшөнән, шулай уҡ дөйөм милектәге ерҙән өлөшләтә файҙаланыу мөмкинлеге бирә. Ҡайһы бер граждандар хоҡуҡтарын аҙағынаса теркәү сараһын күрмәй. Һөҙөмтәлә муниципаль берәмектәр граждандар үҙләштермәгән ер өлөшөн суд аша муниципаль милеккә алыу эшен башларға хаҡлы. Әле хосусилаштырыу ваҡытын йыл аҙағына тиклем оҙайтыуға бәйле айырым хужалыҡтарҙа һәм ауыл биләмәләрендә тейешле саралар үткәрелә. Шуның һөҙөмтәһе булараҡ, 7 мең самаһы граждандың ғаризаһы ҡабул ителгән. Дөйөм милектәге ерҙе файҙаланыу мәсьәләһен милекселәр үҙҙәре хәл итә. Ғәмәлдәге ҡануниәт менән билдәләнгән ҡағиҙәләр буйынса, дөйөм милеккә тапшырылған ер участкалары милекселәрҙең дөйөм йыйылышы ҡарары нигеҙендә ауыл хужалығы етештереүе өсөн ҡуртымға тапшырыла ала. Уларға бәйле башҡа төрлө килешеүҙәрҙең дә төҙөлөүе ихтимал. Өлөшләтә милектә ҡатнашыусылар ер өлөшө йәки өлөштәре иҫәбенә ер участкаһы бүлергә, йәғни уларҙы яңы участка барлыҡҡа килерлек итеп межаларға хоҡуҡлы. Бер үк ваҡытта милекселәр ҙә ер өлөштәренә бәйле килешеүҙәр төҙөй ала. Уларҙы һатырға, бүләк итергә, устав (йыйылма) капиталға индерергә, ышаныслы идараға йәки аманатҡа тапшырырға мөмкин.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ер милекселәре төрлө сәбәптәр арҡаһында ергә үҙ хоҡуғынан баш тарта. Был тәү сиратта ер һалымын түләргә, ер пайын эшкәртергә теләмәүҙән килә. Республика буйынса ошондай 17 меңдән ашыу милексе иҫәпләнә. Күптәр ер өсөн һалымдың ҙур булыуына дәғүә белдерә. Был йәһәттән шуны әйтеп килә: иң уңдырышлы һәм сифатлы ерҙең кадастр хаҡы ҡиммәт. Бындай тупраҡлы райондарға Ҡырмыҫҡалы, Шишмә, Өфө, Дүртөйлө, Саҡмағош, Илеш һәм Кушнаренко инә. Быйыл 1 гектар пай ере өсөн иң ҙур һалым ставкаһы 0,3 процент булғанда, 7 гектар майҙан өсөн ер һалымы 823 һум самаһы (1 гектар - 117,6 һум) тәшкил итәсәк. Ә республика буйынса уртаса ул 1 гектар пай ере өсөн 54 һум, йәки 7 гектар участка өсөн 378 һум тәшкил итә. Йыл аҙағына тиклем БР Ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министрлығы ауыл хужалығы тәғәйенләнешендәге ерҙәргә дәүләт кадастр баһаһы буйынса сараларҙы тулыһынса тамамларға ниәтләй. Кадастр хаҡы арттырылған осраҡта урындағы үҙидара ер һалымы ставкаһын кәметеү юлы менән үҙенең һалым түләүселәре өсөн ер һалымы күләменең үҙгәрешен көйләргә хаҡлы.

***Мәжит ИҪӘНБАЕВ, иҡтисад фәндәре докторы, профессор:*** Ер мәсьәләһе - беҙҙең киләсәкте булдырыусы төп нигеҙ булып тора. Беҙҙең ата-бабалар еребеҙҙе һаҡлап ҡалыр өсөн мөмкин булған һәм мөмкин булмаҫтай ғәйрәтлек күрһәткән. Дөрөҫ, башҡорт ихтилалдары асылда ер һәм дин өсөн барған. Шул уҡ ваҡытта кисә генә ихтилалға күтәрелгән башҡорттоң ҡылысы иртәгәһенә Рус батшаһының дошманына ҡаршы ла күтәрелгән. Үҙен иҙеүсе, ерен тартып алыусы батшалыҡты яҡлап һуғышҡаны өсөн башҡортто бер ҡатлы иҫәпләп, тәнҡитләүселәр ҙә бар. Әммә, төптәнерәк уйлап ҡараһаң, башҡорттарҙың Рус батшалығы алып барған бөтә һуғыштарҙа ҡатнашыуы ерҙе һаҡлау ихтыяжынан килеүен аңлауы ҡыйын түгел. Беҙ ерҙең киләсәктә яҙмышыбыҙҙы хәл итеүгә алып килер әһәмиәтен аңлап бөтмәйбеҙ. Беҙҙең ғәмһеҙлектән башҡалар файҙалана. Ер һатыусыға һәм быға булышлыҡ итеүсе кешеләргә түҙеп торғоһоҙ мөнәсәбәт булдырғанда ғына был хәлдә туҡтатып буласаҡ. Ер - халыҡ байлығы, шуға күрә ул кешегә пай итеп бирелгән хәлдә лә, уны уңға-һулға һатырға-таратырға юл ҡуйырға ярамай. Айырым бер кеше үҙенең ерен һатырға уйлаған хәлдә лә ул пайын күмәк хужалыҡҡа һатырға тейеш. Үткән быуаттың 30-сы йылдарында нисек колхозлашҡан булһалар, хәҙер ҙә таратылған пайҙарҙы бергә ҡушып, улар күмәк хужалыҡҡа ойоша ала. Пенсионерҙарға, инвалидтарға, күмәк хужалыҡта эшләй алмаусы башҡа һөнәр эйәләренә үҙҙәренең пайы өсөн уңыштан өлөш бүлеп бирелергә тейеш.

Һуңғы ваҡытта инвестициялар йәләп итеү маҡсатында ситтән килгән кешеләргә өмөт бағлайҙар. Агрохолдингтар, агрокомпаниялар төҙөйҙәр. Инвесторҙар урындағы ауыл тормошон яҡшыртыу маҡсаты менән килмәй бит инде. Улар иң беренсе нәүбәттә үҙҙәренең мәнфәғәте менән килә.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА әҙерләне.**

КЕМ АЛЫҠ!

# БҮЛӘККӘ - "ДИНИ КАЛЕНДАРЬ"

**Мөхтәрәм милләттәшебеҙ! Бына тағы һине лә, баҫмабыҙҙы ла, ошо баҫманы ижад итеүселәрҙе лә һынау мәле етте. Гәзитебеҙҙе уҡыусы милләттәш туған телдәге баҫманы ниндәй дәрәжәлә һанлай һәм баһалай? Уның үҙ милләтенә, туған теленә ҡарата аң, рух, ихтирамы ниндәй кимәлдә? Баҫмабыҙҙағы һүҙ ҡеүәһе, фекер үткерлеге уның күңелен арбай, сәмен һәм ғәмен уята алырлыҡмы?**

Бына шулай, **2012 йылдың беренсе яртыһына гәзитебеҙгә яҙылыу барыуын иғлан итеп**, уҡыусыбыҙ һәм үҙебеҙ алдына ошо һорауҙарҙы ҡуйҙыҡ. Һәр ваҡыттағыса, уҡыусыны ылыҡтырыр вәғәҙәләребеҙ ҙә бар: күп һорауҙарығыҙға яуап бирер, ниндәйҙер ауырлыҡтарға юлыҡҡанда уларҙы еңер сара, борсолоуҙар мәлендә - йән тыныслығы, күңел төшөнкөлөгө булғанда - рухландырыр, сәмләндерер һүҙ әйтер матур йөкмәткеле баҫма алаҫаҡһығыҙ ҡулдарығыҙға.

**Бынан тыш**, әлбиттә, оптимистар өсөн **бүләктәр ҙә** булмай ҡалмаясаҡ. Оптимистар өсөн, тибеҙ, сөнки гәзитебеҙгә яҙылыу тураһындағы квитанцияларҙың "Мин барыбер бүләкһеҙ ҡалмайым!" тигән кешеләрҙән генә килеүен яҡшы беләбеҙ. "Киске Өфө"нө уҡыусыларҙың барыһының да оптимист булыуын теләйбеҙ, уларҙың ошондай сифаттарын уятыуҙы маҡсат итеп ҡуйбыҙ. **Ә октябрь айында гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән 30 кешегә 2012 йыл өсөн "Дини календарь" ебәрәбеҙ.**

**Әйткәндәй**, кемде бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтәнә шатлыҡ өҫтәр.

**"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә.** Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, ата-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

**Шулай итеп**, 2012 йылдың тәүге яртыһына гәзитебеҙҙең 50665 индекслыһына **348 һум 24 тингә**, 50673 индекслыһына (юридик шәхестәр өсөн) **378 һум 24 тингә** яҙыла алаһығыҙ.

Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog. kiskeufa.ru**.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Сентябрь айында гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән 30 кешегә 2012 йыл өсөн "Башҡортса дини календарь" вәғәҙә иткәйнек. Бына ул бәхетлеләр исемлеге:** Әлшәй районы Ҡармыш ауылынан Рәшит Арыҫланов, Ғафури районы Бурлы ауылынан Светлана Абдуллина, Красноусол ауылынан М. Фәткезаманов, Ташбүкән ауылынан Рәшиҙә Таһирова, Әбйәлил районы Дәүләт ауылынан Ғәйнур Әхмәткирәева, Үтәгән ауылынан Ҡасим Йәһүҙин, Ҡырҙас ауылынын Раил Бикйәнов, Байым ауылынын Әнүәрә Хәйбуллина, Ишемба́й районы Аҙнай ауылынан Миңйыһан Хәсәнова, А. Зиннәтуллина, А. Кинйәбулатов, Йылайыр районы Юлдыбай ауылынан Фәрит Рәмов, Баймаҡ районы Икенсе Әткол ауылынан Әкрәм Ҡәйепҡолов, Иҫке Сибай ауылынан А. Тимерәсова, Урғаҙа ауылынан Мәхмүтйән Йәрмөхәмәтов, Билал ауылынан Рафиҡ Әбйәлилов, Төркмән ауылынан Роза Ырыҫмөхәмәтова, Межгорье ҡалаһынан Ж. Хәйруллина, Иглин районы Меңйетәр ауылынан Зөлфирә Садыҡова, Хәйбулла районы Иҫәнгилде ауылынан Бөртөкбикә Ғәлина, Уфимский ҡасабаһынын Р. Алғушаев, Өфө ҡалаһынан Л. Ғәниева, Саҡмағош районы Саҡмағош ауылынан Музаяна Ғүмәрова, Миәкә районы Илсеғол ауылынан Гүзәл Ниғмәтуллина, Мәләүез районы Муллағол ауылынан Люциә Ғайсина, Учалы районы Озерный ауылынан Нәғимә Мөхәмәтова, Салауат районы Әлкә ауылынан Лена Ямалетдинова, Туймазы районы Ҡарамалы-Ғөбәй ауылынан Эльвира Хисаметдинова, Ҡырмыҫҡалы районы Ҡырмыҫҡалы ауылынан Ғәлинур Ишемғолов.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай йортонда "Гәзел һайлауҙар өсөн" килешеүенә ҡул ҡуйыу тантанаһы үтте. Килешеүгә "Берҙәм Рәсәй" партияһының төбәк сәйәси советы секретары Константин Толкачев, КПРФ-тың Башҡортостан рескомы бюроһы ағзаһы Илһам Ғәлин, ЛДПР-ҙың Башҡортостан төбәк бүлексәһе координаторы урынбаҫары Станислав Загурский, "Яблоко" партияһының Башҡортостан төбәк бүлексәһе рәйесе Сергей Наумкин, "Рәсәй патриоттары" сәйәси партияһының Башҡортостан төбәк бүлексәһе комитеты рәйесе Заһир Хәкимов, Дөйөм Рәсәй халыҡ фронтының Башҡортостандағы ауаплы координаторы Александр Дегтярев ҡул ҡуйҙы. Билдәләнеүенсә, килешеү гәзел һәм асыҡ һайлауҙар үткәреүгә булышлыҡ итәсәк.

✓Республика аграрийҙары Мәскәүҙә үткән "Алтын көҙ-2011" күргәҙмәһенән ике Гран-при алып ҡайтты. Рәсәй агросәнәғәт форумының юғары наградаһына Башҡортостан Хөкүмәте лайыҡ булды. Йәнә бер Гран-при күргәҙмәлә әүҙем ҡатнашҡаны өсөн Башҡортостан Умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәгенә бирелде. Был предприятие күргәҙмәлә 111 миҙал яулаңы. Башҡортостан аграрийҙары өлөшөнә йөмғеһе 449 миҙал эләккән: 277 - алтын, 105 - көмөш һәм 67 - бронза. "Алтын көҙ-2011" XIII Рәсәй агросәнәғәт күргәҙмәһендә донъяның 32 иленән 2500-ҙән ашыу предприятие һәм ойошма ҡатнашҡан. Рәсәйҙән 58 төбәк сығыш яһаған.

✓Күгәрсен районының Хоҙайбирҙе ауылында Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге БР Хөкүмәте премияһы лауреаттарын наградлау тантанаһы үтте. Быйыл был премияны "Кызыл таң" гәзитенең үҙ хәбәрсеһе Фәнүр Ғилманов; "Башҡортостан" гәзитенең үҙ хәбәрсеһе Сибәғәт Рахманғолов; "Туймазинский вестник" гәзитенең журналистар коллективы алды. Ә Күгәрсен районы үҙе был премияны Башҡортостан юлдаш телевидениеһының танылған журналисы Рита Өмөтбаеваға тапшырҙы.

✓Республикала ғаилә ҡороусыларҙың һаны кәмемәй. Былтыр һигеҙ ай эсендә 22818 ғаилә барлыҡҡа килһә, быйыл 22842 йәш ғаилә тыуған. Ләкин шуның менән бергә айырылышыуҙар ҙа арта. Республикала 11749 ғаилә тарҡалыу осрағы теркәлгән. Былтырғыға ҡарағанда был 852-гә күберәк. Быйыл 39656 бала донъяға килгән. Былтырғы менән сағыштырғанда, 1537 балаға күберәк. Үлем осрағы иһә 1,7 процентҡа артҡан. Шулай ҙа халыҡтың тәбиғи артыуы әлегә һаҡлана.

*МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ*

**Был әйтем "Ике икең дүрт була", "Яҙ үткәс, йәй була" тигән ғәмәлдәр кеүек бик еңел аңлашыла. Ысынлап та, атайың ғына түгел, халҡың да һине үҙ улы тип атаһын өсөн атай улы үҙенең туғандарының, ырыу-затының мәнфәғәте өсөн генә түгел, халҡы өсөн дә йәшәргә, уның хәҙергеһе һәм киләсәге өсөн фиҙаҡәрлек ҡылырға бурыслы булыуы хаҡында был әйтем. Шул уҡ ваҡытта халҡыңдың лайыҡлы улы булыуың атаңдың лайыҡлы улы булыуҙан башлана. Шул уҡ ваҡытта туғанлыҡтың яуаплылығы хаҡында шундайыраҡ әйтем дә бар: тыуған илеңде яратыуы рәхәт ул, һин яҡын туғаныңды яратып ҡара. Нисек кенә булмаһын, халҡыңдың улы булыуҙың оло яуаплылығы ла барҙыр. Дини тәғлимәттә иһә, был әйтемдең мәғәнәһе тағы ла киңәйтеберәк ҡарала.**

# АТАҢДЫҢ ҒЫНА УЛЫ БУЛМА,

## халҡыңдың да улы бул…



Беҙҙең Һаҡмар буйы ауылдарына ғына хас дини йолалар һаҡланып ҡалған һәм улар әле лә үтәлә килә. Был йолалар, асылда, кеше мәрхүм булғандан һуң йыназа үткәреү тәртиптәренә ҡағыла. Беренсеһе: мәрхүмдең мәйетен йорттан әхирәт йортона - зыяратҡа алып сығып китеү алдынан Дәүер сығыу йолаһы (мәрхүмдең ҡырҡ көнлөк ҡылыр гонаһтарын кемдер берәү үҙенә ала); икенсеһе: мәрхүмдең рухына аят бағышлағанда уның исеме алдынан "фәләндең ҡыҙы йә улы" тигән урында әсәһенең исемен әйтеү йолаһы. Был йолалар беҙ иҫ белгәндән алып үтәлә килеп, әле булһын дауам итә. Был юлы шул йолаларҙың икенсеһе, йәғни мәрхүмдең әсәһенең исемен атау хаҡында һүҙ йөрөтәйек. Ысынлап та, ни өсөн беҙҙең яҡ өлкәндәре был осраҡта атайҙың исемен ҡулланмай һуң?

Атайым мәрхүмдән бер нисә тапҡыр ни өсөн мәрхүмдең рухына аят бағышлағанда уның әсәһенең исемен атауыбыҙ хаҡында һорашып, һәр осраҡта ла шундайыраҡ яуап ала килдем: "Бәндәне кемдең табыуы һәм кем күкрәк һөтөн имеҙеп тәрбиәләп үҫтереүе күптәргә мәғлүм, йәғни уның кендек инәһенән башлап шаһиттары бар. Ә бына атайлыҡҡа килгәндә, мәсьәлә ҡатмарлыраҡ. Сөнки бер гонаһһыҙ ғиффәтле ҡыҙ бала йылғала һыу ингәндән һуң ауырға ҡалып, бала тапҡандан һуң атайлыҡ мәсьәләһендә шик барлыҡҡа килгән һәм уҡылған доға мәрхүмдең әруахына тәғәйен барып етеп, уға сират күперҙәре аша үткәндә еңеллек килтерһен өсөн әсәйҙең исеме әйтелә башлаған. Беҙ бит мәрхүмгә башҡаса ярҙам итә алмайбыҙ. Йыназаға бәйле булмаған аяттарҙа беҙ бит кешенең атаһының исемен әйтеп доға башҡарабыҙ. Дәүер сығыу ҙа мәрхүмгә сират күперҙәре аша үткәндә ярҙам булһын өсөн башҡарыла..."

Артабан атайымдан был йоланың ни өсөн тик беҙҙең яҡтарҙа ғына үтәлеүе хаҡында һорашҡайным, ул был йоланың беҙҙең төбәктә элек-электән йәшәүен һәм бының өсөн башҡа төбәк мөьминдәренең "Һеҙ дөрөҫ уҡымайһығыҙ", тип дәғүә белдереүен дә әйтеп үтте. Башҡа яҡтарҙа был йоланың булмауына үҙем дә һорашып инанғас, был мәсьәлә минең өсөн оҙаҡ ваҡыт сиселмәгән төйөн булып йәшәп килде. Арҙаҡлы ғалимыбыҙ һәм шағирыбыҙ ҡояш нурынан ауырға ҡалыусы ҡыҙ хаҡында ниндәйҙер сығанаҡтан уҡыуы хаҡында мәғлүмәт еткергәс, атайымдың әйткәндәренең уйҙырма түгеллегенә шигем кәмей төштө. Халҡыбыҙҙа "Елдә еленләгән, боҙҙа ҡолонлаған" тигән әйтемдең дә йәшәүе күпкә ишара.

Ошолар хаҡында уйлана торғас, ике төрлө фаразым да барлыҡҡа килде. Уларҙың тәүгеһе - был күренеште матриархат дәүеренә, икенсеһе - "фамилия" һүҙенең нигеҙендәге "фэм", йәғни "ҡатын-ҡыҙ" тамырына бәйләп аңлатыу. Тимәк, бында матриархат, унан һуңғы мәжүсилек культы элементтарының һуңғараҡ осорҙа барлыҡҡа килгән Ислам дине йолаларында дауам итеүе хаҡында һүҙ йөрөтөү урынлы булыр һымаҡ.

Шулай ҙа атайым килтергән дәлилдәргә ҡарата эҙләнеүҙәремде әле булһын дауам итәм. "Әл-әхзәб" сүрәһенең 4-се аятында: "Кеше күкрәгенә Аллаһ ике йөрәк ҡуймаған (әсәйегеҙгә тиңләштереп) зиһар ҡылған ҡатынығыҙ үҙ әсәйегеҙ хөкөмөндә түгел, аҫрау улығыҙҙы үҙ улығыҙ итмәгән. Был һүҙҙәр - һеҙҙең ауыҙҙан сыҡҡан һүҙегеҙ генә, ә Аллаһ дөрөҫөн әйтә, (хаҡ) юлдан алып бара. Уларға үҙ аталары исеменән өндәшмәгеҙ, Алла ҡаршыһында шулай ғәҙелерәк. Әгәр уларҙың аталарын белмәһәгеҙ, ул саҡта улар - һеҙҙең дин ҡәрҙәшегеҙ, һеҙҙең яҡынығыҙ. Яңылышыуығыҙ гонаһ түгел, күңелегеҙҙәге (насар) ниәт кенә - гонаһ. Алла ярлыҡаусы, шәфҡәтле", - тиеп әйтелә. Ошо һүҙҙәрҙе ҡат-ҡат уҡып, уларҙың мәғәнәһенә төшөнөргә теләгәндә атайым килтергән дәлилдәрҙең юҡтан ғына барлыҡҡа килмәгәнен аңлағандай булдым.

Ахыры дини әҙәбиәттәге бер хәҙискә барып юлыҡҡас, барлыҡ һорауҙарыма яуап тапҡандай булдым. Ул хәҙистә әйтелгәнсә, Әбүзәр бәйғәмбәрҙең: "Башҡа кешене үҙенең атаһы тип таныусы һәр кеше бының менән үҙ атаһына ышанмаусанлыҡ белдерә, һәм үҙен башҡа милләттең вәкиле итеп атаусы һәр кеше тамуҡта үҙ урынын алһын", - тигән һүҙҙәре бар.

"Атаңдың ғына улы булма, халҡыңдың да улы бул" тигән әйтемдең асҡыстары тап ошо хәҙистә ята ла инде. Унда ысын атайыңдың кем икәнлеген һин белмәҫкә лә мөмкинһең, был халәтеңде Аллаһы Тәғәлә ғәфү итер, әммә үҙеңде икенсе милләт вәкиле итеп күрһәтәһең икән, был халәтең менән тамуҡҡа "путевка" алаһың, тигән мәғәнә һалынған. Бик тәрән мәғәнә ята был әйтемдә һәм был хәҙистә. Уны үҙ асылынан беләкүрә ситләшкән һәм үҙ ирке менән башҡа милләт вәкиле булып киткән һәр бер башҡортҡа уҡытырға ине.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

*ШАҢДАУ*

# ИЛЛЕ ЙӘШТӘ...

## телемде яңынан өйрәндем

**"Киске Өфө" биттәрендә педагогика фәндәре кандидаты Вәкил Хажиндың башҡорт телен уҡытыу тураһында яҙған мәҡәләләрен ҙур иғтибар менән уҡып барам. Автор унда мине күп йылдар борсоған һорауҙарға яуап бирә. Үҙем башҡорт мәктәбен тамамланым. Мәктәптә яҡшы ғына уҡыным, әле һаман ятраҡан уҡытыусыларымды иҫкә алам. Бик төплө белем биргәндәренә рәхмәтлемен.**

Мәктәбемдән ҡалған яҡты тәьҫораттарҙы тик бер генә нәмә ғүмер буйы боҙа килде: башҡорт телен уҡытыу торошо. Иң яратмаған дәрестәремдең береһе ине ул. Уның сәбәбен мин уҡытыусыларҙан күреп килдем. Баҡтиһәң, ғәйеп уларҙа түгел икән. Вәкил ағай дөрөҫ әйтә: рус телен уҡытыуҙың ҡалыбын туранан-тура беҙҙең телгә күсереү - ҙур хата. Рус телен уҡытыу методикаһы бик төплө, телгә ярашлы булып тора. Рус телен урыҫтарҙың үҙенән дә яҡшыраҡ белеүебеҙ ошонан киләлер инде (Мин төҙөгән кроссвордтарҙағы башҡорт һүҙҙәрен ҡырҡ йәштән кесерәктәр таба алмай йонсой. Улар рус кроссвордтарына өйрәнгән). Шулай итеп, башҡорт теленә хас булмаған уҡытыу методикаһы әсә теленә ҡарата һөйөү тыуҙыра алмай.

Беҙҙең быуын кешеләре башҡортса йүнләп һөйләшә белмәй. Мин быны үҙемдән сығып әйтә алам. Русса фекерләүҙәребеҙҙе башҡортсаға тәржемә итеүҙән тора хәҙер беҙҙең был белем. Тура эфирҙа сығыш яһауы күптәр өсөн мөмкин булмаҫтай нәмә. Мин дә күп мәҡәләләремде редакцияларға рус телендә яҙып бирә инем. Тәржемәлә әйтә торған күп фекер юғала, кешегә барып етмәй. Шунлыҡтан, илле йәшкә барып еткәндә үҙ телемдә яңынан һөйләшергә, яҙырға өйрәнергә тура килде.

Тулыһынса Вәкил Хажин әйткәндәргә ҡушылам. Мәғариф өлкәһендә эшләгән белгестәр мотлаҡ рәүештә башҡорт телен уҡытыуҙың яңы методикаһын эшләүҙе телебеҙҙе һаҡлауҙың бер сараһы тип ҡуйырға тейеш. Юҡһа, тағы ла бер-ике быуындан башҡортса таҙа һөйләшә белгән кешеләр ҡалыуы икеле.

**Илдар ҒӘБИТОВ,**
**иҡтисадсы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан юлдаш телевидениеһында "Профили" тигән яңы программа старт ала. Документаль телевизион очерктар шәлкемен халыҡ-ара телевизион фестивалдәр лауреаты, "Башҡортостан" телерадиокомпанияһы дәүләт унитар предприятиеһының "Тамыр" балалар телерадиостудияһы алып барыусыһы һәм режиссеры Гөлназ Ғәлимуллина тәҡдим итә. 21 октябрҙән программа йома һайын 21.00 сәғәттә эфирға сығасаҡ.

✓Республикала йыл башынан алып тимер юлдарҙа өс бала һәләк булған. Хәүефле зоналағы вандализм һәм хулиганлығы өсөн 130 үҫмер административ яуаплылыҡҡа тарттырылған. Үҫмерҙәр араһындағы енәйәтселекте иҫкәртеү өсөн Башҡортостан полицияһы "Һаҡ бул, поезд!" профилактик операцияһы үткәрә. Күп осраҡта күҙәтеүһеҙ ҡалған үҫмерҙәр хоҡуҡ боҙа, шуға күрә полиция төп иғтибарҙы уларға бүлергә ниәтләй.

✓Йыл аҙағына тиклем Өфөнөң Дим биҫтәһендәге һәм Черниковская урамындағы балалар баҡсалары төҙөлөп бөтөргә тейеш. Бөгөнгө көндә тулы ҡеүәтенә Дим районындағы 102-се Башҡорт гимназияһын реконструкциялау, яңы ҡорамалдар һәм мебель менән йыһазландырыу эштәре алып барыла. Ленин районындағы 39-сы гимназия бинаһы ла реконструкцияланa. "Дим-8", "Колгуевский", "Йүрүҙән" биҫтәләрендәге мәктәп биналарын, Совет районындағы 23-сө мәктәпте проектлау буйынса эштәр алып барыла. Дим районындағы 101-се мәктәптең яңы бинаһын проектлау ҙа башланған.

✓Октябрҙә Өфөлә икенсел торлаҡ баҙарында тәҡдим ителгән уртаса хаҡ квадрат метрына 48,7 мең һум тәшкил итә. Йыл башынан алып хаҡтар - 8,65 процентҡа, бер айҙа 0,98 процентҡа артҡан. Мәғлүмәттәр буйынса, Өфөлә һатылған фатирҙың уртаса хаҡы - өс миллион һум тирәһе. Элиталы торлаҡ һәм юғары уңайлыҡлы торлаҡ сегментындағы хаҡтар диапазоны - квадратына 47 меңдән 123,3 мең һумға тиклем. Иң юғары хаҡ - Киров урамындағы элиталы йорттарҙа. Тәҡдим ителгән минималь хаҡ Өфө янындағы фатирҙарҙа (Аэропорт, Металлобаза) теркәлгән - квадрат метрына 15,3 мең һум. Бәләкәй ғаиләләргә тәғәйенләнгән иң арзан фатир ҡала янында 700 мең һум тора, иң ҡыйбат фатир ҡала үҙәгенән тәҡдим ителә - 18 миллион һум.

ӘЙТӘГҮР!

# ИНМӘГӘН ИШЕГЕҢ...

## тығылмаған тишегең булмаһын!

**Һуңғы йылдарҙа республикала йәштәр башланғыстарын үҫтереү өсөн күп нәмәләр эшләнә. Йәштәрҙең белемдәре камил булһын, тиеп, уҡыу йорттарына юғары талаптар ҡуйыла, торлаҡ алыу, эшкә урынлашыу мәсьәләләре еңеләйтелә. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, күп кенә йәш белгестәребеҙ эш урындары таба алмай йонсой. Был күренешкә аңлатманы ҡайҙа эҙләргә кәрәк: сәбәп йәштәрҙең үҙендәме, әллә дәүләт хәстәренең етерлек булмауындамы?**

**Айҙар ИШБИРҘИН, Силәбе өлкәһе Арғаяш башҡорттары ҡоролтайы рәйесе:** Минең фекеремсә, йәштәребеҙгә алған белеме буйынса эш табыуға унан эш тәжрибәһе талап итеүҙәре ҡамасаулай. Улар өс йыллыҡ эш тәжрибәһен ҡайҙан алһын? Ҡайһы бер һөнәр эйәләренең эш хаҡы ла аҙ. Әгәр йәштәргә эш башлап китеү өсөн ярҙам күрһәтелһә, улар ауыл ерендә эшкә ҡалырға ла ризалашыр ине. Был ярҙам дәүләт тарафынан күрһәтелергә тейеш. Тағы ла төрлө ойошмаларға танышлыҡ, ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡ аша эшкә урынлашыусыларҙы ла бер аҙ контролдә тоторға кәрәк. Сөнки танышлыҡ аша эшкә урынлашҡан ҡайһы берәүҙәрҙең яҡшы һөнәрмәндең урынын биләүе миҫалдары ла тулып ята бит. Ә юғары белеме, таланты булып та, шуға ярашлы эшкә урынлашыу мөмкинлектәре сикле йәштәр ҡара эш эшләргә йә бөтөнләй ситкә сығып китергә мәжбүр. Ә бит улар Мәскәү, Санкт-Петербург йә башҡа ҡалаларға барып, бынамын тигән эшкә урынлаша. Был осраҡта йәштәргә мин бер генә кәңәш бирә алам: уҡыған осорҙа үҙегеҙҙе күрһәтегеҙ, төрлө конкурс, бәйгеләрҙә, форумдарҙа ҡатнашығыҙ, һәләттәрегеҙҙе йәшермәгеҙ.

**Айсаф ХӘМИТОВ, Сибай ҡалаһы:** Беҙҙең йәштәр үҙҙәре лә пассивыраҡ бит. Унан һуң, һаман да күп кенә йәштәребеҙ ҡулынан һыра шешәһе төшмәй. Һыраға йәбешеп ята икән, артабан ул ана шул эскелек ҡолона әйләнеүҙән башҡаға эшкинмәйәсәк тә. Айыҡ кеше генә барыһына ла өлгәшә тормошта. Эшле, аҡсалы, уңышлы булыу - барыһы ла йәш кешенең үҙ ҡулында. Бында "Йәштәргә эш юҡ" тип дәүләтте генә ғәйепләү урынһыҙ. Йәштәргә күберәк үҙ көсөнә ышанырға кәрәк.

**Фәнүзә ӘМИНОВА, Баймаҡ ҡала һәм районы хакимиәтенең мәҙәниәт бүлеге белгесе:** Йәштәребеҙ эшһеҙ, сөнки улар урынын ялға китергә ашыҡмаусы пенсионерҙар ҙа биләй бит. Бер ваҡыт, пенсионерҙар эшләгән осраҡта йә эш хаҡын ғына, йә пенсияһын ғына аласаҡ, тигән закон да сыҡҡайны. Ошоно мин бик хуплайым. Йәштәргә эш табыуҙы ауырлаштырған икенсе сәбәпте уларҙың үҙҙәренең инициативалы булмауында ла күрәм. Уларға һәр эште өйрәтеп, төртөп күрһәтеп, быны эшлә, тегене эшлә, тип торорға тура килә. Был нимәнән килеп сығалыр, әйтә алмайым. Әллә ата-әсә улдарын баҫалҡы итеп тәрбиәләйме, әллә уҡыу йорттарында белем алғанда баҫым яһаламы? Һәр хәлдә, йәштәребеҙ "Мин быныэшләй алам!"тип түгел, ә "Әлләсе, мин быны эшләй алырмынмы икән?.." тип әйтеүсән...

**Радик ҒИЗЗӘТОВ, Стәрлетамаҡ ҡалаһы:** Эштең ояты юҡ, тиҙәр бит. Тоторға ла хеҙмәт юлынды ниндәй ҙә булһа эштән башлап китергә кәрәк. Бер ерҙә эшләй башлаһаң, нимәгә һәләтле икәнеңде иҫбат итәһең, яңы таныштар барлыҡҡа килә - бына шунда инде Хоҙай һиңә икенсе, лайыҡлы эшкә күсеү мөмкинлеген алдыңа сығарып та ҡуя. Иң мөһиме, бер урында тапанып торорға ярамай. Алдыңа ҡуйған маҡсатыңа өлгәшергә, юғарыға ынтылырға кәрәк. Йәштәрҙең инмәгән ишеге, тығылмаған тишеге булмаҫҡа тейеш.

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

**Өфө районының Шамонино ауылында тағы бер матур тантана булды: күптән көткән балалар баҡсаһы рәсми рәүештә асылды. "Ысыҡҡай" тигән исеме лә бар үҙенең. Матур биҙәлешенән дә, балаларының етәкләгәненән етәкләп, күтәргәнен күтәреп килгән ата-әсәләрҙең шатлығынан да нурға мансылды ул был көндә.**

# ЙӘЙҒОР ТӨҪТӘРЕНДӘ БАЛҠЫЙ

Тантанаға шулай уҡ Өфө районы хакимиәтенең төҙөлөш буйынса урынбаҫары Николай Кириллов етәкселегендәге делегация ла килгәйне. Николай Гергиевич менән балалар баҡсаһының буласаҡ хужалары - балалар ал таҫманы киҫкәндән һуң, барыһы ла бинаның эсен күрергә ашыҡты. Өй туйларға килеүселәр, әлбиттә, буш ҡул килмәгән. Һәр сығыш яһаусы үҙенең тәбрикләү һүҙенән һуң бүләген дә тапшырып, байрамға тағы ла ҡыуаныс өҫтәне. Балалар баҡсаһында тәрбиәләнәсәк бәләкәстәрҙең сығышы берәүҙе лә битараф ҡалдырманы. Роза Ғарифуллина, Айгөл Аҡкужина, Гөлсинә Хәйретдинова кеүек өҙә баҫып бейегән, моңло итеп йырлаған тәрбиәселәре булғанда, был балаларҙың һәләттәре киләсәктә тағы ла нығыраҡ асылыр, иншалла.

Яңы балалар баҡсаһы яңы йыһаздар, уйынсыҡтар, ғөмүмән, кәрәкле булған бөтөн нәмә менән комплектланған. Музыка һәм спорт залдары, медицина, психолог, логопед бүлмәләре бар. Аш бешереү, кер йыуыу бүлмәләре лә заман талаптарына яуап бирә. Ай үҫәһен көн үҫкән, йәш ата-әсәләр күпселекте тәшкил иткән Шамонино ауылында тағы ла бер социаль объект сафҡа инде. Уның ауыл халҡы өсөн дә әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ. Яңы эш урындары булдырылды. Ә инде 160 бала ата-әсәһе эштә булғанда бында хәстәрле тәрбиәселәр эргәһендә үҙен өйөндәге кеүек хис итәсәк, ата-әсәләр ҙә балалары өсөн тыныс буласаҡ.

**Гүзәл ИЛЕМБӘТОВА.**

Аһ-Аһ!

# НАҘАНЛЫҠМЫ...

## әллә ихтирам итмәүме?

**18 сентябрҙә "Туған тел" телеканалынан Илсөйәр Бәҙретдинова тигән йырсының татар телендә билдәле башҡорт халыҡ йыры "Порт-Артур"ҙы башҡарғанын тыңлап, шатланып ултырам. Ғәҙәттә, ундай боронғо башҡорт халыҡ йырҙарын татарҙар йырламай торғайны. Шуға шатланып тыңланым йырсыны. Тик шатлығым йырҙың аҙағына тиклем генә булды. Йыр аҙағында "Порт-Артур" - татар халыҡ йыры" тигән яҙма килеп сыҡмаһынмы!**

Икенсе бер аңлайышһыҙ күренеш хаҡында ла әйтмәй үтә алмайым. Һуңғы ваҡытта "Ихлас" мәсетенең реклама, вывескалары тик татар телендә генә яҙыла башланы. Дин әһелдәре татыулыҡ, ихтирамлылыҡ һүҙҙәрен ҡулланырға ратһалар ҙа, ысынбарлыҡта бөтөнләй киреһен эшләйҙәр түгелме? Республиканың рәсми һәм дәүләт теле булған башҡорт телен ихтирам итмәү була түгелме был? Башҡортостандың баш ҡалаһы Өфөнө Ҡаҙан менән бутай башланылармы, юғиһә? Әлеге мәлдә мәсеттең оло юлға ҡарап торған реклама таҡтаһына ҡорбан салыуға татарса өндәмә яҙып эленгән. Ғөмүмән, "Ихлас" мәсетендә эшләүсе дин әһелдәре Башҡортостанда башҡорт теле - рәсми тел икәнен беләләрме икән? Дини рекламаларҙы, вывескаларҙы күҙәтеп, төҙәтеп, фатиха биреп ултырыусылар бармы икән? Ә "Туған тел" программаһында мәҙәни һәм сәнғәт ҡомартҡыларының ҡайһы халыҡтыҡы икәнен кемдәр бутап ултыра икән?

**Салауат МОСТАФИН.**
**Өфө ҡалаһы.**

ЙӨҘӨН КҮРЕП...

# ДАН КҮТӘРГӘНДӘРГӘ...

## бындай һәйкәл кәрәкме?







Баш ҡалабыҙҙың Ленин урамының осонда урынлашҡан был йорт мемориаль таҡталарға бай. Әммә был таҡталарҙы элгән, уның эргәһенән көн дә тиерлек эшкә йөрөгән кешеләр ошо хаталарҙы күрмәй микән? Был таҡталар һәйкәлдең бер төрө бит: улар дан күтәреп тора.

Ә хәҙер Әхмәтзәки Вәлиди һәм Аксаков урамдары киҫелешендәге ошо яҙыуға иғтибар итегеҙ: баҡтиһәң, "Кофетерий" (руссаһы ла дөрөҫ түгел - кафетерий була бит) тигән һүҙ "Кафе төрө" тип тәржемә ителә икән башҡортсаға. Ай-бай, наҙанлыҡтың сигенә сығып барабыҙ түгелме?

**Илдар ҒӘБИТОВ.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓**Дим районы.** Тиҙҙән районда 200 урынға иҫәпләнгән заманса балалар баҡсаһы, көнөнә 250 кешене ҡабул итеү ҡеүәтенә эйә поликлиника сафҡа инәсәк. Декабрҙә инде 102-се башҡорт гимназияһы һәм "Магнит" супермаркеты үҙ ишектәрен асасаҡ.

✓**Калинин районы.** Инорс биҫтәһендә һигеҙ төркөмгә иҫәпләнгән яңы балалар баҡсаһы үҙ ишеген асты. Ул заман талаптарына, янғын, санитар-эпидемиология нормаларына һәм ҡағиҙәләренә тап килтереп төҙөлгән.

✓**Киров районы.** Салауат Юлаев майҙанында "Ҡайнар йөрәктәр" вуздарҙың һәм махсус урта уҡыу йорттары студенттарының ижади фестивале асылды. Был сара уҡыу йылы һуҙымында райондың иң яҡшы үҙешмәкәр коллективтары араһында дауам итеп, 2012 йылдың яҙында гала-концерт менән тамамланасаҡ.

✓**Ленин районы.** "Һаҡланғанды Хоҙай һаҡлар", тип юҡҡа әйтмәйҙәр. Ошо хәҡиҡәтте тағы бер раҫлап, районда "Jet" күңел асыу комплексында террористик акция ихтималлығында хеҙмәткәрҙәрҙе һәм килеүселәрҙе яҡлау һәм һаҡлау буйынса махсус операция үтте. Бындай саралар артабан да даими уҙғарылып торасаҡ.

✓**Октябрь районы.** Ошо көндәрҙә райондың 28 ғаилә пары алтын һәм гәүһәр туйын билдәләне. Улар өсөн хакимиәттә инде йолаға әүерелгән тантана ойошторолдо, юбилярҙарҙы хакимиәт башлығының гуманитар һәм социаль мәсьәләләр буйынса урынбаҫары Гүзәл Фәйзуллина тәбрикләне.

✓**Орджоникидзе районы.** Өфө дәүләт нефть-техник университетында Йәштәрҙең дискуссия форумы үтте. Бәхәс Дәүләт Думаһына һайлауҙар алдынан ойошторолғанға күрә, көнүҙәк темаға ҡағылды: йәштәргә сәйәси тормошта ҡатнашыу кәрәкме, әллә энергияларын икенсе өлкәгә йүнәлтеү яҡшыраҡмы? Һөҙөмтә сәйәсәт файҙаһына 2:0 иҫәбе менән тамамланды.

✓**Совет районы.** И. Якутов исемендәге ҡала паркы 50 төп ағас менән тулыланды. Уларҙы "Балалар хыялы оазисы" ижад киностудияһында шөғөлләнеүсе балалар ултыртты. Был сара тураһындағы видеосюжет "Экология - балалар күҙлегенән" документаль фильмына индереләсәк һәм декабрҙә Өфөлә беренсе тапҡыр үтәсәк фестивалдә күрһәтеләсәк.

✓ *Рәсми мәғлүмәттәр буйынса, илдә ике миллиондан ашыу эскесе теркәлгән. Ләкин һаулыҡ һаҡлау буйынса Дәүләт Думаһы депутаты Николай Герасименко фекеренсә, Рәсәйҙә 20 миллионға яҡын кеше хроник алкоголизмдан яфалана.*



*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# АУЫРЫРҒАМЫ...

## әллә ауырып тормаҫҡамы?



**1 июлдән РФ Һаулыҡ һаҡлау һәм социаль үҫеш министрлығы ҡарарына ярашлы, бөтөн Рәсәй территорияһында эшкә яраҡһыҙлыҡ тураһындағы бланкының яңы формаһы ҡулланыла башлағайны. Яңы бланк иҫкеһенән форматы, биҙәлеше менән генә түгел, ә тулыһынса автоматик эшкәртелә алыуы менән айырыла. Бының өсөн кәрәкле мәғлүмәт "йәшерелгән" штрих-код һәм кодтар ҡулланыла. Яҡын арала был бланкыларҙы табиптар компьютерҙа тултыра башлаясаҡ.**

Был яңылыҡ үҙ көсөнә инеп, ике ай үтеүгә, эксперттар тағы шау күтәрҙе. Йәнәһе, министрлыҡ тарафынан индерелгән бюллетень тултырыуҙың яңы нормалары табиптар һәм ауырыуҙарға өҫтәмә эш кенә тыуҙыра. Ысынлап та, бюллетень яраҡһыҙ тип иҫәпләнһен өсөн яңы ҡағыҙәләрҙе саҡ ҡына боҙоу ҙа етә. Мәҫәлән, хәҙер эшкә яраҡһыҙлыҡ тураһындағы документ мотлаҡ баҫма хәрефтәр һәм ҡара төҫтәге капилляр, гель йәки ҡаурый ручка менән тултырылырға тейешле. Ә бына шариклы ручка менән бюллетень тултырырға ярамай. Яҙыуҙар ячейка сиктәренән сыҡмаҫҡа, хәрефтәр уның ситтәренә тейеп тормаҫҡа, поликлиниканың (дауахананың) мисәте бланкының мәғлүмәт өлөшөнә сыҡмаҫҡа тейеш. Табип тарафынан эшләнгән һәр төҙәтмә бюллетенде яраҡһыҙ итә, уның буйынса ауырыуға пособие түләмәйәсәктәр. Әгәр ҙә эш биреүсе бланкыны тултырғанда хата яһай икән, ул махсус ҡағыҙәләр буйынса төҙәтмә индерә ала: хаталы яҙыу иплэп кенә һыҙыла, бланкының артҡы яғында төҙәтелгән вариант яҙыла һәм "төҙәтелгәнгә ышанырға" тигән яҙыу яҙып, уны эш биреүсенең ҡултамғаһы һәм мисәте менән нығытып ҡуя. Хаталарҙы башҡа юл менән төҙәтеү тыйыла.

Әгәр ҙә табип тарафынан хата ебәрелгән һәм уны кадрҙар бүлегендә ҡабул итмәйҙәр икән, һеҙгә уны яңынан тултыртып алырға тура киләсәк. Был, әлбиттә, өҫтәмә ауырлыҡтар тыуҙыра. Мәҫәлән, эшкә яраҡһыҙлыҡ тураһындағы документты яңынан юллап йөрөү өсөн эш ваҡытында дауаханa юлын тапарға тура киләсәк. Эш урынында дүрт сәғәт дауамында булмау прогул тип иҫәпләнә, бының өсөн эш биреүсе һеҙҙе эштән ҡыуырға ла хоҡуҡлы. Тимәк, бындай хәл килеп сыҡмаһын өсөн үҙ иҫәбеңә ял алырға тура киләсәк.

Был өлкәлә тағы бер яңылыҡ бар. 2013 йылдан ауырыу осорона эшкә һәләтһеҙлек тураһындағы документты эш биреүсе түгел, ә Социаль страховка фонды түләй башлаясаҡ. Был документҡа хәҙер подразделениеның етәксеһе түгел, ә генераль директор ҡул ҡуясаҡ.

Дәүләт Думаһының хеҙмәт һәм социаль сәйәсәт буйынса комитеты рәйесе Андрей Исаев белдереүенсә, яңы формалағы хеҙмәткә яраҡһыҙлыҡ документын 2013 йылдан тап ошо фонд түләйәсәк. Әлегә тиклем уны эш биреүсе түләй һәм түләнгән саралар тураһында Социаль страховка фондына отчет бирә ине. Ошо уҡ йылда хеҙмәт кенәгәләренең көсөнән сығыуы һөҙөмтәһендә был үҙгәрештәр күп һорауҙар тыуҙыра. Сөнки элек эшкә һәләтһеҙлек осорона түләү эш стажына һәм хеҙмәткәрҙең уртаса йыллыҡ эш хаҡына бәйле ине. Хеҙмәт баҙары эксперттары раҫлауынса, был яңылыҡ халыҡта ҙур хәүеф уята. Ә шулай ҙа хеҙмәткәрҙәр отолоп ҡалмаҫ, тип ышанғы килә.

*ҺОРАУ - ЯУАП*

## ТУЛЫ КӨН ЭШЛӘЙ АЛМАҺАМ...

**"Балама әле йәш тә тулмаған, шулай ҙа мин тулы булмаған көнгә эшкә сығырға теләйем. Был осраҡта бала ҡараған өсөн пособие һаҡланамы? Эш биреүсе риза булмаһа, ни эшләргә?"**

Тулы булмаған көн эшләргә теләһәгеҙ, РФ Хеҙмәт кодексының 93-сө һәм 3-сө бүлегендәге 256-сы статьяларына һылтанып, эш биреүсе исеменә ике данала ғариза яҙығыҙ, икенсе дананы, ғаризағыҙҙы тапшырыуығыҙ тураһында билдә һуктырып, үҙегеҙгә алып ҡалығыҙ. Ғаризағыҙҙа тулы булмаған эш көнө менән ҡасанға тиклем эшләргә теләүегеҙҙе, шулай уҡ эш аҙнаһы йәки эш көнөнөң оҙайлығын билдәләүҙе һорап яҙығыҙ. Эш биреүсе рөхсәттән баш тартһа, Хеҙмәт федераль инспекцияһына һәм судҡа мөрәжәғәт итегеҙ. Үҙ белдегегеҙ менән эш көнөн ҡыҫҡартыуға юл ҡуймағыҙ, сөнки был хеҙмәт дисциплинаһын боҙоу булып иҫәпләнә. Тулы булмаған эш көнөндә эшләгәндә бала ҡараған өсөн пособие түләү һаҡлана.

## ЕР ҺОРАП, ҒАРИЗА ЯҘЫҒЫҘ

**Мин пенсионер, хеҙмәт ветераны, 35 йыл медицина өлкәһендә эшләнем. Һаулығым буйынса ҡаланан ситтә йәшәргә теләйем, ләкин баҡсам юҡ. Миңә нисек итеп ер участкаһы алырға була, ташлама тейешме?**

- Ер участкалары бушлай түбәндәге өс төр категория кешеләргә бүленә:

1) торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға мохтаж сифатында иҫәптә тороусылар;

2) 35 йәшкә тиклемге йәш ғаилә башлыҡтары;

3) торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға мохтаж булмаған бюджет өлкәһе хеҙмәткәрҙәре.

Тимәк, һеҙгә ер участкһы бүлеүҙе һорап, ҡала хакимиәтенә ғариза менән мөрәжәғәт итергә кәрәк.

## ҮҘЕГЕҘ ӨСӨН ТҮЛӘГЕҘ

**Ҡыҙым менән икебеҙ яртышар өлөштән бер фатирға хужабыҙ. Ҡыҙым - дачаһында, ә мин икенсе ҡатыным менән уның торлағында йәшәйбеҙ. Ҡыҙым коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләргә теләмәй, фатирҙы һатыуға ла ризалығын бирмәй. Коммуналь хеҙмәттәр өсөн бер үҙемә түләүе ауыр. Хәҙер 8 йыл шулай дауам итә. Миңә ни эшләргә?**

Ярты фатир милексеһе булараҡ, коммуналь хеҙмәттәргә үҙ өлөшөгөҙ өсөн генә түләргә бурыслыһығыҙ (РФ граждандлыҡ кодексының 249-сы статьяһы). Кәңәшебеҙ шул: үҙегеҙ өсөн генә түләгеҙ. Бының өсөн хеҙмәтләндереүсе ойошмаға үҙ өлөшөгөҙгә милексе хоҡуғығыҙҙы иҫәпкә алып, коммуналь хеҙмәттәр өсөн айырым иҫәп-хисап эшләүҙәрен һорап мөрәжәғәт итегеҙ. Бынан тыш, суд тәртибендә артыҡ түләнгән (ҡыҙығыҙ өсөн) аҡсаны кире ҡайтарып алыу хоҡуғына эйәһегеҙ (әгәр тейешле чек ҡағыҙҙарығыҙ һаҡланған булһа). Закон шулай уҡ ҡыҙығыҙ ризалығынан башҡа ла фатирҙағы үҙ өлөшөгөҙҙө һатып ебәрергә мөмкинлек бирә. Был осраҡта хаҡы фатирҙы тотошлай һатыуға ҡарағанда аҙыраҡ буласаҡ, әлбиттә.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

*ҮӘТ, ӘЙ!*

## МӘЖБҮРИ ДАУАЛАРҒА

**Хоҡуҡ боҙоуҙарҙы иҫкәртеү буйынса РФ Хөкүмәте комиссияһы ултырышында РФ эске эштәр министры Рәшит Нурғәлиев илдә алкоголизм һәм наркоманлыҡ күрештәренең арта барыуына борсолоу белдереп, насар ғәҙәттәрҙән арына алмағандарҙы мәжбүри дауаларға тәҡдим итте. "Проблема менән ошо ысул ярҙамында ла көрәшеү - күптән өлгөрөп еткән мәсьәлә. РФ хөкүмәтенә тейешле тәҡдимдәр индереү буйынса эшләйәсәкбеҙ",- тине министр.**

Наркотиктар әйләнешен контролдә тотоу буйынса Федераль хеҙмәт мәғлүмәттәренә ҡарағанда, Рәсәйҙә 550 меңгә яҡын наркоман теркәлгән (башҡа сығанаҡтар буйынса - 870 ). Рәсми мәғлүмәттәр айсбергтың башын ғына күрһәтә, ти эксперттар. Ысынында иһә Рәсәйҙә 2,5-4 миллион наркоман иҫәпләнә, тип фаразлана. Наркоманлыҡ - тәү сиратта йәштәр проблемаһы: наркомандарҙың 80 проценты утыҙға ла етмәгән, әммә был йәшкә уларҙың һәр бишенсеһе генә барып етә ала.

Рәсми мәғлүмәттәр буйынса, илдә ике миллиондан ашыу эскесе теркәлгән. Ләкин һаулыҡ һаҡлау буйынса Дәүләт Думаһы депутаты Николай Герасименко фекеренсә, Рәсәйҙә 20 миллионға яҡын кеше хроник алкоголизмдан яфалана.

Алкоголизм һәм наркоманлыҡтан мәжбүри дауалау системаһы (дауалау - хеҙмәт профилакторийҙары) Рәсәй биләмәһендә 1974 йылда индерелгән була (беренсе профилакторийҙар Ҡаҙағстанда ун йылға иртәрәк асыла). 20 йылдан һуң ул бөтөрөлә. Уларҙы яңынан асыу идеяһын яҡлаусылар хәҙер йәмәғәтселек араһында ла арта бара. Уйланырға урын бар.

## РИШҮӘТ БИРӘҺЕҢМЕ?

**Ришүәтселек менән нисек кенә көрәш алып барылмаһын, ул көндән-көн тамыр йәйә бара кеүек. Былтыр 12 мең кешенең ришүәт алыуы теркәлә. Ләкин уларҙың яртыһы ғына яуапҡа тарттырыла. Күбеһе 500-10 мең һум күләмендә ришүәт алғанда тотола, ғәҙәттә, улар - ябай хеҙмәткәрҙәр. Ысын коррупционерҙар иһә яҙаһыҙ ҡала.**

Илдә ришүәттең уртаса күләме 400 мең һум тәшкил итә. Ә рәсәйлеләрҙең дүрттән бер өлөшө йылына бер тапҡыр булһа ла ришүәт биреүен таный. Дәүләт Думаһының Хәүефһеҙлек буйынса комитеты башлығы Владимир Васильев әйтеүенсә, чиновниктарҙы, полицияны контролдә тотоу өсөн йәмәғәт институттарын йәлеп итергә кәрәк. Ләкин ришүәтселек - йоғошло сир икәнен бер кем дә инҡар итә алмай. Бөгөн ул яман шеш кеүек бөтә өлкәләрҙе лә ялмап алған. Шуға күрә һәр кемгә үҙ-үҙен контролдә торға ла кәрәк буласаҡ.

# Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



### Быуындар һыҙлағанда

❖ Йәш уҫаҡ бөрөләре һәм япраҡтарын ваҡлап, марляға урағыҙ һәм ҡайнап торған һыуға төшөрөгөҙ. 1-2 минуттан алығыҙ һәм һыҙлаған быуындарға һалығыҙ. Өҫтөнән йылы итеп урағыҙ.

❖ 50 грамм лавр япрағын йыуып, һыуыҡ һыу менән сайҡатығыҙ. Эмалле кәстрүлгә һалып, 250 грамм һыуыҡ һыу ҡойоғоҙ. Кәстрүлде аҡрын ғына янған утҡа ҡуйып, һыуы 1-1,5 сантиметрға тиклем кәмегәнсе ҡайнатығыҙ. Аҙаҡтан һарҡытып, 4 өлөшкә бүлегеҙ. 4 көн дауамында бәләкәй йотомдар менән көнө буйына эсергә. Икенсе курсты 1,5 йылдан ҡабатларға.

### Алма һеркәһе әҙерләү

Алманы (бигерәк тә "Антоновка" сорты яҡшы) уртаһы менән бергә эре тешле ҡырғыстан үткәрегеҙ. Килеп сыҡҡан массаны (0,5 литр һыуға 400 грамм алма бутҡаһы иҫәбенән) банкаға һалығыҙ һәм ҡайнатып һыуытҡан һыу ҡойоғоҙ. Һәр литр һыуға 100 грамм бал йәки шәкәр һәм 10 грамм сүпрә һалығыҙ. Сүпрә менән бергә 20 грамм ҡара икмәк һалырға ла була. Һауытты асыҡ ҡалдырабыҙ. 10 көн дауамында был һауытты 20-25 градус йылылыҡта, ҡараңғы урында тотоғоҙ һәм 2-3 тәүлеккә бер тапҡыр ағас ҡалаҡ менән болғатып торoғоҙ. Ун көн үткәс, банкалағы шыйыҡлыҡты марля аша һөҙөп, икенсе банкаға ҡойоғоҙ һәм әсетергә ҡуйығыҙ. Ошо стадияла 1 литр шыйыҡлыҡҡа 50 грамм шәкәр өҫтәргә кәрәк. Болғатмайынса ғына банканың ауыҙын марля менән ҡаплайбыҙ һәм йылы урынға ҡуябыҙ. Алма һеркәһе, ғәҙәттә, 40-60 көн эсендә өлгөрә, ул яйлап асыҡ төҫкә инәсәк һәм тәмләнәсәк. Уның асыҡ төҫкә ингән өлөшөн марля аша һөҙөп алырға һәм ҡуйы өлөшөн ташларға кәрәк буласаҡ. Был тәбиғи һеркәне һыуытҡыста һаҡлағыҙ, ул ни тиклем оҙағыраҡ һаҡлана, шул тиклем файҙалыраҡ була.

Алма һеркәһе яҡшы антисептик, уның менән яраларҙы, ҡырҡылған урындарҙы эшкәртәләр. Ул артериаль ҡан баҫымын түбәнәйтергә булышлыҡ итә, шулай уҡ нервылар ҡаҡшағанда алма һеркәһен эсергә тәҡдим ителә. Бының өсөн көнөнә өс тапҡыр 1 стакан һыуға 2 балғалаҡ алма һеркәһе өҫтәп эсергә. Ангина ваҡытында 1:1 иҫәбенә һыу менән болғатып, һәр сәғәт һайын тамаҡты сайҡатырға.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**




# МИЛЛӘТ ТӘРБИӘЛЕ,

## ҡатындары тәрбиәле булһа

**Ҡатындың вазифаһы фәҡәт ашарға бешереү, ятыр урын әҙерләү, өй йыйыштырыу, бала ауырыһа, һөт биреп яткырыуҙан ғына ғибәрәт, тип уйлаған ирҙәр булыр. Шулай уҡ быларҙы ла эшләмәгән ҡатындар булғаны мәғлүм. Ғаилә бер кескәй генә дәүләт булһа, уның менән идара итеү ҡатын ҡулында, шуға ла уның вазифаһы әле әйтелгән нәмәләр генә түгел, ә бер дәүләтте ҡарау ҡәҙәре ололор.**

Ғаиләлә булғанды тәрбиәләү, ғаиләгә хас булған сығымдар һәм килемдәрҙе тәртиптә тотоу, ғаилә ағзаларының барыһына ла эштәр бүлеп биреп эшләтеү, араларында ҡаршылыҡ килеп сыҡҡанда, ике яҡты ла ризалатырлыҡ итеп килештереү, күршеләр йәки башҡалар менән ғаилә араһына һыуыҡлыҡ төшкәндә йомшаҡ күңел менән дуҫлаштырыу - ҡатын вазифаһылыр.

"Ҡатын - фәҡирлеккә ҡаршы бер ғәскәрҙер, ватаны - өй, хәрби фәне - йорт менән идара итеү, ҡоралы - энә менән ҡайсылыр", тип әйтәләр. Ләкин яңғыҙ ғәскәр булмай, килешеүҙе хөкөм итеүсе, əҙәпкә өйрәтеүсе, вәғәз һөйләүсе булған кеүек, берләштереүсе башҡа нәмәләр ҙә булыр.

Аҡыллы ҡатын һәр эшендә урталыҡта булыр, шәриғәткә ҡаршы булмаған урында иренән ризалыҡ алыр, иренең ата-әсәһен, нәҫелен, дуҫтарын хөрмәт итер, дошмандары менән мөнәсәбәттә булмаҫ, мал тота белер, уны әрәм итеүҙән һаҡланыр. Ире эштән ҡайтып ингәндә шатлыҡ күрһәтер. Иренә күндәм булыу, ул теләгәнсә йәшәү ҡатындың бәсен төшөрмәҫ. Был ғәмәле менән ул үҙенең күркәм холоҡло, тыйнаҡ икәнлеген һәм үҙенән аҡыллы кешенең дәрәжәһен танып, уның тарафынан яҡлаулы булыуын бәхет тип һанаусы икәнлеген иҫбат итеп, иренең дә, барлыҡ таныштарының да мөхәббәтен яулар.

Тәрбиәле ҡатындар биҙәнеү әйберҙәре, кейемдәр мәсьәләһендә еңел ҡылыҡлы ҡатындарға эйәрмәҫ. Ире тормош өсөн кәрәкле нәмәләрҙе булдырыу юлында йөрөгәндә, йәки һәр тарафҡа балаларын уҡытыу мәсьәләһендә йүгергәндә, өйҙә торған ҡатынға үҙен лайыҡлы тотоу кәрәк. Ҡатындар хеҙмәте өй эсендә булғанлыҡтан, байлыҡ күтәрмәслек кейемдәргә ул ҡәҙәре мохтаж булмаҫ.

Ире көйөнгәндә, асыуы килгән ваҡытта уға ҡаршы һүҙ һөйләү килешмәй. Аҡыллы ҡатындың эше - яғымлылыҡ күрһәтеп, иренең асыу утын һүндереү, әгәр мөмкин түгел икән, сабыр итеү. Әгәр ҙә ире ятҡаш йәки әскесе түгел икән, уның башҡа кәмселектәрен ҡатындар ғәфү итә белергә тейеш. Ата кеүек шәфҡәтле, ҡәрҙәш кеүек мәрхәмәтле, донъя йөгөн һәм әхирәт бәхетен уҙ ҡулында тотҡан ирҙең йәмһеҙлегенә йә башҡа кәмселектәренә күҙ йомоп, уның хәлен яҡшыртыу тейешлегенә шик юҡ.

Ошо урында ҡайһы бер әҙиптәрҙең уҙ ҡыҙына һөйләгән нәсихәттәре урынлы булыр. "Ирең тураһындағы серҙәрҙе күрше ҡатындарға һөйләүҙән һаҡ бул! Сөнки уларҙың күптәре - һинең асыуы ваҡытында һине һәләк итәсәк ҡәнәш бирерҙәр, "һинең урынында булһам - былай итер инем", тиерҙәр. Шулай ҙа, һинең урынында булһалар - һис бер нәмә эшләргә ҡулдарынан килмәҫ ине".

"Иренә тапшыра торған йәшлек сәскәләре көн һайын кәмеп торор, шуның өсөн улар урынына ғүзәл холоҡ һәм тоғролоҡ сәскәләрен үҫтереү тырышлығын күр!"

"Иң һуңғы васыятым шул: ялған һөйләмә! Ялған һөйләгән ҡатындың тәрбиәле ирҙәр алдында түгел, иң насар һәм иң яуыз бәдбәхет әҙәмдәр араһында ла хөрмәте юҡтыр һәм бер ваҡытта ла булмаҫ".

ТЕЛЕМ, ТЕЛГЕНӘМ...

# ЫСЫНБАРЛЫҠ - СИКҺЕҘ,

## ә уның беҙ танып белгәне - телебеҙҙә

**Алдағы мәҡәләләрҙә беҙ тел уҡытыуҙың маҡсаттарын билдәләгәйнек. Тел төҙөлөшөн һәр ваҡыт ысынбарлыҡ менән бәйләп уҡытырға кәрәк, тигән фекер ҙә булды. Ниңә шулай кәрәк икәнде тикшереп ҡарайыҡ.**



"Нимә ул тел?" тигән һорауға В.И.Ленин бөтәбеҙгә лә билдәле "Тел -аралашыу ҡоралы" тигән яуап биргән. Шулай ҙа Лениндың был яуабына "Тел ни өсөн кәрәк?" тигән һорау ҡулайыраҡ булыр ине һымаҡ. Ысынлап та, нимә ул тел? Был һорауға донъяның тел ғалимдары, философтар әллә нисәмә төрлө, ҡатмарлы-ҡатмарлы яуаптар биреп бөткән. Тел - ул ысынбарлыҡтың сағылышы, тигән Ф.Энгельс. Әлбиттә, телдә тотош ысынбарлыҡ сағыла алмай, сөнки ул сикһеҙ. Шуға ла тел төшөнсәһе эсенә кеше эшмәкәрлеге аша барлыҡҡа килгән ысынбарлыҡ, кеше донъяһы ғына инә ала. Ысынбарлыҡтың кеше донъяһына әлегә билдәле булмаған йә иһә бигүк кәрәге, мөнәсәбәте булмаған өлөштәре телдә сағылмай. Мәҫәлән, зоологтар, ер йөҙөндә миллионға яҡын бөжәк бар, тиҙәр. Шул миллион бөжәктең ике-өс тиҫтәһенә генә башҡорттар атама биргән. Ниндәйҙәренә? Бимазалаған, зыян килтергәндәренә (тараҡан, күгәүен, бет), файҙалыларына (бал ҡорто), күҙгә күркәмдәренә (күбәләк, сиңерткә, иңкеш). Ҡалғандарының зыянлымы, файҙалымы икәнлеге лә беленмәй, күҙгә лә ташланмайҙар, шуға уларға исем дә юҡ. Тағы бер миҫал. Башҡорт телендә дөйәгә ҡарата дөйә тигән һүҙ генә һаҡланған. Һөйләштәрҙә дөйә ҡолоно - бута һүҙе осрап ҡуя. Мәрйәм Бураҡаева әйтеүенсә, дөйәнең айғырын белдереүсе бура һүҙе элегерәк булған һәм "күрше һыйыры буралай" мәҡәлендә һаҡланып ҡалған. Ә дөйә аҫраған, шул мал арҡаһында көн күргән ғәрәптәрҙең (бәҙүәндәрҙең) телендә дөйәгә бәйле 200-ләп һүҙ бар икән. Элегерәк башҡорт тормошонда ат ҙур урын алып торған, хатта тормоштоң атһыҙ булыуы мөмкин дә булмаған саҡтарҙа беҙҙең ата-бабаларыбыҙ йылҡы малының төҫөн белдерер өсөн генә лә йөҙләгән һүҙ тыуҙырған. Бөгөн шуның нисәүһен беләбеҙ икән?

Шулай итеп, башҡорт теле ысынбарлыҡтың, донъяның халҡыбыҙ танып белгән өлөшөн сағылдыра. Һәм тел дә ысынбарлыҡҡа, мәғәнәгә нигеҙләнеп кенә уҡытылырға тейеш. Йәғни уҡыусы бер нәмә менән дә нығытылмаған теорияны ятлау урынына, фәнни, фәлсәфәүи белем ала, тел үҙенсәлектәрен милли-мәҙәни ерлектә өйрәнә. Уҡытыу процесының нигеҙендә "Шул шулай" принцибы түгел, ә "Ниңә шулай?" принцибы ятырға тейеш.

Миҫалға әлеге программаларҙың иң төп өлөштәренең береһе - һүҙ төркөмдәрен өйрәнеү юлдарын ҡарайыҡ. Ысынбарлыҡ - нимә ул? Ул - предметтар, әйберҙәр, йән эйәләре, күренештәр, ваҡиғалар. Телдә лә предметтарҙы белдереүсе һүҙҙәр - **исемдәр** - бар. Философиянан беләбеҙ: предметтың йәшәү ысулы, шарты - хәрәкәт. Ысынлап та, һәр предмет хәрәкәттә, процеста. Хәрәкәтһеҙ кеүек торған предмет эсендә лә процесс бара: иҫкерә, серей, уңа, үҫә һ.б. Беҙҙең телебеҙҙә лә процессы, хәрәкәтте белдереүсе һүҙҙәр - **ҡылымдар** - бар. Һәр бер предмет икенсеһенән айырыла. Сөнки уларҙың билдәләре бар. Телдә лә предмет билдәһен белдереүсе һүҙҙәр - **сифаттар** - бар. Предметтарҙы иҫәпләп була. Телдә лә предмет иҫәбен белдереүсе һүҙҙәр - **һандар** - бар. Шул уҡ философиянан беләбеҙ: хәрәкәттең, процестың рәүеше, урыны, ваҡыты, сәбәбе була. Телдә лә ошо мәғәнәләрҙе белдереүсе һүҙҙәр - **рәүештәр** - бар. Ысынбарлыҡтың төрлө яҡтарын белдереүҙәренә ҡарап, һүҙҙәр төркөмдәргә бүленә. Беҙ әле биш һүҙ төркөмөн билдәләнек. Алтынсы һүҙ төркөмө лә бар. Ул төркөмгә ингән һүҙҙәр алдағыларынан айырыла, шул уҡ ваҡытта уларға оҡшаш та. Айырыла - сөнки был һүҙҙәр аныҡ мәғәнә белдермәй; оҡшаш - сөнки улар алдағы төркөм һүҙҙәр белдергән мәғәнәләргә күрһәтә. Был һүҙҙәрҙе **алмаш** тип йөрөтәләр. Уларҙың төп функцияһы - күрһәтеү. Ысынлап та, алмаштар предметтарға ла (был, шул, кем, нимә, кемдер һ.б.), хәрәкәткә лә (ни эшләй, нитте), билдәгә лә (ундай, ниндәй), иҫәпкә лә (нисә, күпме, әллә ни саҡлы), рәүеш мәғәнәләренә лә(былай, нисек, ҡасан, ҡайҙа, ниңә) күрһәтә генә ала. Ошо алты һүҙ төркөмөн үҙаллы һүҙ төркөмдәре тип йөрөтәләр.

Һүҙ төркөмдәре тураһында беҙ алда килтергән мәғлүмәт дәреслектәрҙәге һәм программа билдәләгән белем күләменән кәм түгел. Тик тел күренештәренең һәр ҡайһыһы ысынбарлыҡ менән сағыштырылғас, мәғәнәһенә иғтибар бүленгәс, уларҙы аңлау, үҙләштереү, иҫтә ҡалдырыу күпкә еңеләйә. Был - бер. Икенсенән, һүҙ төркөмдәре буйынса эш алда әйтелгәндәр менән сикләнмәй. Артабан эштәр ижади һәләтлектәрҙе үҫтереүгә, уҡыусыларҙың тел менән файҙаланыу күнекмәләрен формалаштырыуға хеҙмәт итергә тейеш. Былары инде үҙаллы эштәр нигеҙендә атҡарыла. Ижади эштәр (мәҫәлән, әкиәттәр төҙөү, һөйләшеүҙәр, интервьюлар, сағыштырыу анализдары, тема буйынса һорауҙар биреү, һ.б.) бөтә уҡыусыларҙың да әүҙемлеген талап итә.

Хәҙер ярҙамсы һүҙ төркөмдәрен өйрәнеү юлдарын ҡарайыҡ. Программала ошо тел берәмектәрен өйрәнеү өсөн байтаҡ ваҡыт бүленгән, һәр ярҙамсы һүҙ айырым өйрәнелә, уларҙың асылы, оҡшашлыҡтары һәм айырмалары тураһында мәғлүмәт биреү ҡаралмаған. Беҙ иһә өс ярҙамсы һүҙҙе лә бер юлы сағыштырыу һәм дөйөмләштереү нигеҙендә өйрәнеүҙе тәҡдим итәбеҙ.

**Теркәүестәр** ике йәки бер нисә тиң тел берәмектәре араһында була. Бәйләүестәр эйәртеүсе һәм эйәреүсе һүҙ янында була. **Киҫәксәләр** айырым һүҙгә өҫтәмә мәғәнә генә бирә. Уларҙың айырмаһы омоним ярҙамсы һүҙҙәрҙе сағыштырғанда асыҡ күренә. Миҫалдар. 1. Әсәйем **менән** атайым ҡунаҡҡа киттеләр (теркәүес). Әсәйем атайым **менән** ҡунаҡҡа китте (бәйләүес). 2. Үсал, **тик** яуыз түгел (теркәүес). **Тик** һине һағынам (киҫәксә). 3. Мин **дә** һин генә барабыҙ (теркәүес). Мине **лә** үҙең менән ал (киҫәксә). Ошо һәм башҡа миҫалдарға ҡарап, уҡыусылар үҙҙәре һорау ҡуя, үҙҙәре һығымта яһай ала.

Гәзит битендә генә һәр һорауҙы, эштәр төрөн, күнегеүҙәрҙе ентекләп биреүе мөмкин түгел. Шуға ла, түбәндәгеләрҙе иҫтә тотоу зарур, тип иҫәпләйбеҙ. Тел теорияһын өйрәнеү үҙмаҡсат түгел. Ул уҡыусыларҙың тел һиҙеү һәләтлектәрен үҫтерергә, үҙаллы фекер йөрөтергә, һығымталар яһарға, ижад итергә өйрәтеү өсөн материал булып хеҙмәт итә. Шул уҡ ваҡытта даими ҡабатлауҙар, дөйөмләштереүҙәр, сағыштырыуҙар, һорауҙар төҙөү кеүек эштәр теорияһының үҙен дә аңлы үҙләштерергә һәм иҫтә ҡалдырырға булышлыҡ итә.

**Вәкил ХАЖИН,
педагогика фәндәре
кандидаты.**

**(Дауамы. Башы 39-41-се һандарҙа).**

ХӘТЕРКИТАП

**"Башланып китте уҡыуҙар "А" тигән хәреф менән"... тигән юлдар һәр кемдең хәтеренә уйылып ҡалып, ғүмеренең ахырына тиклем оҙатып баралыр, моғайын. Сөнки тәү тапҡыр хәреф таныған, уҡырға өйрәнгән китабың - ул "Әлифба". Һуңынан, бәлки, әллә ниндәй аҡыллы, фәһемле китаптар ҙа уҡыйһыр кеше, үҙе лә китаптар яҙалыр, билдәле яҙыусы йәки ғалим да булып китәләр, республика мәктәптәрендә балаларға башҡорт телендә уҡырға-яҙырға өйрәтәләр, әммә һәр инештең башы булған кеүек, уларҙың һәр ҡайһыһының да юл башы ябай ғына китаптан - "Әлифба"нан башлана. Ошо көндәрҙә Рәсәй Федерацияһының халыҡ мәғарифы отличнигы, БАССР-ҙың атҡаҙанған уҡытыусыһы, педагогика фәндәре кандидаты, доцент, башҡорт теленең уҡытыу методикаһы буйынса бик күп ғилми-методик хеҙмәттәр һәм мәктәп дәреслектәре, шул иҫәптән "Әлифба" китабы авторы Абдрахман Әбдрәхим улы Ғәлләмовтың тыуыуына 85 йыл тулды. Уның дәреслеге 1962 йылдан 2008 йылға тиклем 46 тапҡыр баҫыла. 1974 йылда Ғәлләмовтың "Әлифба"һы халыҡ-ара Лейпциг китап йәрминкәһенең дипломы менән билдәләнә һәм башҡа төрлө күргәҙмәләрҙә ҡатнашып, дипломдарға лайыҡ була.**



# УҠЫТЫУСЫЛАРҘЫҢ ДА...

## уҡытыусыһы булды Абдрахман Ғәлләмов!

**Тимерғәле КИЛМӨХӘМӘТОВ, профессор, БДУ-ның журналистика кафедраһы мөдире:** Абдрахман Әбдрәхим улы - ул башҡорт мәҙәниәтендә, башҡорт юғары белем биреү системаһында бик күренекле вәкил. Ул барыһынан да элек "Әлифба" авторы булараҡ билдәле. "Әлифба"ның ике китабын тәҙөнә. Улар береһенән-береһе матур булып донъя күрҙе. Шуларҙы сығарырға була нисек янып-көйөп йөрөгәне әле лә күҙ алдымда. Икенсе китапты әҙерләгәндә ул Ленинградҡа күп йөрөнө. Һөҙөмтәлә әсбаптың бай йөкмәткеһенә сағыулыҡ, тоҫ өҫтәлде.

Студент саҡта Абдрахман ағай беҙгә һабаҡ бирҙе: дәрескә матур итеп килеп инә, бөтән нәмәне ятҡа һөйләй ине. Бер ваҡытта ла ҡағыҙ тотоп, ҡағыҙҙан уҡып лекция һөйләмәне ул. Дәрестәре бик күңелле үтә ине. Темаһы һөйләй-һөйләй ҙә, аралаш шиғырҙар, үҙенең башынан үткән ваҡиғаларҙы һөйләп ебәрә ине.

Уның яратҡан шөғөлө - мәктәптәргә сығып йөрөү булды. Шулай үҙенең теорияһын практикала күрһәтте, раҫланы. Мәктәптәрҙә башҡорт телендә уҡытыу индерелә башлағас, миңә лә уның менән Миәкә, Бүздәк районларына барырға тура килде. Шунда Абдрахман ағайҙың ғәжәп матур итеп сығыш яһағаны хәтерҙә ҡалған. Бер идеяһы булһа, янып, тоҡанып, шуны ялҡынланып тормошҡа ашыра торған кеше ине ул. Студенттар араһынан талантлы йәштәрҙе тиҙ күреп ала, уларҙы ҡеүәтләй, дәртләндерә белде.

Ул иҫ китмәле шәп бейеүсе булды. Бейергә төшһә, бөтән халыҡты шаҡ ҡатыра ине инде. Берәй нәмә булһа: "Мин баймаҡланып алайым әле", - тиер ине, йәки маҡтанып алайым әле, тигәне инде. Эсендәге - тышында булды, асыҡ кеше ине. Ошо сифаттары менән үҙен яратты-рҙы. Мин уны бик яҡшы күңелле кеше итеп, беҙҙең мәҙәниәтебеҙгә, мәғариф системаһына ҙур өлөш индергән ғалим-практик тип хәтеремдә һаҡлайым. Абдрахман Әбдрәхим улының фәнни-педагогик эшмәкәрлеге, ижади хеҙмәттәре - башҡорт халҡының рухи донъяһын байытыу, туған телде һаҡлап ҡалыу һәм артабан үҫтереү хаҡына хеҙмәт итеүҙең юғары өлгөһө булып тора.

**Альберт ИСМӘҒИЛЕВ, мәғариф алдынғыһы, Дәүләкән районы:** Абдрахман Ғәлләмов, минең уҡытыусым, тәү сиратта, бик тә ихлас кеше булды. Дәрестәре бик фәһемле һәм ҡыҙыҡлы үтә ине. Ул йомшаҡ итеп тә, ҡаты итеп тә әйтә торғайны Мин эшләгән ваҡытта министрлыҡҡа килеп йөрөнө. Ҡыҫҡа һүҙле булды, күп һөйләмәне, әммә тапҡыр һүҙ әйтеп көлдөрә, әммә үҙе көлмәй торғайны. Үтә лә баҫалҡы кеше булды ул.

1986 йылда мәктәп реформаһы башланғас, башланғыс синыфтар буйынса инспектор булараҡ миңә "Әлифба"ға рецензия яҙырға ҡуштылар. Китап баҫылып сыҡҡайны инде. Рецензия яҙған ваҡытта күҙгә күренгән етешһеҙлектәрҙе уның үҙенә әйттем, әммә китап баҫылып сыҡҡайны инде, төҙәтеүҙәр индерелмәй ҡалды. Шунан һуң оҙаҡ та йәшәмәне Абдрахман ағай. 1999 йылда, уның китабындағы етешһеҙлектәрҙе иҫәпкә алып, үҙем "Әлифба" яҙҙым. Ул 2000 йылда баҫылып сыҡты. Республика буйынса Өфө, Стәрлетамаҡ, Салауат ҡалалары, Әлшәй, Дәүләкән, Бүздәк, Шишмә райондары, Силәбе өлкәһе Ҡонашаҡ районының ике мәктәбендә тәжрибә майҙансыҡтары асылып, ошо китап буйынса уҡынылар. Был дәреслек менән дүрт йыл эшләнеләр. Ләкин шуны ышаныслы әйтә алам: Абдрахман Ғәлләмовтың "Әлифба"һы - иң уңышлы "Әлифба". Нимәһе менән? Ул үтә лә ябай, текстары еңел уҡыла. Юҡһа, һуңғы ваҡытта Ғәлләмов "Әлифба"һы тип китап сығарҙылар, уны Абдрахман Әбдрәхим улының "Әлифба"һы тип әйтеп булмай. Сөнки унда бөтөнләй мәғәнәһеҙ, бала түгел, ҡапыл ғына өлкән кеше лә аңлай алмаған һөйләмдәр бар. Әҙәби яҡтан камил булмаған текстар бик күп.

**Ләлә БЕЙЕШОВА, "Аҡ тирмә" милли-мәҙәни үҙәге рәйесе:** Абдрахман ағайҙы мин йәш саҡтан беләм, сөнки Әй урамында уҡытыусылар өсөн йорт һалынып, бөтөн уҡытыусылар, шул иҫәптән ағайым менән еңгәм дә шунда күскәйне. Көүҙәгә бәләкәй генә, әммә бик йылғыр, алсаҡ күңелле, янып торған кеше ине Абдрахман Ғәлләмов. Һәр ваҡыт ағайымдар менән һөйләшкән ваҡытта үҙенең китаптарын, "Әлифба"ны төҙөү, камиллаштырыу, тел өйрәнеүҙе еңелерәк итеү тураһында һөйләшә торғайнылар. Ул үҙенең "Әлифба"һы менән беҙҙең башҡорт мәктәптәре, башҡорт мәғарифы өсөн бик ҙур эш эшләне. Уның башланғысы һаман дауам итә. Әсбап яҙырлыҡ лһа ла, заман талаптарынан сығып үҙгәртелһә лә, "Әлифба"ға нигеҙ һалыусы булып барыбер Абдрахман ағай тора.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Белем тауына үрләгәндә тәүге аҙымды матур китап - "Әлифба" буйынса яһаған меңәрләгән бала ғына түгел, яҡташтары ла билдәле ғалимды онотмай, уның тураһындағы иҫтәлекте мәңгеләштерергә тырыша. Башҡорт дәүләт университетының Сибай институтында Абдрахман Ғәлләмов исемендәге лингвистика дисциплиналары методикаһы кабинеты асылған. Яңы кабинет зауыҡ менән биҙәлгән. Унда А. Ғәлләмовтың ғаилә альбомындағы фотоларҙы, уның авторлығындағы китаптарҙы һәм уҡыу әсбаптарын күрергә мөмкин. Шулай уҡ был бүлмәлә башҡорт әлифбаһының яҙылыу тарихы ла урын алған. Киләсәктә, бәлки, был кабинет "Әлифба" тарихы кабинетына ла әүерелер әле.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әҙерләне.**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



# ФАҘЛАН КҮРГӘН БАШҠОРТТАР

**Тарихыбыҙҙы беләйек, өйрәнәйек, тип өндәшәбеҙ һиңә, Уҡыусы. Кешенең иң ҙур ҡыҙыҡһыныуы - тамырҙарын барлау булырға тейеш. Шул саҡта ғына ул маҡсатлы, ҡыҙыҡлы, мәғәнәле йәшәй, шул саҡта ғына уның йәшәйеш таяуҙары ныҡ була. Ә ырыуыңдың, халҡыңдың тарихын белмәү һине рухи ярлылыҡҡа килтерә, һине маңҡорт, меҫкен һәм етем итә икәнен аңлайыҡ. Том-том китаптар уҡырға түҙемлегең етмәһә, башҡорт тарихының бына ошондай бәләкәй-бәләкәй генә биттәренә күҙ һал.**

Беренсе тапҡыр башҡорттарҙы этнографик күҙлектән Ибн Фаҙлан - Волга башҡорттары батшаһына Бағдад хәлифе әл-Мөктәдирҙән илсе булып килгән ваҡытында һүрәтләгән. Ул башҡорттар эргәһендә 922 йылда булған. Сәйәхәте ваҡытында юлъяҙмалар алып барған. Ибн Фаҙландың мәғлүмәттәре башҡорттарҙың этногенезы өсөн бик әһәмиәтле.

Ибн Фаҙландың ҡулъяҙмалары юғалған тип иҫәпләнә. Уның бер өлөшө ғалимдарға XIII быуаттың бөйөк ғәрәп географы Яҡуттың компиляциялары буйынса ғына таныш була. Әммә Ибн Фаҙлан башҡорттар араһында булып киткәндән һуң 1000 йыл ваҡыт үткәс, 1923 йылда, уның "Сәйәхәт китабы" Ирандың Мешхеде ҡалаһында, Равза китапханаһында боронғо ҡулъяҙмалар араһында ул ваҡытта Төркөстандан Иранға эмиграцияға киткән Зәки Вәлиди тарафынан табыла. Артабан китап Ә.-З. Вәлиди тарафынан анализлана һәм докторлыҡ диссертацияһы сифатында Вена университетында яҡлана. 1939 йылда Лейпциг ҡалаһында З. Вәлидиҙең "Ibn Fadlans Reisebericht..." тип аталған тикшеренеүҙәре донъя күрә. Әммә ғалимдың рус йәки башҡорт телендәге материалдары юҡ, ә немец телендәгеһе китапханаларҙа һаҡланмаған. "Башҡорттар тарихы"нда (Өфө, 1994) З. Вәлиди Ибн Фаҙландың башҡорттар тураһындағы мәғлүмәтенә бары тик комментарийҙар ғына бирә.

Ә академик И. Ю. Крачковский бына шундай тәржемә яһай: "Беҙ бәжәнәктәр эргәһендә бер көнгә туҡталдыҡ. Һуңынан юлға ҡуҙғалдыҡ һәм Джайх (Яйыҡ) йылғаһы буйында туҡталдыҡ, - тип яҙа Ибн Фаҙлан. - Һуңынан бер нисә көн барҙыҡ һәм Джаха (Саған), Ирхиз (Ырғыҙ), Самур (Һамар), Кинел (Кинель), Сух (Суҡ), Ка(н)джалу (Кундурса) йылғалары аша сығып, әл-Башгирд тип аталған төрки халыҡтары иленә килеп еттек". Зәки Вәлиди фекеренсә, илселек Һамар башҡорттарында туҡтала. Шулай уҡ ул, Ибн Фаҙлан раҫлауынса, башҡорттар Уралда йәшәгән, көньяҡтан уларға оғуҙҙар, Яйыҡ йылғаһы буйлап - бәжәнәктәр, көнбайыштан Суҡ һәм Сәрмәсән йылғалары буйлап болғарҙар күршеләш булған, тип иҫәпләй.

Ибн Фаҙлан раҫлауынса, башҡорттар ғәскәри һәм көслө булған. Хәрби һәкты ла ҡушып иҫәпләгәндә, барлыһы биш мең кеше булған илселек вәкилдәре уларҙан "бик хәүефләнеп... һаҡланған". Башҡорттар малсылыҡ менән шөғөлләнгән. Ирҙәр һаҡалдарын ҡырып йөрөгән. Улар 12 - ҡыш, йәй, ямғыр, ел, ағастар, кешеләр, аттар, һыу, төн, көн, үлем, ер, күк Аллаларына табынған. Шулар араһында иң ҙур Аллаһ булып күк Аллаһы торған. Ул барыһын да бергә берләштергән һәм башҡалар менән "татыулыҡта булған. Уларҙың һәр ҡайһыһы уның иптәше нимә эшләгәндә хуплаған". Ҡайһы бер башҡорттар йыландарға, балыҡтарға һәм торналарға табынған. Тотемизм менән бер рәттән Ибн Фаҙлан башҡорттарҙа шаманлыҡты ла билдәләй. Күрәһең, башҡорттар араһында Ислам тарала башлаған булғандыр. Илселек составында мосолман динен тотҡан бер башҡорт булған.

Шулай итеп, Ибн Фаҙлан күрһәтеүенсә, башҡорттар - төрки халыҡ, Уралдың көньяҡ битләүендә йәшәйҙәр һәм Волгаға тиклем ҙур территорияны биләйҙәр. Уларҙың көньяҡ-көнсығыштан күршеләре - бәжәнәктәр, көнбайыштан - болғарҙар, көньяҡтан оғуҙҙар була.

**Рим ЙӘНҒУЖИН,**
**тарих фәндәре докторы, профессор.**

**✓ Әле республикабыҙҙа өс йөҙ меңдән ашыу кешегә ер пайҙары бүлеп, сертификат тапшырҙылар. Әммә халыҡ һаман да үҙенең еренә хужа булырға ашыҡмай. Ғәйеп халыҡтың үҙендә генә лә түгел, урындағы власть органдарында.**

**Ни өсөн эшҡыуарлыҡтың мөһим бер өлөшө булған сауҙагәрлек ҡайһы берәүҙәр тарафынан ситен күрелә? Уңышлы булыуҙың сере нимәлә? Ни өсөн ауылдарыбыҙҙа йәшәүсе милләттәштәребеҙ һаман да ерһеҙ? Хәҙерге ауылдың яңыса иҡтисади моделе нисек ҡоролорға тейеш? Ни өсөн башҡорт ерҙәренең атайлыҡ потенциалы тулыһынса файҙаланылмай?**
**Ошо һәм башҡа һорауҙарға билдәле эшҡыуар, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты советы ағзаһы, "Бизнес-үҙәк" етәксеһе Иршат Мөхәррәм улы АҪЫЛҒУЖИН яуап эҙләй.**

## Сауҙагәрлек ғәрлекме?

Үҙгәртеп ҡороуҙар башланғас, ҡайһы бер ижад әһелдәребеҙ, бигерәк тә шағирҙарыбыҙ баҙарҙы, сауҙагәрлекте әрләргә тотондо. Минеңсә, уларҙың бындай фекерҙәре сауҙагәрлекте үҙ эсенә алған эшҡыуарлыҡтың асылын аңлап еткермәүҙән килеп сыҡҡандыр. Әгәр үҙең етештергән тауарҙы үҙең генә ҡулланһаң, ул натураль хужалыҡ итеү тип атала. Ә инде етештергән тауарыңды башҡаларға һатһаң, алмаштырһаң, ошо урында эшҡыуарлыҡ башлана. Оҙаҡ йылдар башҡалар менән аралашмайынса Тайгала йәшәгән Лыковтар өсөн, мәсәлән, эшҡыуарлыҡ кәрәкмәгән. Ә бына ауыл кешеһе алыш-бирешһеҙ йәшәй алмай. Алыш-биреш бар урында сауҙагәрлек тә, тимәк, эшҡыуарлыҡ та була. Беҙҙең халыҡ элек-электән эшҡыуар һәм сауҙагәр булған. Мәғдәнен дә тапҡандар, баҡыр иреткәндәр, алтындан, көмөштән төрлө биҙәүес әйберҙәре эшләгәндәр. Яныраҡ Дон буйында археологик ҡомартҡылар таптылар. Был алтындан, көмөштән, мәрмәрҙән, йәшмәнән яһалған ҡомартҡыларҙың сығанағы Уралдан булыуы раҫланған. Ошо урында Сармат алтындарын, "Өфө-II" ҡаласығында табылған ҡомартҡыларҙы иҫкә төшөрөп үтеү ҙә урынлы булыр.

Шуға күрә "Беҙҙең халыҡ борон-борондан яугир булған, сауҙагәрлекте ғәрлек һанаған" тигән фекерҙән күптән инде арынырға кәрәк. Дөрөҫ, халҡыбыҙ яугир ҙа булған, ат менеп яу сапҡан, Уралтауҙы дошмандарҙан һаҡлаған. Әммә хатта ошолай, ат менеп, ҡулға ҡорал тотоп яуға күтәрелер өсөн дә иң тәүҙә эшҡыуарлыҡ һәм сауҙагәрлек кәрәк булған. Шулай булғас, бында бер төрлө генә баһа биреү дөрөҫ түгел. Бында, киреһенсә, халҡыбыҙҙың яугир булыуы, ихтилалдарға күтәрелеүе уның эшҡыуарлыҡ даирәһен тарайтҡан тип әйтергә кәрәк: мәғдән иретеү тыйылған, тимерлектәр ябылған. Тап ошо сәбәптәр арҡаһында халҡыбыҙҙың иҡтисади үҫеше лә тотҡарланған.

Сауҙагәрлекте тәнҡитләгән шағирҙарға килгәндә, был күренеш тәбиғи. Бер төрлө ижтимағи ҡоролошта тыуып-үҫеүсе, тәрбиәләнеүсе кешенең икенсе ҡоролошҡа барып инеүенән һуң уны ҡапыл ғына ҡабул итә алмауы тип аңларға кәрәктер быны. Ижад кешеләре нескәрәк, тойғолораҡ була, шуға улар быны яҡшыраҡ һиҙә, тоя һәм үҙ мөнәсәбәтен белдерә. Әммә беҙ килеп тыуған хәлдән, иҡтисади ҡоролоштан ҡәртәләнеп, бикләнеп ята алмайбыҙ. Шуға күрә был күренешкә ҡараштарыбыҙҙы үҙгәртергә кәрәк буласаҡ. Беҙ яңы ҡоролоштан ситтә тороп ҡалмайынса, шул системала үҙебеҙҙең урыныбыҙҙы табып йәшәргә бурыслыбыҙ. Хәҡиҡәт бәхәстә тыуа, тиҙәр. Кемдер беҙҙә сауҙагәрлеккә ҡаршы икән, тимәк, был да юҡҡа түгел, тимәк, беҙҙә ошо фекерҙәр ҡапма-ҡаршылығында үҙебеҙгә хас эшҡыуарлыҡ, баҙар ҡоролошо үҫеш алырға тейеш. Үкенескә ҡаршы, бөгөн беҙҙең эшҡыуарлыҡ майҙанындағы урындарҙы икенсе кешеләр килеп яулай, беҙ иһә, күҙәтеүсе, ялланып эшләүсе һәм һатып алыусы булып ситтән генә ҡарап йөрөйбөҙ.

Ә шулай ҙа, Аллаға шөкөр, һуңғы 2-3 йылда беҙҙә эшҡыуарлыҡҡа ҡарата мөнәсәбәт ныҡ үҙгәрҙе. Ваҡытлы матбуғат та был мәсьәләгә иғтибарын йүнәлтә. Ваҡытлы матбуғат халыҡтың да аңын үҙгәртеүгә һәләтле. Тимәк, беҙ эшҡыуарлыҡҡа ҡарата ла халыҡтың фекерен үҙгәртергә бурыслы. Яҡшы кеше генә ярлы, насар кеше бай була, тигән ҡарашты ла үҙгәртергә ваҡыт. Хәҙер, бигерәк тә йәштәр, икенсерәк фекер йөрөтә. Улар эшҡыуарлыҡ проблемаһының деталдәрен аңларға ынтыла. Күптәре үҙ эштәрен башлаған, ҡайһылары ниндәйҙер уңышҡа ла өлгәшкән.

## Уңышлы булыуҙың сере

Уңышлы булыуҙың сере фекерҙә, идеяла яталыр. Мин йәш сағымдан алып, институтта уҡығанда уҡ ялҡынлы һәм ярһыу комсомол инем. Һәр ваҡыт идея менән яндым. Тормошобоҙҙағы етешһеҙлектәр һәр эште урынына еткереп башҡармағандан килеп сыға, тип иҫәпләнем. Шунан яйлап-яйлап совет ҡоролошона ҡарата ла фекерҙәрем үҙгәрҙе, йәғни был ҡоролоштоң һәйбәт тормош, унайлы йәшәү шарттары ҡорор өсөн яраҡлы түгеллеген аңлай башланым. Был фекер миндә 80-се йылдарҙың башында уҡ формалашты. Ни өсөн яраҡлы түгел? Сөнки совет осоронда кешеләрҙең һәләте төрлөсә булыуға, кемдер эшләй, кемдер эшләмәүгә ҡарамаҫтан, барыһы ла бер тигеҙ эш хаҡы ала. "Тигеҙләү" (уравниловка) сәйәсәте кешеләрҙең камиллашыуға, тормошон яҡшыртыуға ынтылышын һүндерҙе. Бар халыҡты бер ҡалыпҡа һалдылар ҙа, шул "түбә таҡтаһынан" өҫкә сығыу ҡәтғи тыйылды. Был осраҡта беҙҙең милләт вәкилдәре йәшерен эшмәкәрлек алып бара белмәне һәм шул арҡала беҙҙең ижади фиҙаҡәрлегебеҙ артабан үҫешмәй ҡалды. Бындай ҡалыптар, гөмүмән, йәмғиәткә үҫергә мөмкинлек бирмәне.

Горбачев власҡа килеп, "Кооперация тураһында" Закон ҡабул ителгәс, минең күҙҙәрем асылды, тын алышым иркенәйҙе һәм үҙемдең совет системаһы хаҡындағы фекерҙәремдең дөрөҫлөгөнә инандым. 1988 йылда үҙебеҙҙең "Таймаҫ" совхозында үҙгәрештәр индереү, яңыса хужалыҡ итеү буйынса тәҡдимдәр менән сығыш яһағайным, мине аңламанылар. Уларҙан айырылып китеп, үҙемдең юлдан китергә, кооператив асырға ҡарар иттем.

# БЕҘҘЕКЕЛӘР ЭШЛӘРГӘ

## ә ситтәр йәшәү һәм

## Ерһеҙ ҡалыу механизмы

Үкенескә ҡаршы, беҙгә күп нәмә биргән совет ҡоролошо дәүләткә, хөкүмәткә һалыныу, әрәмтамаҡлыҡ комплексы барлыҡҡа килтерҙе. Был комплекс күптәрҙә әле булһа йәшәп килә. Ауылда тороп та, һаман да кемдәндер нимәләр көтөп ултырыусылар күп. Улар ҡасан да булһа иҫенә килер, әммә күп йәһәттән һуңлаҙҙары ла бар. Әйтәйек, еребеҙҙе юғалтабыҙ. Беҙҙә ер тураһындағы йәмғәтселек фекере дөрөҫ формалашмаған. "Ер беҙҙә шәхси милек булырға тейеш түгел. Ер шәхси милеккә бирелһә, беҙ ерһеҙ тороп ҡалабыҙ. Ер һатылмаҫҡа тейеш, ер - беҙҙең әсәйебеҙ", тигән ҡараш һаман да бар. Минең фекеремсә, ер, ысынлап та, беҙҙе туйындырыусы һәм һыйындырыусы. Иген үҫкән ер генә түгел, милләтебеҙ йәшәгән ер, әммә шул ерҙең хужаһы үҙебеҙ булырға тейешбеҙ. Мәҫәлән, бер ауылда йәшәгән халыҡ ауылдың тирә-яғындағы ергә үҙе хужа булырға, ошо ерҙең мәнфәғәтен күрергә, уны файҙаланырға тейеш. Әле республикабыҙҙа өс йөҙ меңдән ашыу кешегә ер пайҙары бүлеп, сертификат тапшырҙылар. Әммә халыҡ һаман да үҙенең еренә хужа булырға ашыҡмай. Ғәйеп халыҡтың үҙендә генә лә түгел, урындағы власть органдарында. Сөнки хужаларға ерһеҙ, бер ниндәй ҙә хоҡуғы булмаған, хоҡуҡһыҙ, ауыҙын аса, үпкәһе күренеп торған халыҡ кәрәк.

Мин үҙем дә тыуған яғыма ҡайтып, ауылдаштарымдың пай ерҙәре нигеҙендә хужалыҡ ойоштороҙом. Ауыл халҡы ерҙе алып, унда хужалыҡ эштәре башлап ебәреүҙе әле күҙ алдына ла килтерә алмай. Етәкселек һәр урында ла элеккесә бойороҡ биреп кенә йәшәргә теләй. Ә шулай ҙа халыҡтың 5 проценты әүҙем фекер йөрөтә. Улар ергә хужа булырға теләй, әммә ундайҙарҙың баштарына һуғып торғас, башҡалар был аҙымға барырға ҡурҡа.

Хәҙер ауылдарға инвестициялар йәлеп итеү хаҡында күп һөйләйҙәр, әммә ул инвесторҙар халыҡты хәйерселеккә төшөрөргә лә мөмкин бит. Әйтәйек, Баймаҡ районына ситтән бер бай инвестор килде икән, ти. Уға ер кәрәк. Әммә инвесторға ерҙе ҡуртымға биргән хәлдә лә, ул ерҙең пайсыларының ҡулында барлыҡ документтар булһын, межалау үткәреп, һәр пайсы үҙенең ерен белеп торорға тейеш. Инвестор һәр пайсы менән килешеү төҙөп, әгәр ҙә килешеү шарты үтәлмәгән хәлдә, ул юҡҡа сығарылып, ер кире пайсыға ҡайтырға тейеш. Артабан инде пайсы икенсе инвестор менән килешеү төҙөй, йә булмаһа ерен үҙе эшкәртә башлай. Ә әле беҙҙә күҙәтелгән күренешкә халыҡты ерһеҙ ҡалдырыу механизмы һалынған. Әйтәйек, ерҙе предприятиеның Устав фондына индерәләр ҙә, предприятие банкрот хәлгә ҡалғас, ябыла, ә ер башҡаларға һатылырға мөмкин.

Икенсенән, законға индерелгән өстәмәләрҙә межаланмаған һәм файҙаланылмаған ерҙәрҙе муниципалитетҡа күсереү, артабан һатыу рөхсәт ителә.

XIX быуаттағы халыҡты ерһеҙ ҡалдырыуға йүнәлтелгән тарих ҡабатлана, ул ҡабатланмаһын өсөн еребеҙгә хужа булып өлгөрәйек. Хужаһы булған мөлкәттең юғалыу ҡурҡынысы юҡ. Еребеҙ бүленһә, киләсәктә ерһеҙ ҡалмаясаҡбыҙ. Был тәңгәлдә иң тәүҙә республика етәкселегенең ер сәйәсәтен аңлауы кәрәк. Әгәр ҙә республика етәкселеге һаман да элеккесә ҡараشта ҡалып, күберәк продукция етештереү өсөн инвесторҙар йәлеп итеүҙе генә маҡсат итеп ҡуйһа, продукция күп итеп етештереләсәк, ул арзан хаҡҡа һатыласаҡ, һөҙөмтәлә ауыл халҡының етеш йәшәү мәсьәләһе икенсе планға күсәсәк. Беҙ элеккесә "Илгә күберәк ит, икмәк, һөт, йөн" тигән категориялар менән эш иткән һайын, ауыл халҡы ярлылана барыры көн кеүек асыҡ. Был йәһәттән ҡарашты ҡырҡа үҙгәртергә ваҡыт. Әлбиттә, беҙ күпләп етештереүҙе маҡсат итеп ҡуйып эш итәбеҙ, әммә етештерелгән тауар халыҡҡа файҙа булып әйләнеп ҡайтҡанын да күргебеҙ килә.

## Үҙкиммәт хаҡы

Америка иҡтисадының беҙҙең эске баҙарҙы емереү маҡсаты ла бар. Әйтәйек, беҙҙә "Буш боттары" үҙебеҙҙә етештерелгән тауыҡ боттарына ҡарағанда демпинг менән арзан хаҡҡа һатыла. Һөҙөмтәлә үҙебеҙҙең илдең тауыҡ ите етештереү тармағы емерелә, үҫешмәй ҡала. Иген үҫтереү буйынса ла ошо хәл күҙәтелә. Беҙ бер центнер бойҙай үҫтереүҙең үҙкиммәтенә Канаданан өс центнер бойҙай һатып алабыҙ икән, һис һуҙһеҙ, үҙебеҙҙә иген үҫтермәйәсәкбеҙ. Ә ни өсөн беҙҙең илдә етештерелгән тауарҙың үҙкиммәте шул тиклем юғары һуң? Мәсьәлә бында ябай ғына: сығымдар күберәк булған һайын, үҙкиммәт тә юғары. Бөгөн беҙҙә яғыулыҡ-майлау материалдарының хаҡы сит илдәрҙәге менән сағыштырғыһыҙ кимәлдә юғары. Икмәккә саҡ ҡына хаҡ күтәрелдеме, ил етәкселәре ҡашын йыйыра, ә шул икмәкте үҫтереүсе крәҫтиән ғүмер буйы ҡашын йыйырып көн итә, уның хаҡында ҡайғыртҡан кеше лә юҡ. Рәсәйҙең аграр сәйәсәте, үкенескә ҡаршы, граждандарҙы арзан аҙыҡ-түлек менән тәьмин итеүгә йүнәлтелгән. Әгәр ҙә Рәсәй киләсәктә ҡеүәтле ил булып үҫешергә теләй икән, был мәсьәләгә ҡарата үҙ фекерен үҙгәртергә бурыслы. Беҙҙең дәүләт иң тәүҙә үҙенең граждандарын һаҡларға тейеш. Беҙҙең дәүләт иң тәүҙә сеймал етештереүсе тармаҡтарҙың мәнфәғәтен ҡайғырта. Был дөрөҫ түгел, сөнки сеймал бер көн килеп бөтәсәк, ә иген үҫә торған ер өҫтө кешелеккә Туфан һыуы ҡалҡҡансы хеҙмәт итәсәк.

## Бюрократик кәртәләр

Бюрократик кәртәләр нисек кенә булһа ла халыҡты ерһеҙ һәм эшһеҙ ҡалдырыу өсөн ҡуйыла. Тап шуның өсөн дә ауылда йәшәүсе күптәр үҙ еренә документ юллап йөрөмәй. Бына мин, мәҫәлән, пайсыларҙан ышаныс ҡағыҙы яҙҙырып алам да, ул ҡағыҙҙар артынан үҙем йөрөйөм һәм ҡайһы урында ниндәй кәртәләр барлығын бик яҡшы беләм. Бер кабинетҡа инһәң: "Һин бына был урында адресты дөрөҫ яҙмағанһың, ауыл эргәһендә, тип яҙырға кәрәк, ярай, ай ярымдан тағы килерһең", - тип сығарып ебәрәләр. Ай ярымдан килһәң, бюрократ тағы ла бер өтөргә килеп һөрлөгә лә, тағы ла бер айҙан килергә ҡуша. Ҡыҫҡаһы, был юл менән ул чиновник ауыл кешеһен ер алыуҙан баш тартырға мәжбүр итә. Дәүләт нимәгә һуң улай булғас беҙгә? Ниңә ул ошондай бюрократизмға сик ҡуймай?

## Тәүәккәллек кәрәк

Эш атын туғарып, һыпырып, бер йәйгә иреккә ҡырға ебәреп, көҙ тотоп тағы ла йөккә екһәң, ул тартмаясаҡ. Кеше лә шулай. Йылдар буйы производство системаһында, колхоз-совхозда эшләгән кешене лә күпмелер ваҡытҡа эшһеҙ ҡалдырһаң, ул һуңынан ялҡаулыҡҡа өйрәнәсәк. Бер яҡтан ҡарағанда, совет осоронда колхоз-совхоз системаһы кешене эшкә лә өйрәтте. Ауыл кешеһе иртәнсәк йоҡонан уяныр, фермаға йә баҫыуға эшкә бара торғайны. Хәҙер килеп колхоз-совхоздар емерелеп, ике тиҫтәгә яҡын ваҡыт үткәйне, ауыл кеше-

***✓ Рәсәй Дәүләт Думаһы биргән законды файҙаланып, аҫабалыҡ хоҡуғыбыҙҙы киренән ҡайтарыу мөмкинлеге барлығын күрергә теләмәйбеҙ. Ер кодексы, икенсе төрлө әйткәндә, "Аҫаба башҡортлоғобоҙҙо кире ҡайтарыу" законы бит ул.***

# ТЕЛӘМӘЙ,

## эш урындарын яулай...

һе үҙенең хеҙмәт күнекмәләрен юғалтып та өлгөрҙө. Ауылдарҙа хәҙер ялҡаулыҡ ҙур проблема булып тора. Әйтәйек, минең кирбес заводым бар һәм унда эшләргә кешеләр таба алмайым. Хикмәт бында хатта эш хаҡында ла түгел, эш хаҡын алдан һоноп торған хәлдә лә эшләргә теләүселәр бик һирәк. Ҡайһы берәүҙәр эш хаҡы алғас, эсә лә, эшкә сыҡмай. Бик аптырағас, Күгәрсен районының Йомағужа ауылында ябылған кирбес заводының бер смена эшселәрен автобус менән ташыйым. Хеҙмәттән төңөлөү күренеше бөтә ил буйынса күҙәтелә. Хәҙер йәштәрҙең күбеһе юғары уҡыу йортон тамамлай ҙа, аҙ эш хаҡы түләнгән урында эшләргә теләмәйенсә, өйөндә тик ята. Беҙ теләһә ниндәй эште тотоноп башҡарһаҡ ҡына конкурентлы халыҡ була алабыҙ. Эштең ояты юҡ! Беҙҙекеләр эшләргә теләмәй, ә ситтәр йәлап-йәлап килә лә, йәшәү һәм эш урындарын яулай. Әлбиттә, ситтәр ҙә күберәк ҡалаға ынтыла, уларҙың талмай хеҙмәт ит, хужалығыңды үҫтер", - тип әйтер инем.

Бөгөн беҙгә ауылдағы етәкселәрҙе эшҡыуар итергә кәрәк. Ауылда иҡтисад мөнәсәбәттәрен дөрөҫ итеп ҡороу мөһим. Пайсының үҙ ерен ҡуртымға биреүсегә: "Һин беҙҙең ерҙе алдың, шуға күрә беҙҙең мәнфәғәтте күҙәт",- тип әйтә белеүе лә үтә мөһим. Беҙҙә иһә, киреһенсә, урындағы етәкселәр сход йыйып, халыҡтың башын бутап маташалар.

Хәҙер заман үҙгәрҙе, шуға күрә ауылда иҡтисад мөнәсәбәттәрен дә өр-яңыса ҡорорға кәрәк. Элекке колхоздағы һымаҡ түгел. Мәҫәлән, мин яңы техника һатып алһам, элекке колхозсылар килеп: "Иршат, яңы трактор алып ҡайтҡанһың икән, мине шул тракторыңа ултырт әле", - тип һорайҙар. Мин уға: "Мин һине ул тракторға даими ултыртып ҡуя алмайым. Һин сәсеү ваҡытында ул тракторҙа өс көн эшләйһең дә, сәсеү бөткәс, ул тракторҙы тағы ла кәрәк булғанға тиклем ултыртып ҡуяһың", - тиһәм, теге кеше башын сайҡап ауылда яңыса хужалыҡ итеүгә күсергә ваҡыт. Иң тәүҙә һәр бер ауылдың бизнес паспортын төҙөргә кәрәк. Һәр бер ауыл янында күпме һөрөнтө, күпме көтөүлек, сабынлыҡ ерҙәре барлығын иҫәпкә алып, был ауыл янында ниндәй эштәр алып барырға мөмкин булыуын билдәләп сығырға кәрәк. Шул уҡ ваҡытта һәр ауылда ниндәй кәсепте үҫтереү мөмкин булыуын да иҫәптә тотоу мөһим. Ҡыҫҡаһы, ауылда йәшәүсе кешенең башына фекер, күңеленә ғәм һалырға ваҡыт. Быйыл бына республика кимәлендә "Айыҡ ауыл" конкурсы бар. Бик хуп. Эсмәгән ауылдарҙың артыуын күреп ҡыуанабыҙ ҙа ул, ауыл халҡы айнығас, артабан ни эшләргә тейеш? Билдәле, ауылдарҙа яңы иҡтисади мөнәсәбәттәр нигеҙендә эшҡыуарлыҡ үҫергә тейеш.



ерен ҡуртымға биреп йәшәгән. Беҙ ҡайһы саҡ тарихҡа һылтанып, тарихи ауырыу менән ауырып китәбеҙ. Шул уҡ ваҡытта хәҙер Рәсәй Дәүләт Думаһы биргән законды файҙаланып, аҫабалыҡ хоҡуғыбыҙҙы киренән ҡайтарыу мөмкинлеге барлығын күрергә теләмәйбеҙ. Дөрөҫөн әйткәндә, Ер кодексы беҙгә киренән аҫаба булырға мөмкинлек бирә бит. Ер кодексы, икенсе төрлө әйткәндә, "Аҫаба башҡортлоғобоҙҙо кире ҡайтарыу" законы бит ул. Әлегә ерең ун ғына гектар икән, әгәр ҙә һөҙөмтәле эшләһәң, башҡаларҙың пайын ҡуртымға алып, ереңде киңәйтә алаһың бит.

да ауыл хужалығында эшләргә барымы әллә ни юҡ.

Эшҡыуарлыҡҡа тотонор өсөн тәүәккәллек кәрәк. Тәүәккәлләмәһәң, ниндәйҙер эшкә тотоноу ғына түгел, хатта кәләш алып та булмай. Тәүәккәл булмаған кеше эште башламаҫ өсөн ҡырҡ төрлө һылтау таба. Беҙ, ялан яҡ кешеләре, тыуғандан алып эшкә егеләбеҙ. Минең, мәҫәлән, бала һәм үҫмер сағым сөгөлдөр баҫыуында үтте. Йәй көнө һыу инге, ҡомда ҡыҙынғы килә, юҡ, хет суҡын, үҙеңдең сөгөлдөр рәтеңде үҙең утарға тейешһең. Беренсе синыфты тамамлағас - бер, икенсене тамамлағас - ике, өсөнсөнө тамамлағас - өс рәт, ҡыҫҡаһы, унынсыны тамамлағас, ун рәт сөгөлдөр утаталар ине.

### Һәр ауылға - бизнес паспорт

Мин әле ауылымда 29 пайсының ерен берләштереп эшкәртәм. Төп бурысым - пайсыларҙың ихтыяжын ҡәнәғәтләндереү. Мин уларҙың һәр береһенә йыл һайын берәр тонна иген, утыҙар центнер бесән бирәм. Пайсыларым шуға ла бөгөн күкрәк киреп йөрөй. Ваҡытында миңә ҡаршы сығып, ситтә тороп ҡалыусылар бөгөн: "Яңылышҡанбыҙ, Иршат беҙҙе үҙенә алмаҫмы икән?" - тип хәбәр ебәрәләр.

Әлегә тиклем үҙҙәренең колхозын һаҡлап ҡалыусылар ҙа бар. Улар һаман отчет өсөн булһа ла нимәләр эшләргә тырыша, һаман да, элеккесә, илде туйындырам, тип уйлай. Мин ундай етәксегә: "Туғаным, һин үҙ ауылыңда колхозды һаҡлап ҡалғанһың, афарин, мин һинә шул колхозыңды бүләк итер инем. Һин уны ал да, халҡыңдың һәм үҙеңдең мәнфәғәтең өсөн көнө-төнө арымай-

китеп бара. Ә бит һөҙөмтәлелектең төп асылы ошонда. Элекке колхоз системаһында тракторҙар таңдан тоҡандырылғандан алып төн уртаһына тиклем эшләнә. Тракторсы эштә йөрөймө, ҡунаҡтамы, техникаһы көнө-төнө дырылдап ултырҙы. Минең ауылдағы хужалығымда яуаплы кешем бар. Уның ҡул аҫтындағы биш-алты кеше тик кәрәк саҡта ғына техниканы файҙалана ала. Был ауылда йәшәүҙең яңы моделе. Хәҙер техник мөмкинлектәр артыуы һөҙөмтәһендә ауыл хужалығында эшләргә кеше күп талап ителмәй, шуға күрә пай ерҙәрен ауыл кешеһенә хеҙмәт иттереү - беҙҙең төп бурыс. "Улай булғас, ауыл кешеһе ҡайҙа эшләргә тейеш һуң?" тигән урынлы һорау тыуа. Ауылда бит игенселектән тыш, башҡа төрлө өлкәләрҙә лә үҙ эшеңде асып була. Был - беренсенән, икенсенән, пай ере өсөн эшҡыуар биргән игенде, бесәнде файҙаланып, үҙеңдең шәхси хужалығыңды ла үҫтереү мөмкинлеге асыла. Беҙҙең Көйөргәҙе районы ауылдарында 15-20-шәр баш эре мөгөҙлө малды һимертеүгә ҡуйып, ошо кәсеп ярҙамында ныҡ ҡына аяғында баҫып торған егеттәр бар.

Ҡыҫҡаһы, беҙгә элекке колхоздың кире яҡтарынан арынып, Киләсәктә "Иң эшлекле башҡорт ауылы" тигән конкурс үткәрергә лә була, мәҫәлән.

### Иң бөйөк эш - иң ябай эш

Элек башҡорттоң яугир, шағир образын алға һөрөү булһа, беҙ XXI быуатта уның яңы имиджын да тыуҙырырға бурыслы. Ысынлап та, XXI быуат башҡорто ниндәй булырға тейеш һуң? Ул - һөҙөмтәле менеджер, ҡулынан килмәгән эше булмаған шәхес. Был йәһәттән Флүр Ғәлимовтың "Яңы башҡорт" романы иғтибарға лайыҡ. Киләсәктә башҡа яҙыусылар ҙа, башҡа шағирҙар ҙа башҡорттоң яңы образын, имиджын тыуҙырыр - быны беҙҙән тормош үҙе талап итәсәк. Элек башҡорт бер әсмүхә сәйгә ерен һатҡан, тигән ҡараш та ысынбарлыҡҡа тура килеп бөтмәй. Совет осорона тиклем башҡорт

Иң бөйөк эш - иң ябай эш ул. Беҙ әллә ниндәй ҙур байлыҡтарға эйә була алмаһаҡ та, үҙебеҙҙең тыуған еребеҙҙә тормошобоҙҙо матур итеп ҡора алһаҡ, балаларыбыҙға, ейән-ейәнсәрҙәребеҙгә тыуған еребеҙҙе, республикабыҙҙы, эшебеҙҙе ҡалдыра алырбыҙ, тип уйлайым. Тик шул сағында беҙҙе кеше булараҡ та, халыҡ булараҡ та ихтирам итерҙәр. Яңыраҡ бер егет менән бәхәсләшеп киттек. Ул сәйәсәт менән яна. Мин уға артыҡ сәйәсәт менән шөғөлләнмәйенсә, үҙебеҙҙең тормошто алып барырға кәңәш иттем. Үҙебеҙҙең тамаҡты үҙебеҙ туйҙырһаҡ, балаларыбыҙҙы үҙебеҙҙең рухта тәрбиәләһәк, уларға белем бирһәк, бер ниндәй ҙә сәйәсәт беҙгә ҡурҡыныс түгел. Ғаиләлә балалар ишле булырға, бер ата урынына кәмендә өс ул килеп баҫырға, уның эштәрен дауам иттерергә тейеш. Беҙгә, ғөмүмән, бер ниндәй ҙә дауылға бирешмәҫлек милли ҡоролош хаҡында уйланырға кәрәк. Ул ҡоролошта иҡтисад төп нигеҙҙе тәшкил итһен.

***Беҙ әллә ниндәй ҙур байлыҡтарға эйә була алмаһаҡ та, үҙебеҙҙең тыуған еребеҙҙә тормошобоҙҙо матур итеп ҡора алһаҡ, балаларыбыҙға, ейән-ейәнсәрҙәребеҙгә тыуған еребеҙҙе, республикабыҙҙы, эшебеҙҙе ҡалдыра алырбыҙ, тип уйлайым. Тик шул сағында беҙҙе кеше булараҡ та, халыҡ булараҡ та ихтирам итерҙәр. Үҙебеҙҙең тамаҡты үҙебеҙ туйҙырһаҡ, балаларыбыҙҙы үҙебеҙҙең рухта тәрбиәләһәк, уларға белем бирһәк, бер ниндәй ҙә сәйәсәт беҙгә ҡурҡыныс түгел. Ғаиләлә балалар ишле булырға, бер ата урынына кәмендә өс ул килеп баҫырға, уның эштәрен дауам иттерергә тейеш. Беҙгә, ғөмүмән, бер ниндәй ҙә дауылға бирешмәҫлек милли ҡоролош хаҡында уйланырға кәрәк. Ул ҡоролошта иҡтисад төп нигеҙҙе тәшкил итһен.***

### Атайлыҡ потенциалы

Беҙҙең ир-ат илле йәшкә етһә, ғүмеренең иң аҫыл йылдары үтеүгә һанап, әүҙемлеген һүндерә башлай, түргә меңеп ултырырға ашыға, пенсия алып, бер нәмә лә эшләмәй тик кенә ятырға ынтыла. Минең бер олатайҙың иң кесе улы үҙенә 63 йәш тулғанда тыуған. Хәҙер иһә беҙҙең ирҙәрҙең атайлыҡ ҡеүәте тулыһынса файҙаланылмай. Ә бит генетик ҡеүәт милләткә тулыһынса биреп ҡалдырылырға тейеш. Әгәр ҙә ошо шарт үтәлһә, беҙ күптән күп һанлы милләткә әүерелгән булыр инек. Ҡасандыр һан буйынса беҙҙән күпкә аҙыраҡ булған ҡаҙаҡтар, үзбәктәр, ҡырғыҙҙар, ана, ҡайһылай артып киттеләр. Беҙ иһә, европаса йәшәй башланыҡ, йәнәһе.

Беҙҙә генә түгел, Ер шарында тенденция шундай: ирҙәр ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарағанда күпкә аҙыраҡ. Өлөшөнә төшәр көмөшө булмағас, ҡыҙҙар ни эшләргә тейеш һуң? Беҙ йыш ҡына ҡыҙҙарыбыҙҙың сит милләт егеттәренә кейәүгә сығып, икенсе милләттәргә бала үҫтереүен күрмәмешкә һалышабыҙ. Милләт суҡынып китһен, ҡыҙҙарыбыҙ ирһеҙ генә ҡалмаһын, йәнәһе. Ә инде ҡайһы бер ирҙәрҙең, милләткә мөмкин тиклем күберәк бала ҡалдырайым, тигән ниәт менән бала табыр йәштән үткән ҡатынын ҡалдырып, бала табыр йәштәге ҡатынға өйләнеүен ғәйепләй башлайбыҙ. Мин 50-60 йәшкә еткән, аяғында ныҡ баҫып торған эшҡыуарҙарҙың ғаиләләренә ҡарайым да, аптырайым. Күбеһенең берике бала, булған балалары ла атайҙарының эшен дауам итмәй, икенсе юлдан киткән. Мин ундай эшҡыуарҙарға: "Балаларыбыҙ күп булһын, балалар беҙҙең киләсәктәге капиталыбыҙ", - тием. Һуңғы чечен һуғышында күпме ирҙәре ҡырылыуға ҡарамаҫтан, халыҡ иҫәбен алыу һөҙөмтәләре буйынса Рәсәйҙә иң күп артҡан милләт - ул чечендар. Әлбиттә, унда балаларҙың күпләп тыуыуы дөйөм милләт мәнфәғәтенән сығып башҡарылған күренеш һәм ул хуплауға лайыҡ. Беҙ ҙә үҙебеҙҙең милли иҡтисади ареалды тотоп тороу өсөн үрсергә бурыслыбыҙ...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Иршат Мөхәррәм улы менән ни хаҡында фекер йөрөтһәк тә, әңгәмәбеҙҙең осо һәр ваҡыт ер мәсьәләһенә бара ла ялғана. Күреүебеҙсә, милләтебеҙ киләсәге өсөн ерҙең ни тиклем мөһим икәнлеген аңлата бындай ялғаныш. Юҡҡа ғына "Башҡорт һәм ер - икеһе бер" тип әйтмәгәндәр бит.**

**Ошо көндәрҙә милләтебеҙҙең абруйлы улы Иршат Мөхәррәм улына 50 йәш тула. Тап ошо көндәрҙә юбиляр: "Өлкән улымды балалар баҡсаһына йөрөтә башланым", - тип йәшәй икән, был да үҙенә күрә ҙур күрһәткес: һан һәм сифат күрһәткесе. Меңәрләгән гәзит уҡыусыларыбыҙ исеменән: "Елле иллегеҙ ҡотло булһын, балаларығыҙ һеҙҙең юлығыҙҙы дауам итһен, Иршат Мөхәррәм улы!" - тип әйтәбеҙ.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**яҙып алды.**

* * *

Йома көндө, Сәмиғулла ҡарт әйткәнсә, Шәүрә менән Кәлимуллаға никах уҡынылар. Шул көндән алып Ғариф Шәүрәгә - ҡайны, ә Мөслимә ҡәйнә булып киттеләр. Шәүрә ҡайғыһынан көн-төн иланы-иланы ла, яҙмышына ризалашып, күпмелер ваҡыттан һуң бер аҙ тыныслана төштө. Дөрөҫөрәге, тыныс күренергә тырышты. Әммә хәҙер инде үҙенә ҡайны булған Ғариф тураһындағы уйҙар уға бер минутҡа ла тынғылыҡ бирмәне. Кәлимуллаһына төрлө-төрлө әкиәттәр һөйләп йоҡлатҡандан һуң, Шәүрә үҙе төндәр буйы йоҡлай алмай сыға ине. Кәлимулла менән үҙенә никах уҡылған кистәге ҡайныһының һағышлы йөҙө һаман уның күҙ алдынан китмәне.

Балалар ғына түгел, ә ҡайһы бер шаянbacktraҡ оло ағайҙар ҙа меҫкен Кәлимулланы урамда осратҡан арала мәрәкәләп китә торған булып китте. Бер көндө әлеге Сибәғәт:

- Кәлим ҡустым, хәҙер һин ҙур кеше булдың инде, - тигән булды мут йылмайып. - Кәләш менән йоҡлауы нисек? Рәхәтме?

- Рәхәт, Сибәғәт ағай. Кәләштең арҡаһы йылы була икән ул, - тине Кәлимулла бик ихлас итеп. Быны ишетеп торған башҡалар һындары ҡатып көлөшөп алды.

- Сибәғәт энем, Кәлимуллаға төрттөрөп, унан көлһәң дә, ул һинән уҙҙырҙы әле. Кәләштең бынамын тигәнен эләктерҙе. Һинең кеүек утыҙға етеп, бисәһеҙ йөрөгәндәрҙән түгел ул, - тип түбәнге Саҙрый Кәлимулланы яҡлашҡан булды. Ә Кәлимулла, меҫкен, үҙен маҡтаған кеше табылғас, ауыҙ йырып, оло ағайҙарҙың йә береһенә, йә икенсеһенә ҡаранды ла, яҡында уйнап йөрөгән кескәй малайҙар яғына йүгереп китеп барҙы...

Ваҡыт үтә торҙо. Кәлимулла, элеккесә үҙенең урамдаш иптәштәре менән көнө буйы уйнай ҙа, аяҡ-ҡулдары бысранып, кискә өйгә ҡайтып килә. Шәүрә уны үҙ балаһы кеүек күреп ярата, көн дә уны йыуындырып, ашатып, йоҡларға һала.

Ҡыш етеп, мал-тыуар ҡураға инде. Көн дә иртән Ғариф үҙенең аттары янына сығып китә. Йылҡы малы, әлбиттә, һарайҙа түгел, ҡыш буйы ҡырҙа тибендә йөрөп туҡлана. Үләнде ҡар аҫтынан тибеп сығарып ашап, аттар үҙ көндәрен үҙҙәре күрә. Ул ғына ла түгел, уларға хатта көтөүсе лә кәрәкмәй. Көтөүсе вазифаһын өйөр айғыры башҡара. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, Ғариф үҙенең туры айғырына атланып ала ла, шул аттары янынан китешмәй. Шулар менән мәшғүл булып, үҙенең ҡайғыларын оноторға, янып барған йөрәгенең ярһыуын баҫырға тырыша. Әммә ташып барған хистәрҙе шулай ғына итеп баҫып булһасы...

Һәр ваҡыт тигәндәй өйҙә булған Мөслимәһенең алдында Шәүрәнең йөҙөнә күтәрелеп ҡарай ҙа алмай Ғариф. Тик ҡырҙа, яңғыҙы булған саҡта ғына күкрәк тултырып, Шәүрәгә бағышлап сығарған йырҙарын йырлап, үҙенең күңелен йыуата.

Әле атына атланған килеш Ғариф бар тирә-яҡты яңғыратып, үҙенең яңы ғына сығарған йырын үҙәк өҙҙөрөр көйгә һалып йырлап ебәрҙе:

*Ҡамсат ҡына бүрек туҙмай, тиҙәр,*
*Ҡырылып уҡ ситенән туҙа икән.*
*Ғишыҡ алһа, егет түҙмәй тиҙәр, -*
*Йөрәк майғынаһы һыҙа икән.*

Уның йырын ҡеүәтләгәндәй, өйөр айғыры көр тауышы менән кешнәп ебәрҙе.

Ғариф, ғәҙәттәгесә, үҙенең икһеҙ-сикһеҙ уйҙарына сумды. Беләме икән Шәүрә уның нисек мөхәббәт утында ғазап сиккәнен? Йән һөйгәнен - Шәүрәһен бер булһа ла ҡосорға Хоҙай Тәғәлә насип итерме? Шундай ғазаплы мөхәббәт хистәре кисергән Ғарифҡа шул уҡ ваҡытта сикһеҙ рәхәт тә һымаҡ. Бәлки, Шәүрә лә үҙ йөрәгендә уға ҡарата һөйөү йөрөтәлер. Шәүрәнең күҙ ҡарашында ниндәйҙер йылылыҡ тойолған һымаҡ та ул. Әгәр Шәүрә лә уны шулай ятраҡан булһа, был донъяла Ғарифтан да бәхетле кеше булмаҫ ине...

* * *

Һалҡын ҡыш үтеп, шаулап-гөрләп яҙ ҙа килеп етте. Урамдарҙан, тау үҙәктәренән шылтырап ҡар һыуҙары аға. Яҙғы ҡояш, айырыуса төш мәлендә, ярайһы ғына ҡыҙҙыра ла башланы. Сыйырсыҡтар йылы яҡтан үҙҙәренең былтырғы өйҙәренә ҡайтты. Ҡапылда һыу үткәрмәҫтәй күн итек кейгән малай-шалай урам буйында ағып ятҡан гөрләүектәрҙе быуып, кәмә йөҙҙөрөү менән мәшғүл. Улар барса донъяһын онотоп, сыр-сыу килешә. Улар араһында Кәлимулла ла бар. Уны хәҙер "кейәү" тип эләкләүҙе малайҙар инде иҫтәренә лә алмай. Ялыҡҡандарҙыр, ахрыһы.




Шундай йәмле яҙҙың бер көнөндә Шәүрә иңбашына көйәнтә һалып, кер сайҡарға өй артындағы гөрләп ҡар һыуы ағып ятҡан үҙәккә төштө. Ағас биҙрәләрен ергә ҡуйып, һыу алыуға йәтешерәк урын һайлап алды. Тап шул мәлдә үҙәк буйлап, яҙғы сыуаҡлы көнгә һөйөнөп-һоҡланып, ҡырҙан ҡайтып килгән Ғарифты ла абайламаны. Эйелеп һыу алам тигәнсә, Шәүрәнең күнәге ҡулынан яңылыш ысҡынып, шарлауыҡҡа ағып китте. Шәүрә күнәк артынан йүгерҙе, әммә күнәк уны еткермәҫкә теләгәндәй, шаяра-шаяра, гөрләүектең көслө ағымына бата-ҡалҡа тумарлай бирҙе. Түбәндәрәк быны күреп торған Ғариф, атынан һикереп төштө лә, һыуҙы кисеп барып күнәкте тотоп алып, уға һыу тултырып, ярға алып сыҡты һәм ни эшләргә лә белмәй сәбәләнеп торған Шәүрәгә тотторҙо.

- Әллә һин дә кәмә йөҙҙөрөп уйнап йөрөйһөңмө, килен? - тине ул шаярып.

- Һыуға аҡты ла киттесе күнәгем. Һин булмаһаң, тота ла алмаҫ инем әле мин, ҡайным, рәхмәт, - тине Шәүрә ҡайныһынан битен йәшереп.

- Көн дә ошонда килеп күнәгеңде ағыҙып ебәр, килен, ә мин көн дә яңынан тотоп бирермен, - тине Ғариф Шәүрәнең күҙҙәренә тура ҡарап.

- Көн дә һыу кисеп һалҡын алдырырһың бит, ҡайным, - тигән булды Шәүрә бер аҙ оялыу ҡатыш йылмайып.

- Минең эсемдә бер ҡасан да һүнмәй торған утым бар. Ул мине йылыта. Шуның өсөн дә, килен, миңә һалҡын теймәй, - тине һаман да ҡулын күнәктән ысҡындырмай. Улар шулай бер күнәкте икәүләп тотҡан килеш тора бирҙеләр.

- Ниндәй ут икән ул, ҡайным? - тине Шәүрә.

Яҙғы ҡояштай йылмайған һылыу йөҙҙән күҙҙәрен ала алмаған Ғариф был юлы йөрәгендәге ташып барған уй-хистәрен һис кисекмәҫтән йән һөйгәненә еткерергә булды:

- Ул - һөйөү уты, килен. Үҙеңде тәү күргәндән алып йөрәгемдә ҡабынды ул ут, Шәүрәкәй. Ҡабынды ла, башҡаса бер ҡасан да һүнмәҫтәй булып яна ла яна. Ул ғына ла түгел, көсәйгәндән көсәйә генә бара. - Ул Шәүрәнең ҡулынан тотто. Шәүрә ҡулын тартып алманы. Үҙе лә ҡайныһына тап шундай уҡ һүҙҙәр әйтергә теләй ине.

- Ҡуйсы, ҡайным, кеше-фәлән ишетеп ҡалыр...

- Иртәгә лә ошо үҙәккә ҡар һыуы алырға төшөрһөңмө, килен? - тине Ғариф тулҡынланып.

- Әлләсе, - тине Шәүрә. Ғарифты этәргән булып, икенсе ҡулын уныҡының өҫтөнә һалды. Һалҡын булһа ла, Ғарифтың ҡулынан ниндәйҙер йылылыҡ килгән һымаҡ. Шулай бер-береһенә ҡарашып, бөтә донъяһын онотоп, тағы әллә күпме торҙо улар.

- Атай, һинең дә ҡулың өшөнөмө? - тигән Кәлимулланың тауышына һиҫкәнеп киттеләр. Шәүрә ҡулын тартып ала һалды.

Кәлимулла ҡар һыуына өшөнөп ҡыҙарып бөткән бәләкәс ҡулдары менән Ғарифтың, унан Шәүрәнең ҡулдарына алмаш-тилмәш килеп тотондо.

- Әй, улым, ҡулдарың ныҡ өшөгән бит, - тине Ғариф. - Бар, өйгә инеп йылынып ал.

Шәүрә Ғарифҡа тағы берҙе серле итеп йылмайҙы ла, күнәген алып, кер сайҡаған урынына китте. Кәлимулла менән Ғариф өйгә инде.

Өйгә килеп инеү менән Кәлимулла:

- Әсәй, өй артындағы шарлауыҡта килененнең күнәге һыуға ағып китҡәйне, - тип ыш-быш килеп, өҫ кейемдәрен сисә-сисә һөйләргә тотондо, - ярай әле, атайым килеп сыҡты. Ул һыуҙы кисеп барып, күнәкте тотоп алды. Атайымдың да ҡулы минеке һымаҡ ныҡ өшөнгән дә, килененең уны үҙенең ҡулдары менән тотоп йылытты. Ә минең ҡулдарымды һин йылыт. - Ул әсәһенең ҡулдарын барып тотто. Улының ҡулдарын йылыта-йылыта, Мөслимә сисенеп торған иренә ҡарап уйға батты. Өҫ кейемдәрен йәһәт кенә сисеп, ишек яндауындағы ағас ырғаҡҡа элгәс, Ғариф бер ни ҙә өндәшмәй, төпкө бүлмәгә үтте. Ни тип кенә өндәшһен инде ул үҙенең хәләл ефетенә. Әллә нимә һөйләйһең, тип бер гонаһһыҙ сабыйҙы ла әрләп булмай бит.

Ғариф менән Шәүрә араһында ниҙер барын унһыҙ ҙа һиҙенә Мөслимә, ләкин бер ни ҙә өндәшмәй. Киреһенсә, был турала уйламаҫҡа тырыша. Ғарифты Шәүрәнән ҡыҙғанырға үҙенең хаҡы юҡ тип иҫәпләй ул. Барыбер ул Ғарифтың ҡатыны булып тик һанала ғына. Ир менән ҡатын араһында була торған мөнәсәбәттәрҙе улар кисергәндәре лә юҡ. Дөрөҫөн генә әйткәндә, Мөслимә үҙе тураһында әллә ҡасандан уҡ уйлағаны юҡ, тиерлек. Бәлки, күптәр өсөн был хәл бик сәйер булып та тойолор, әммә ул ысынлап та ҡәйнешенә һәм үҙ балаһы кеүек ятраҡан килененә лә ихлас күңеленән оло бәхет теләй ине...

* * *

Ҡарҙар иреп бөтөп, ағастар япраҡ ярҙы. Сыйырсыҡтар күптән түгел йомортҡанан сыҡҡан балаларына ем ташып ашата башланы. Туғайҙар хуш еҫ бөркҡән сәскәгә күмелде. Бар тәбиғәтте, бар тереклекте уятып, шаулап-гөрләп килгән был миҙгел - үҙе айырыуса бер мәл. Яҙ үҙенең тылсымлы көсө менән барлыҡ йән эйәләренә тәьҫир итә. Аллаһы Тәғәлә тарафынан бирелгән, әммә әҙәм балаһы бер ҡасан да серенә төшөнә алмаҫлыҡ был көс барлыҡ йәнлектәрҙе, ҡоштарҙы бер-береһе менән табыштыра, ҡауыштыра.

Донъялағы барлыҡ йән эйәләре араһында һәр яҡтан иң үҫешкән, иң камил итеп Аллаһы Тәғәлә әҙәм балаһын ятраҡан. Ер йөҙөндәге ана шул иң аҡыллы булған бәндәләр, тәбиғәт закондарынан тыш, үҙҙәренең йәшәү ҡағиҙәләрен уйлап сығарған, ә үҙҙәре, ҡайһы саҡтарҙа шул ҡағиҙәләрҙе боҙорға тырыша. Сөнки кеше уйлап сығарған закондар күп осраҡта тәбиғәттеке менән тап килмәй. Ниндәй генә аҡыллы булыуҙарына ҡарамаҫтан, кешеләр барыбер - тәбиғәт балалары. Башҡа йән эйәләренә тәьҫир иткән яҙ тылсымы әҙәм балаларын да ситләтеп үтмәй, уларҙың ҡандарына, йәндәренә, тәндәренә үтеп инә. Кешеләрҙе үҙ тиңдәрен табып, ҡауышырға өндәй...

Көндәрҙән бер көндө Мөслимәнең иң ятраҡан Аҡбаш тигән һыйыры кискә ҡырҙан әйләнеп ҡайтманы. Шәүрә башҡа һыйырҙар һәм тана-торпоға ҡушып, уны таң менән ашатырға туғайға сығарып ебәргәйне.

Ғариф, көндәгесә, таң менән тороп, Сирағол тауына аттары яғына китте. Таңға ла һыйыры ҡайтмағас, Мөслимә Шәүрәгә:

- Үҙең барып эҙләп алып килмәһәң - булмаҫ, килен, - тине. - Ул Аҡбаш ни, йәш күгүләнгә әүрәп тик йөрөйҙөр инде, моғайын. Быҙауларға ла мәле яҡынлашып килә. Берәй эт-ҡошҡа юлығып ҡуймаһа ғына ярар ине. Эҙләшергә йә Сабирҙы ебәреп булмай, һарыҡтарҙы ҡарарға унан башҡа кеше лә юҡ. Йә Сәбиләһе эшенән бушай алмай тағы, - тип һөйләнде.

Һыйырҙы эҙләргә тип сыҡҡан Шәүрә туп-тура Тәрәнүҙәк яғына йүнәлде. Сирағол тауының көньяҡ итәгендә тап ана шулай тип аталған тәрән бер үҙәге бар. Яҙ һайын, әллә көн бите булғанға, һәр төрлө япраҡлы һутлы үләндәр иң тәүҙә шунда үҫеп сыға. Шуға күрә лә, малдар гелән генә Тәрәнүҙәккә барырға ынтыла ла тора. Аҡбаш та, моғайын, шунда киткәндер...

Тәрәнүҙәккә тиклем йәйәүле кешегә байтаҡ ҡына ара. Ҡулына тал сыбығы тотҡан Шәүрә әллә ни ашыҡмай ғына, уйҙарына сумып, мал-тыуар һалған берләм юл менән атланы. Ошолай яңғыҙ булған саҡтарында мөхәббәт утында янған йәш ҡатындың уйҙары, әлбиттә, тик йән һөйгәне - Ғариф тураһында ғына ине. Уны уйлаған, күргән һайын, тауышын ишеткән һайын йөрәге яна Шәүрәнең. Янында ғына йөрөгән бәхет ҡошондо тота алмау ғына түгел, хатта уға бер бармағың менән генә булһа ла ҡағыла алмай йөрөсө инде. Әле ҡырға сыҡҡас та шул турала уйланды. Янып барған йөрәгенең урынынан сығырҙай булып тибеүен тойҙо. Ғарифтың үткән йәй бесәнгә барған саҡта йырлаған йыры күңеленә килде. Сылтырап аҡҡан шишмәләй моңло тауышы менән Шәүрә шул йырҙы үҙенә үҙе ишетерлек итеп йырлап ҡараны.

... Эскенәйем тулы, ай, ут яна.
Һүнһен дә тиһәм, бөтән ни ҡала?

Үҙәкте өҙөрлөк моңло йыр... Ҡайныһының эсендә ут яна... Хәҙер инде шул ут Шәүрәне лә ялмап алды, һәм уны бер ҡасан да һүндереп булырлыҡ түгел. Әй, Шәүрә, Шәүрә, ә ниңә һуң уны һүндерергә ти, янһын, әйҙә! Берҙән-бер йәшәү мәғәнәһе булған шул утың һүнһә, һиңә тағы ни ҡала был донъяла? Татлы хисҭәренә бирелеп барып, яҡындағы ғына ҡайындар араһынан килеп сыҡҡан ҡайныһын да абайламай ҡалды.

- Йоморо-йоморо йомғағыңды юғалтыныңмы әллә, килен? - тигән тауышҡа Шәүрә тертләп китте. Уның ҡаршыһында атын етәкләгән, оҙон сыбыртҡыһын иңбашы аша һалып, түбәтәйен ҡырыныраҡ кейеп алған Ғариф ҡайныһы йылмайып тора ине. "Ҡайны" тигәс тә, нәмәһе генә "ҡайны" булһын инде уның. Бер генә йәшкә олораҡ бит ул Шәүрәнән! Ҡайны була торған кешеләрҙе илле-алтмыш йәштәр самаһындағы һаҡаллы ҡарт итеп күҙ алдына килтерә ине Шәүрә элегерәк. Ә уның ҡайныһы - бөтөнләй егет кенә. Егеттең дә ниндәйе!

- Аҡбаш һыйыр ҡайтмаған, шуны эҙләйем, - тине Шәүрә. - Кисә иртәнсәк башҡа малдар менән ҡырға сығарып ебәргәйнем...

Һыйыр юғалғанын ҡайныһы, моғайын, белә торғандыр инде. Шулай ҙа Шәүрә, әллә ҡаушауынан, әллә ни, балалар һымаҡ тәтелдәй бирҙе:

- Берәй эт-ҡошҡа юлыҡмаһын, тип ҡурҡамсы. Әле ҡәйнәм...

- Ярай әле, ҡайтып өлгөрмәгән, - тип бүлдерҙе уны Ғариф.

- Нигә улай тиһең, ҡайным?..

- Сөнки ул өйгә ҡайтҡан булһа, мин һине бында аулаҡта осратмаған да булыр инем. Бер өй эсендә йәшәһәк тә, мин бит һинең менән икәүҙән-икәү һөйләшергә зар-интизар булып йөрөйөм, килен. Һәр саҡ яулыҡ менән баҫырылған нурлы йөҙөңдө лә күрә алмайым, тиерлек. - Ғариф атының теҙгенен ҡулынан ысҡындырҙы ла, Шәүрәнең беләгенән килеп тотто. Тегеһе оялышынан башын аҫҡа эйеп, еңелсә генә ҡаршылашҡан булды.

- Ҡуйсы, ҡайным, кеше-маҙар күреп ҡалыр...

- Был тирәлә минең ҡара айғырым менән Аҡбаш һыйырҙан башҡа йән эйәһе юҡ, - тип йылмайҙы Ғариф, - тағы бер яңы тыуған безәүкәсте иҫәпкә алмағанда...

- Аҡбаш һыйыр? Ҡайҙа һуң ул?

- Һөйөнсө, Аҡбаш нәҡ үҙе кеүек аҡ башлы ғына быҙау тапҡан. Әле ул ял итә. Яҡында. Һуңғараҡ, быҙауы нығлап аяҡтарына баҫҡас, ҡыуып алып ҡайтырбыҙ.

Шәүрәнең шатлығы эсенә һыйманы.

- Ҡалай яҡшы булған, ҡайным! Һөйөнсөһөнә - баллап-ҡаймаҡлап бер самауыр сәй!

- Һөйөнсөһөнә берҙе генә битеңдән үптермәһәң, һыйырҙың ҡайҙа торғанын да күрһәтмәйем, - тине Ғариф шаяртып.

- Ҡайны кешегә килешерме икән киленең битенән үбеү? - тип яуапланы Шәүрә батырлана төшөп.

- Шәүрәкәй, - тине Ғариф тулҡынланып, - белһәң ине, минең нисек төндәр буйы һине уйлап, йоҡлай алмай ғазапланғанымды! Һинең күҙҙәреңә бер ҡарар өсөн генә бөтә донъямды фиҙа ҡылыр инем... Был донъяла ниндәй яҡшы нәмә бар, һине шулар менән тиңләп ҡарайым, Шәүрә. Әммә һинән дә гүзәлерәк зат Ер йөҙөндә юҡтыр!

Ғариф Шәүрәнең күҙҙәренә ҡарап, ҡурай моңондай гөрләп торған матур тауышы менән йырлап ебәрҙе:

*Шәүрә килен кейгән, ай, еләндең*
*Итәк осҡайҙары мунсаҡлы.*
*Айға ла ғына көнгә тиңләмәйем,*
*Һылыулығың, Шәүрәкәй, шул саҡлы.*

**(Дауамы бар).**

ЗАУЫҠ

Мөнир ИҠСАНОВ.

# БАЛ ҠОРТТАРЫ КЕҮЕК ҮҘЕҢ БАЛҺЫҘ

## Тороп ҡалма инде, башҡортом

### Йөрәк өнө

Йөрәк тибә күкрәгемдә,
Һәр тибеше тиң бер өнгә:
Атам-әсәм - ерем бар,
Тыуған йортом- илем бар,
Һөйгән йәрем - ирек бар,
Киләсәгем - телем бар,
Туғандарым - халҡым бар,
Халҡым өсөн, ерем өсөн,
Илем, телем, ирек өсөн
Йәшәр, үлер хаҡым бар.

### Сәйерлек

Күрәләр ҙә миңә ят булыуын
Хәмер-шарап кеүек эсемлек,
Текәләләр һынап күҙҙәремә,
Эҙләгәндәй сәйер кәмселек.

Йә сәйерме инде?
Ҡай заманда
Иҫерек йөрөгән ул мосолман?
Зиһенемә шайтан һыуын ҡойоп,
Гонаһ диңгеҙенә мин суммам!

Икенсенән,
Мин башҡорт та баһа,
Ризыҡ түгел - шарап-һыралар.
Буйыбыҙға һеңмәй быңдай ағыу,
Милләтемде шулар ҡыралар.

Мин - башҡамын
Һеҙҙең арағыҙҙа!
Һәм был минең иң ҙур "кәмселек"!..
Мин ысындан кәм булырға әҙер,
Ҡамамаһа һеҙҙе эскелек.

### Тел

"Рус теленә күсәм" тигән һүҙҙең
Тура мәғәнәһен иҫләһәм,
Әрмәндегә осҡан ваҡ бөжәктәй
Үҙ үҙемде шунда хис итәм.

Рус теленә күсһәң, һин бит уның
Эләгәһең үткер тешенә.
Сәйнәләһең бит һин, йотолаһың
Урыҫ милләтенең эсенә.

### Һайлайһыңмы шул донъяны?!

Һәр йондоҙға - Күк өләшә,
Һәр диңгеҙгә - Ерҙең йөше,
Һәр яңғыҙға тыуа ише,
Йәшәй алмай ишһеҙ кеше.

Тәнең булһа, кәрәк рухың,
Төнөң булһа, кәрәк утың,
Йырың булһа, кәрәк һүҙең,
Ереӊ булһа, кәрәк үҙең.

Ауҙар ятһа, балыҡ сығыр,
Тауҙар ҡалҡһа, баҡыр сығыр,
Яуҙар сыҡһа, батыр сығыр,
Яуҙан тере бахыр сығыр.

Һәр бер эткә - татлы һөйәк.
Һәр бөркөткә - ҡаты йөрәк.
Һәр бүрегә ҡуян кәрәк,
Йәшәр өсөн ҡорбан кәрәк.
Һайлайһыңмы шул донъяны?!
Ҡора алырһыңмы яны?!

### Шәжәрә урманы

Уралтауҙың ҡуйынына
Һыйынып үҫә шәжәрәм.
Олоно тәҙ ҡаты уның,
Тамырҙары нык, тәрән.

Ботаҡтары шәжәрәмдең
Тирә-яҡҡа йәйелгән.
Ямғыр яуһа - ышыҡ улар,
Ҡояш янһа - күләгә.

Шәжәрәмдә - бер япраҡ мин,
Тамырымдан һут алам.
Өҙәлә ҡуйһам, һарғаямын,
Донъя йөҙөнән юғалам.

Шәжәрә лә йәшәй алмай,
Ерҙә яңғыҙ үҫһә ул,
Йәшен уны һәләк итә,
Йә язалай ел-дауыл.

Тамыр йәйеп буй еткерһә,
Ырыуҙаштар эргәлә,
Шаулап тора шәжәрәләр, -
Бер-береһенә терәлә.

### Арҡа һөйәге

Әйт, ниндәй йөк ята иңдәреңдә?
Кәүҙәң, Рәсәй, ҡалған бөкрәйеп.
Тура баҫмауыңдан сатнап һыҙлай
Уралҡайым -
Арҡа һөйәгең.

Күпме ауыр йөктәр һин күтәрҙең!
(Һайлай белмәнең шул еңелдән).
Бөгөлмәне арҡаң,
Үҙ-үҙеңде
Һин күтәрмәй йәшәп бөгөлдөң.

Әйт, ниндәй өй кәрәк һиңә, Рәсәй?
Емерәһең, төҙөп бөтмәйсә.
Бер көнөң дә үтмәй,
Билкәйеңде -
Башҡортостанымды бөкмәйсә.

Күпме быуат
Билде биштән быуып
Һин тапаның көрәш майҙанын!
Бирелмәне билең.
Билгә һуҡты
Үҙ-үҙеңде еңә алмауың.

Әйт, ниндәй йән, Рәсәй,
Үҙ тәнеңең
Ағзаһынан үстәр ҡандырған?
Кем ҡотҡарыр һине,
Билдән яҙһаң,
Арҡа һөйәгеңде һындырһаң?!

### Ил көҙгөһө

Көнөбөҙҙә - аҡ һәм ҡара,
Алмашынып һәр саҡ бара
Миҙгелдәр.
Баҡ һин ил көҙгөһөнә -
Көнөң - тик мәңгелек көҙҙә
Илгиҙәр.

Һәр беребеҙ - нур, аҫылташ.
Минең, уның янға һин баҫ, -
Беҙ халыҡ.
Күр халыҡты: ул бары ҡом,
Уны баҫҡан ҡараңғы шом
Һәм һыуыҡ.

Һәммәбеҙҙә - бер аң, бер ҡан,
Айырылып тик аҙашҡан
Йәнебеҙ.
Мин дә, һин дә, ул да батыр,
Йәнәш торһаҡ, шундай бахыр
Йәлбеҙ беҙ...

### Рәсәй

Икһеҙ-сикһеҙ һуҙылған сик. Уны
Уйҙар менән ҡала иңләргә.
Шул сик ирекһеҙҙән төшөрөп тора
Бер килбәтһеҙ ирҙе иҫтәргә.

Буй-һынында гәйрәт һис юҡ уның,
Ҡорһағынан килә дәүлеге.
Бер урында ята тора алмай,
Тамаҡ туйҙырып үтә тәүлеге.

Ҡомһоҙлоғо анын тамам юйған.
Ул ҡайғырта бары үҙ-үҙен.
Балалары астан интекһә лә,
Ҡыймай атаһының бер һүҙен.

Был дәү ирҙең ул-ҡыҙҙары үҫә
Меҫкен, көнсөл, кәм һәм ваҡ булып.
Сирле атаһының милкен бүлешә,
Хәстәрләйме, тиһәң, һаулығын.

Ә ир маһайыуҙан ҡотола алмай,
Ажғырырға һаман маташа.
Дошмандары һәм дуҫтары биҙеп
Унан күптән ҡыла тамаша.

Баҫа алмай ул ир аяғына,
Иҫерек баштан, һынған рухынан.
Йыуан кәүҙәһенән ҡеүәт һурып
Йөрәгенә ул май ултыра.

Тышҡы, эске ҡиәфәте әйтә,-
Сиктәр белмәҫ холоҡ ул ирҙә.
Сикһеҙлеген, тимен, сик ҡуймаҫмы
Бер мәл килеп һинең ғүмергә.

### Урал ҡоросо

Бер ҡараһам Урал тауҙарына,
Тоям ата-бабам ҡарашын.
Тәү башҡорттоң аҫыл рухымы ни
Ҡул теймәгән Урал ҡоросо!

Замандарҙың һалҡын дарьяһынан
Ташҡын-ташҡын булып һыу аҡҡан.
Ялҡын бәргән быуаттарҙың уты,
Ҡорособоҙ шулай сыныҡҡан.

Нисә башҡорт быуынының рухы
Ҡорос ҡылыс булып ҡойолған?!
Башын һалған яугир менән бергә
Урал ҡуйынына һыйынған.

Бер ҡараһам тауҙай өйөлөп ятҡан
Мин бөгөнгө башҡорт рухына,
Бәгерҙәрем һығылып һыҙлай ғына,
Һәм күңелем тағы хурлана.

Боронғолай Урал ҡоросонан
Рух һалынған беҙҙең быуынға.
Беҙ йөрөткән ҡорос ҡылыс түгел,
Беҙ йөрөткән ҡорос - бығауҙар.

### Атлант һәм Геракл

Уралтауҙан алыҫ түгел, тиҙәр,
Атлант тотоп тора һауаны.
Тик ниңәлер дер һелкенә һауа,
Бына саҡ-саҡ Ергә ауманы.

Ер шарының был яҡ тарафтарын
Иңләп йөрөй, ахры, Геракл.
Ул эҙләгән алтын алмаларҙан
Һәләк булмаҫ, тимә, Ер ҡапыл.

Гераклдың иңдәренә тағы
Күк көмбәҙе әллә күсәме?
Ялҡын бәреп яҡыная кеүек
Асмандағы утлы есеме.

Өҫкө ҡаттар елкә алыштыра,
Ә тетрәнә ҡабат Уралым.
Алтын алмаларҙы Атлант ала.
Бөртөкләпме алтын урланды?!

Атлант!
Атлант!
Һинең һындарыңда
Ата-бабаларҙы таныным.
Халҡым атланттары һаман һона
Гераклдарға алтын алмаһын.

### Тай

Малай саҡта ҡул теймәгән атҡа -
Тайға атландырҙы атайым.
Тәүге тапҡыр мин һыбайлы инем,
Тәүгә эйәрләнде йәш тайым.

Егет кеүек атҡа еңел мендем, -
Атай ҡулы булды өҙәңге.
Башын сайҡап тайым сапсынманы, -
Атай ҡулы тотто йүгәнде.

Әкрен генә юртып аҫау атым,
Бер майҙанда һыҙҙы түңәрәк.
Ә йөрәгем сабып, әйтерһең дә,
Бар ер шарын үтте мең урап.

Яңғыҙ сабам хәҙер.
Ат атланып
Сабыштарға сығыр йәштәмен.
Үҫкәс кенә белдем,
Ғүмер-айғыр
Булған икән теге йәш тайым.

*✓ Тотош республика буйынса ла хәлдәр яҡшынан түгел. Йылына 34 мең ғаилә барлыҡҡа килһә, 16 мең айырылышыу күҙәтелә, тимәк, һәр икенсе ғаилә айырылыша, тигән һүҙ.*



*ИНТЕРНЕТТАН*



# ҮҘ-ҮҘЕНДЕ ЯРАТЫУ...
## тәбиғәттән

■ Цюрих һәм Базель университеттары хеҙмәткәрҙәре асыҡлауынса, кешенең баш мейеһе биологик рәүештә эгоистик ҡыҙыҡһыныуҙарҙы һәм бер үк ваҡытта мораль принциптар менән ғәҙеллекте раҫлауға программалашҡан. Ҡайһы берҙә был теләктәр бер-береһенә ҡаршы ла килә. Был нейрондарҙың эшмәкәрлеге менән аңлатыла. Тәжрибәлә ҡатнашыусы студенттарҙы парҙарға бүлгәндәр, ҡапма-ҡаршы ултыртҡандар һәм бер-береһенән ҡаплап ҡуйғандар. Икенсе парын күрмәһәләр ҙә, улар иркен аралаша алған. Бер кешегә 20 франк аҡса бирелгән һәм ул был аҡсаларҙы ҡаршыһында ултырыусы менән бүлешергә тейеш булған, әммә аҡсаның күпме өлөшө менән бүлешәсәген ул үҙе хәл иткән. Һөҙөмтәлә, был ике ҡапма-ҡаршы тойғоноң да тәбиғәт тарафынан һалыныуы асыҡланған. Баш мейеһенең префронталь зонаһы әүҙемлеге түбән булһа, кеше эгоист була, ә эгоистик импульстарҙы баҫыу өсөн был әүҙемлекте күтәреү кәрәклеге билдәле булған.

■ Транспортта музыка тыңлау ишетеү һәләтен түбәнәйтеүе ихтимал, тип иҫкәртә доктор Ниших Схах. Бөгөн күптәр эшкә, уҡыуға барып еткәнсе ҡолаҡсындарҙан музыка тыңларға әүәҫләнгән. Музыкаға машина тауышы ла өҫтәлеп, ҡолаҡтар өсөн өҫтәмә көсөргәнеш барлыҡҡа килә. Музыка тауышы ни тиклем көслөрәк булған һайын, ул шул тиклем зарарлыраҡ, ти табиптар. Әгәр ҙә белгестәрҙең иҫкәртеүенә ҡолаҡ һалмаһаң, ишетеү һәләтен өлөшләтә юғалтыу ихтималлығы бар. Етмәһә, кеше быны шунда уҡ һиҙмәйәсәк, әммә олоғайғас, был проблема үҙен белдерә башлаясаҡ. Концерт һәм клубтарға йыш йөрөүсе кешеләргә лә хәүефләнергә урын бар. Тауышлы урындан ҡапыл тынлыҡҡа сығыу ҙа ишетеү һәләтенә насар тәьҫир итә. Кем дә кем музыка тыңламайынса тора алмай, белгестәр уларға яҡшы сифатлы ҡолаҡсындар һатып алырға кәңәш итә. Шул саҡта тышҡы сит тауыштарҙы ишетергә теләмәйенсә, музыканы ҡысҡыртып тыңларға тура килмәйәсәк. Ә бына көнөнә биш минут ҡына ҡысҡыртып музыка тыңлауҙан һаңғырау ҡалырға була.

■ Йыш асығып йонсойһоғоҙ икән, рационығыҙҙа аҡһым етешмәүе ихтимал, ти белгестәр. Ит, балыҡ, йомортҡа, сәтләүекте күберәк ашап, ауырлыҡты ла контролдә тоторға, йыш ҡапҡылап йөрөү ғәҙәтенән дә ҡотолорға мөмкин. Тәжрибәләр күрһәтеүенсә, рационында аҡһым 10 проценттан аҙ булған кешеләр аҡһымға бай ризыҡ менән туҡланыусыларға ҡарағанда көнөнә 260 калорияға күберәк ҡуллана икән.

■ Калифорния властары ҡарары буйынса, штатта 2012 йылдың 1 ғинуарынан солярийҙарға балиғ булмаған үҫмерҙәрҙе индермәй башлаясаҡтар. Яһалма ҡыҙыныуға беренсе булып тыйыу индереүсе Калифорния штаты губернаторы әйтеүенсә, был американлыларҙың сәләмәтлеген нығытыу маҡсатында эшләнә. Статистика буйынса, бөгөн тире яман шеше 25-29 йәшлек ҡатын-ҡыҙҙар сире тип иҫәпләнә. 30 йәшкә тиклем солярийҙа ҡыҙына башлау һөҙөмтәһендә кешеләрҙең 75 процентында меланома үҫеше мөмкинлеге артҡан. Мәғлүмәттәргә ярашлы, 18 йәштән бәләкәйерәк үҫмерҙәр солярий клиенттарының 5-10 процентын тәшкил итә, тимәк, был яңылыҡ һөҙөмтәһендә матурлыҡ индустрияһы байтаҡ ҡына юғалтыу кисерергә мәжбүр буласаҡ.

*ФЕКЕР ҠОРО*

**XX быуат тотош донъя цивилизацияһы өсөн оло тетрәнеүҙәр осоро булды, тиһәк тә яңылышмабыҙ. Шуға ла бөгөн йәмғиәтебеҙҙең төп институттары, тәү сиратта, ғаилә үҙенең ҡиммәттәрен юғалта төштө. Иң ҡурҡынысы, ғаилә иң яҡлауһыҙ ячейкаға әүерелде. Бөгөн ғаиләлә нимә генә булмаһын: ата-әсә балаларын ҡарамай эсеп йөрөймө, ҡатын-ҡыҙҙар, ҡарттар, балалар, ҡайһы саҡта ирҙәр ҙә йәберһетеләме - быға дәүләт бөтөнләй ҡыҫылмай, яҡлай ҙа алмай. Статистика буйынса Рәсәйҙә көнөнә 6-7 баланың ғаиләләге ыҙғыш һөҙөмтәһендә донъя менән хушлашыуын, ҡылынған ауыр енәйәттәрҙең һәр дүртенсеһе ғаиләләге бәхәстәр нигеҙендә яһалыуын иҫәпкә алғанда, закон сығарыусылар тарафынан был мәсьәлә күптән хәл ителергә тейеш ине һымаҡ. Шуға ла Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының Ҡатын-ҡыҙҙар, балалыҡ һәм атайлыҡ мәсьәләләре буйынса комиссияһы БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары тарафынан эшләнгән "Ғаиләлә йәберләүҙәргә дусар ителгән кешегә социаль-психологик ярҙам тураһында"ғы закон проектын беренселәрҙән булып яҡлап сыҡты һәм үҙенең Ейәнсура районы Иҫәнғол ауылында уҙғарған күсмә ултырышын ошо закон проектын тикшереүгә арнаны. Күсмә ултырышта БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесенең беренсе урынбаҫары Лилиә ҒҮМӘРОВА, Ейәнсура районы хакимиәте башлығы Әлфәрис БАЙСУРИН, район башҡорттары ҡоролтайының, ҡатын-ҡыҙҙар советының әүҙем ағзалары, мәғариф һәм мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре ҡатнашты. Ултырышты Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының Ҡатын-ҡыҙҙар, балалыҡ һәм атайлыҡ мәсьәләләре буйынса комиссияһы етәксеһе, "Киске Өфө" гәзитенең баш мөхәррире Гөлфиә ЯНБАЕВА алып барҙы. Күтәрелгән мәсьәлә буйынса сығыш яһаусыларҙың фекерҙәрен тыңлайыҡ.**



# ҒАИЛӘЛӘГЕ ЙӘБЕРЛӘҮҘӘРГӘ...
## ысынында кемдәр дусар?

**Әлфәрис БАЙСУРИН, Ейәнсура районы хакимиәте башлығы:** 1990 йылдар башында күп ауыл хужалыҡтары банкротҡа әүерелде, ҡайһылары үҙгәртеп ҡоролдо. Ошо сәбәптәр ауыл халҡының юғалып ҡалыуына һәм эскелеккә биреләүенә килтерҙе. Бөгөн һөйләшкән проблеманың да эҙемтәләре ошонан килеп сыҡҡандыр. Ғаиләлә ир йәки ҡатын эсә икән, балалар ҡарауһыҙ ҡала. Былтыр ошондай 31 ата-әсәнең эшен судҡа биргәйнек, 40 балаға ҡарата 26 ата-әсә үҙ хоҡуғынан мәхрүм ителгәйне. Быйыл суд ҡарары менән 10 балаға ҡарата 8 ата-әсә хоҡуғынан мәхрүм булды. Әлбиттә, был иң һуңғы сара, уға тиклем беҙ уларҙы төрлө органдарға саҡырып, әңгәмәләр үткәреп, тәрбиәүи эштәр алып барабыҙ. Тик, ҡыҙғанысҡа күрә, уларҙы хоҡуҡтарынан мәхрүм итеү кеүек һуңғы аҙымға барырға ла тура килә. Етем ҡалған балалар өсөн районда социаль приют бар, бөгөнгө көндә унда 30 бала иҫәпләнә. Ҡайһы саҡта балаларҙы ваҡытлыса булһа ла приютҡа тапшырып торорға мәжбүр булабыҙ, аҡылға ултырып өлгөргән ата-әсәләр балаларын кире өйҙәренә алып ҡайта. Район буйынса 109 бала опекунлыҡҡа бирелгән, аҫрау бала алып тәрбиәләүсе 30 ғаилә бар, уларҙа 47 бала тәрбиәләнә. Шулай уҡ патронат ғаиләләр бар, әлегә 12 ғаиләлә 16 бала тәрбиәләнә. Был ғаиләләрҙең һәр береһе хакимиәт тарафынан контролгә алынған.

Районда, әлбиттә, тәбиғи артым буйынса ыңғай һөҙөмтәләр бар, 2010 йылда ул 74 кеше тәшкил итһә, 2011 йылдың һигеҙ айы эсендә - 16 кеше. Быйыл 176 яңы ғаилә барлыҡҡа килде. Шул уҡ ваҡытта айырылышыуҙарҙың да күп булыуы хәүефләндерә.

Райондың нигеҙен ауыл хужалығы тәшкил иткәнлектән, халыҡтың төп килемен шәхси хужалыҡта етештерелгән продукция тәшкил итә. Шуға ла бындай ауыр хәлдә ҡалған ғаиләләргә мөмкин тиклем ярҙам күрһәтергә тырышабыҙ. Былтыр Байыш ауыл советында шундай бер тәжрибә үткәреп ҡараныҡ. Эскелеккә бирелгән ғаиләләрҙе ауыл биләмәһе хакимиәтенә йыйып: "Ниндәй ярҙам күрһәтһәк, һеҙ айыҡ тормош алып барып, балаларығыҙҙы үҙегеҙ тәрбиәләй башлаясаҡһығыҙ?"- тигән һорау ҡуйҙыҡ. Ауыл биләмәһе хакимиәте һәм йәмәғәтселеге ҡарары нигеҙендә иҫәптә тороусы биш ғаиләгә ярҙам күрһәттек: кемеһенең өйөнөң башын ябып, кемеһенә һыйыр һатып алып бирҙек. Әлеге көндә шул биш ғаиләнең өсәүһе яҡшы йәшәп ята. Йәмәғәтселектең йоғонтоһо ҙур ауылда, хакимиәт башлығы әйткән - бер, ә ауылдың абруйлы кешеләре әйтһә, тәртип боҙоусы барыбер ояла.

Эске эштәр органдары хеҙмәткәрҙәре тарафынан хакимиәткә көн һайын мәғлүмәт биреп барыла, уртаса 7-8 мәғлүмәт инһә, уның яртыһы ғаиләләге ыҙғыштар тураһында була. Шуға ла, ысынлап та, ғаиләлә ҡатын-ҡыҙҙың, баланың, шул уҡ ирҙең дә яҡлаулы булыуын тәьмин иткән закон ҡабул итергә кәрәк. Сөнки беҙҙең ғаилә эсендәге хәлдәргә ҡыҫылырға хоҡуғыбыҙ юҡ. Закон тарафынан ғаилә ағзаларын яҡлау нығытылған булһа, эшләүе лә еңелерәк булыр ине.

**Лилиә ҒҮМӘРОВА, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесенең беренсе урынбаҫары:** Ҡыҙғанысҡа күрә, беҙ ғаилә менән ата-әсәнең эсеүе арҡаһында балалары яфа сигә башлағас, ата-әсәне хоҡуҡтарынан мәхрүм итеү мәле еткәс кенә ҡыҙыҡһына башлайбыҙ. Ә бына ғаилә яңы барлыҡҡа килгәндә уға ярҙам итеү ҡағиҙәһе юҡ. Был совет осоронда ла иғтибарһыҙ ҡалған өлкә булды. Шуға ла ғаилә хәлдәре шул тиклем бөлөп китте. Бөгөн Рәсәй һәм республика кимәлендә ғаиләгә йөҙ менән боролорға, уға социаль-иҡтисади яҡтан да, әхлаҡи яҡтан да ярҙам итеү сараһын күрергә кәрәк. Бер бәләкәй генә миҫал. Бөгөнгө көндә бала ҡарау буйынса түләнгән айлыҡ пособиеның күләме - 120 һум. Бының өсөн йыл һайын республика бюджетынан 850 млн һум аҡса бүленә. Был аҡса етеш ғаилә өсөн дә, мохтажлыҡ кисергәне өсөн дә артыҡ файҙа килтермәй. Әлбиттә, беҙҙең икенсе матур проекттарыбыҙ ҙа бар ул. Мәҫәлән, күп балалылар өсөн сертификат программаһын алайыҡ. Сертификаттың суммаһы бер миллиондан ике миллион һумға тиклем. Ғаиләгә торлаҡ мәсьәләһен хәл итергә тос ҡына ярҙам был. Был программа өсөн республика йылына 50-60 млн һум аҡса бүлә, йәғни ул республика буйынса яҡынса 30-лап ғаиләгә торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға булышлыҡ итә. Был программа буйынса сиратта тороусылар һаны меңдән ашып китте, әгәр ҙә был темп менән барһаҡ, уларҙың барыһын да йортло итер өсөн нисәмә йыл кәрәк буласаҡ. Шуға ла социаль ярҙам күрһәтеү механизмдарын үҙгәртеү көн талабы булып тора.

Ә ғаиләгә ваҡытында ярҙам итеү шул тиклем мөһим. Өс йыл элек Хөкүмәт эргәһендә әсәлек, атайлыҡ һәм балалыҡты яҡлау буйынса ведомство-ара совет булдырылғайны. Ошондай уҡ советтар муниципаль райондарҙың һәр береһендә төҙөлдө. Был советтар энтузиазм нигеҙендә эшләп килһә лә, беҙ ғаиләләрҙәге проблемаларҙы күрергә өйрәндек. Ғаилә менән эшләүсе институттар күп: опека һәм попечителлек буйынса, балиғ булмағандар буйынса комиссиялар, социаль яҡлау, мәғариф, һаулыҡ һаҡлау бүлектәре. Әммә уларҙың үҙ-ара эш итеү, ҡатын-ҡыҙҙарға, ирҙәргә, балаларға ваҡытында ярҙам күрһәтеү механизмдары яйға һалынмаған.

Әле беҙ хакимиәт башлығының Ейәнсура районы буйынса мәғлүмәттәрен тыңланыҡ. Тотош республика буйынса ла хәлдәр яҡшынан түгел. Йылына 34 мең ғаилә барлыҡҡа килһә, 16 мең айырылышыу күҙәтелә, тимәк, һәр икенсе ғаилә айырылыша, тигән һүҙ. Йыл һайын меңгә яҡын кеше ата-әсәлек хоҡуҡтарынан мәхрүм ителә. Республикала 19400 етем бала иҫәпләнһә, уларҙың 90 проценты - социаль етемдәр. Ата-әсәһе иҫән булып та, йәшәү урыны табыу, уҡытыу кеүек барлыҡ проблемалар менән дәүләт шөғөлләнә. Әгәр ҙә ғаилә институтын нығытыу хәстәрлеген күрмәһәк, ғаиләгә ярҙам итмәһәк, ошо хәл артабан да дауам итәсәк.

Ә инде "Ғаиләлә йәберләүҙәргә дусар ителгән кешегә социаль-психологик ярҙам тураһында"ғы Закон проектына килгәндә, ул буш урында барлыҡҡа килмәне, быға тиклем дә ундай закон ҡабул итергә тырышыуҙар булды. Әммә бөгөн Рәсәй закондар йыйылмаһында "ғаиләлә йәберләүҙәр, көс ҡулланыу" тигән төшөнсә лә, был мөнәсәбәттәрҙе яйлаусы закон да юҡ. Әлбиттә, был төбәктәрҙең дә ҡулын бәйләй. Ябай ғына миҫал. Өс балалы ҡатынды ире туҡмай, ти. Ул ирен судҡа биреү өсөн дауаханаға барып, тәнендәге туҡмалған урын эҙҙәрен күрһәтергә тейеш. Ошо ваҡытта ул ҡайҙа йәшәп торорға тейеш, тигән һорау үҙенән-үҙе килеп тыуа. Йорт йә фатир ирҙең шәхси милке иҫәпләнә икән, торлаҡ кодексы ирҙе яҡлаясаҡ. Ошондай әсәләр менән осрашып, һөйләшеп йөрөгәндән һуң, был проблема нисектер яйға һалынырға тейеш, тигән фекер тыуҙы. Шуға бәйле,



## 24 ОКТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "Модный приговор"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "ЖКХ"
13.20 "Участковый детектив"
14.00 Другие новости
12.00 Новости
12.20 "ЖКХ"
13.20 "Участковый детектив"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
15.55 "Обручальное кольцо". Сериал
16.55 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.45 "Давай поженимся!"
19.50 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Черные волки", 5-я серия
22.30 "Познер"
23.30 Ночные новости
23.50 "Форс-мажоры", 5-я серия
00.40 "Мы - инопланетяне"
01.40, 03.05 "Сдохни, Джон Такер!" Комедия
03.00 Новости
03.25 "Смертельный контакт: птичий грипп в Америке"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "С новым домом!"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
13.00 "Тайны следствия". Сериал
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 166-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 196-я серия
17.55 "Здравствуй, мама!" 12-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Пончик Люся", 11-13-я серии. Сериал
23.50 "Галина Вишневская. Роман со славой"
00.50 "Вести+"
01.10 "Профилактика"
02.20 "Пивной бум". Комедия
04.05 "Городок. Дайджест"
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ
05.55 "НТВ утром"
08.30 "Эра стрельца". Сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие. Обзор за неделю"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Судебный детектив". Сериал
14.40 "Центр помощи "Анастасия"
15.30 "Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Улицы разбитых фонарей".
21.30 "Глухарь. Возвращение". Сериал
23.15 "Сегодня. Итоги"
23.35 "Честный понедельник"
00.25 "Школа злословия"
01.10 "Футбольная ночь"
01.45 "В зоне особого риска"
02.20 "Один день. Новая версия"
02.55 "Город соблазнов". Остросюжетный сериал
04.55 "Мангуст". "Папина дочка" Детективный сериал

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**10.00, 12.15, 23.45 "Полезные новости"**
**10.15, 15.15 "Учим башкирский язык"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Городок АЮЯ"**
**11.00, 00.00 "Замандаштар"**
**11.15, 17.45 "Орнамент"**
**11.30, 12.30, 13.30, 14.30, 16.30, 17.30, 18.30, 19.30, 20.30 "Новости"**
**11.45 "Итоги недели"**
**12.45, 17.15 "Надо знать!"**
**13.00 "На самом деле"**
**13.45 "Бахетнама"**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.45 "Царь горы"**
**16.00 "Бауырхак"**
**16.15 "Шатлык йыры"**
**16.45 Документальный фильм**
**18.00 "Еду я в деревню"**
**18.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**18.45 "Сэнгелдек"**
**19.00, 19.40, 20.40 "Хозяин тайги"**
**20.55 Открытый чемпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ. "Северсталь" (Череповец) - "Салават Юлаев" (Уфа). В перерывах: Новости**
**23.30 Послесловие" с Азаматом Саитовым"**
**00.15 "Любимые мелодии"**

## 25 ОКТЯБРЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "Модный приговор"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "ЖКХ"
13.20 "Участковый детектив"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
15.55 "Обручальное кольцо". Сериал
16.55 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.45 "Давай поженимся!"
19.50 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Черные волки". Сериал
22.30 "Супертело, супермозг"
23.30 Ночные новости
23.50 "На ночь глядя"
00.45 "Помеченный смертью". Боевик
02.35, 03.05 "Кокон: возвращение"
03.00 Новости

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
13.00 "Тайны следствия". Сериал
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 167-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 197-я серия
17.55 "Здравствуй, мама!" 13-я серия
18.55 "Прямой эфир". Ток-шоу
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Пончик Люся", 14-16-я серии
23.50 "Галина Вишневская. Роман со славой"
00.50 "Вести+"
01.10 "Профилактика"
02.20 "Честный детектив"
02.50 "Белый охотник, черное сердце"

### НТВ
05.55 "НТВ утром"
08.30 "Эра стрельца". Сериал
09.30 "Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Внимание: розыск!" с Ириной Волк"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Судебный детектив". Сериал
14.40 "Центр помощи "Анастасия"
15.30 "Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Улицы разбитых фонарей".
21.30 "Глухарь. Возвращение". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Формат А4". "Знакомство"
00.35 "ГРУ. Тайны военной разведки"
01.30 "Кулинарный поединок"
02.30 "Один день. Новая версия"
03.00 "Город соблазнов". Сериал
04.50 "Мангуст". "Весеннее обострение"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**10.00, 23.45 "Полезные новости"**
**10.15, 15.15 "Учим башкирский язык"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Царь горы"**
**11.00, 00.00 "Замандаштар"**
**11.15, 17.45 "Орнамент"**
**11.30, 12.30, 13.30, 14.30, 16.30, 17.30, 19.30, 20.30 "Новости"**
**11.45 "Пора разобраться"**
**12.45, 17.15 "Надо знать!"**
**13.00, 22.00 "На самом деле"**
**13.45 "Башкорт йыры"**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.45 "Борсак"**
**16.00 "Байтус"**
**16.15 "Йырлы караз"**
**16.45 Документальный фильм"**
**18.00 "Послесловие"**
**18.15 "Деловой Башкортостан"**
**18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.)**
**18.45 "Сэнгелдек"**
**19.00, 19.40, 20.40 "За спичками"**
**21.00 "Действующие лица"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**23.00 "Уфимское "Времечко"**
**23.30 "Криминальный спектр"**
**00.15 Поет Геннадий Родионов**

## 26 ОКТЯБРЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "Модный приговор"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "ЖКХ"
13.20 "Участковый детектив". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
15.55 "Обручальное кольцо". Сериал
16.55 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.45 "Давай поженимся!"
19.50 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Черные волки", 7-я серия
22.30 "Среда обитания"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "Убийство", 5-я серия
00.55, 03.05 "Водный мир". Фантастический боевик
03.00 "Новости"
03.30 "Врата"
04.20 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "С новым домом!"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
13.00 "Тайны следствия"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 168-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему". Сериал
17.55 "Здравствуй, мама!" 9-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Пончик Люся", 17-я-19-я серии
23.30 "Исторический процесс"
01.05 "Профилактика"
02.00 "Запомните меня такой"
02.15 "Горячая десятка"
03.20 "Комната смеха"
04.20 "Городок. Дайджест"

### НТВ
05.55 "НТВ утром"
08.30 "Эра стрельца"
09.30 "Чрезвычайное происшествие"
10.00 "Сегодня"
10.20 "В зоне особого риска"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.30 "Судебный детектив". Сериал
14.40 "Центр помощи "Анастасия"
15.30 "Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Улицы разбитых фонарей"
21.30 "Глухарь. Возвращение"
23.15 "Сегодня. Итоги"
23.35 "Формат А4". "Вспомнить, что было"
00.35 "Внимание: розыск!" с Ириной Волк"
01.15 "Квартирный вопрос"
02.20 "Один день. Новая версия"
02.55 "Город соблазнов". Сериал
04.50 "Мангуст". "Конец игры"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**10.00, 12.15 "Полезные новости"**
**10.15, 15.15 "Учим башкирский язык"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Борсак"**
**11.00 "Замандаштар"**
**11.15, 17.45 "Орнамент"**
**11.30, 12.30, 13.30, 14.30, 16.30, 17.30, 18.30, 19.30, 20.30 "Новости"**
**11.45 "Действующие лица"**
**12.45, 17.15 "Дело мастера"**
**13.00 "На самом деле"**
**13.45 "Байык"**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.45 "Цирк в 13 метров"**
**16.00 "Семер"**
**16.15 "Городок АЮЯ"**
**16.45 Документальный фильм**
**18.00 "Тарихи фараз"**
**18.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**18.45 "Сэнгелдек"**
**19.00, 19.40, 20.40 "Уроки французского"**
**21.00 "Историческая среда"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**21.45 Открытый чемпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ. "Витязь" (Чехов) - "Салават Юлаев" (Уфа). В перерывах: Новости**
**00.15 "Свидание с джазом"**

## 27 ОКТЯБРЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "Модный приговор"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "ЖКХ"
13.20 "Участковый детектив"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
15.55 "Обручальное кольцо". Сериал
16.55 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.45 "Давай поженимся!"
19.50 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Черные волки", 8-я серия
22.30 "Человек и закон"
23.30 "Ночные новости"
23.50 "Подпольная империя"
00.50 "Цепная реакция". Триллер
02.50, 03.05 "Реинкарнация"
03.00 Новости

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "От всей души"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
13.00 "Тайны следствия"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 169-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему". Сериал
17.55 "Здравствуй, мама!" 15-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Пончик Люся", 20-я и 21-я серии
22.55 "Поединок"
23.50 "Золото инков". Док. фильм
00.50 "Вести+"
01.10 "Профилактика"
02.25 "Крещендо"
04.05 "Городок. Дайджест"
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ
05.55 "НТВ утром"
08.30 "Эра стрельца"
09.30 "Чрезвычайное происшествие"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Медицинские тайны"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.30 "Судебный детектив"
14.40 "Центр помощи "Анастасия"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Улицы разбитых фонарей"
21.30 "Глухарь. Возвращение". Сериал
23.15 "Сегодня. Итоги"
23.35 "Формат А4". "О положительном опыте разрывов"
00.35 "Женский взгляд" Оксаны Пушкиной"
01.20 "Дачный ответ"
02.25 "Один день. Новая версия"
03.00 "Город соблазнов"
04.55 "Мангуст". "Таблетки от жадности"

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**10.00, 12.15, 23.45 "Полезные новости"**
**10.15, 15.15 "Учим башкирский язык"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Цирк в 13 метров"**
**11.00, 00.00 "Замандаштар"**
**11.15, 17.45 "Орнамент"**
**11.30, 12.30, 13.30, 14.30, 16.30, 17.30, 19.30, 20.30 "Новости"**
**11.45 "Тамле" (на русск. яз.)**
**12.45, 17.15 "Надо знать!"**
**13.00, 22.00 "На самом деле"**
**13.45 "Пора разобраться"**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.45 "Книга сказок"**
**16.00 "Шэп арба"**
**16.15 "Йырлы караз"**
**16.45 Документальный фильм**
**18.00 "Волшебный курай"**
**18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**18.45 "Сэнгелдек"**
**19.00, 19.40, 20.40 "Человек с Бульвара Капуцинов"**
**21.00 "Глас закона"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**23.00 "Диспут-клуб "Пятый угол"**
**00.15 Поет А. Бахтиева**

## 28 ОКТЯБРЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.45 "Модный приговор"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "ЖКХ"
13.20 "Участковый детектив"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.25 "Хочу знать"
15.55 "Обручальное кольцо". Сериал
16.55 "Жди меня"
18.00 Вечерние новости
18.45 "Поле чудес"
19.50 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "КВН"
23.45 "Отпуск по обмену". Комедия
02.15 "Автобусная остановка". Комедия
04.05 "Врата"
04.55 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Мусульмане"
09.15 "С новым домом!"
10.10 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
13.00 "О чем не говорят мужчины"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Евросинья. Продолжение". Сериал
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 200-я серия
17.55 "Здравствуй, мама!" 16-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 Торжественное открытие Главной сцены Государственного академического Большого театра России. Прямая трансляция
23.00 "Трава под снегом". Мелодрама
02.45 "Мечтатель". Драма

### НТВ
05.55 "НТВ утром"
08.30 "Эра стрельца"
09.30 "Чрезвычайное происшествие"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Спасатели"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.00 "Сегодня"
13.30 "Суд присяжных. Окончательный вердикт"
14.40 "Центр помощи "Анастасия"
15.30 "Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Улицы разбитых фонарей"
21.30 "Глухарь. Возвращение"
22.35 "Прощай, Глухарь!" Необыкновенный концерт
23.55 "Пятницкий". Криминальная драма
02.05 "Гнев". Драма
04.00 "Город соблазнов". Сериал

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**10.00, 12.15 "Полезные новости"**
**10.15, 15.15 "Учим башкирский язык"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Книга сказок"**
**11.00 "Замандаштар"**
**11.15, 17.45 "Орнамент"**
**11.30, 12.30, 13.30, 14.30, 16.30, 17.30, 19.30, 20.30 "Новости"**
**11.45 "Глас закона"**
**12.45, 17.15 "Надо знать!"**
**13.00 "На самом деле"**
**13.45 "Арслан"**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.45 "Зеркальце"**
**16.00 "Сулпылар"**
**16.15 "Царь горы"**
**16.45 Документальный фильм**
**18.00 "Йома"**
**18.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**18.45 "Сэнгелдек"**
**18.55, 19.40, 20.40 Комедии советского кинематографа на башк. яз.**
**21.00 "Профили"**
**21.25 Открытый чемпионат России по хоккею - Чемпионат КХЛ. "Спартак" (Москва) - "Салават Юлаев" (Уфа). В перерывах: Новости**
**00.00 Открытие 73-го концертного сезона БГФ. Часть I**

## 29 ОКТЯБРЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.30, 06.10 "Всего одна ночь"
06.00 Новости
07.20 "Играй, гармонь любимая!"
08.10 "Дисней-клуб"
09.00 "Умницы и умники"
09.45 "Слово пастыря"
10.00 Новости
10.15 "Смак"
10.55 "Александр Михайлов. Надо оставаться мужиком". Док. фильм
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Круиз"
16.15 "Новый "Ералаш"
16.55 "Александр Зацепин. "В огнедышащей лаве любви..."
18.00 Вечерние новости (с субтитрами)
18.15 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым"
19.20 "Большие гонки"
21.00 "Время"
21.15 "Призрак оперы"
22.45 "Прожекторперисхилтон"
23.20 "Что? Где? Когда?"
00.25 "Однажды в Риме". Комедия
02.00 "Гран Торино". Драма
04.15 "Опека"

### РОССИЯ 1
04.50 "Все, что ты любишь..."
06.35 "Сельское утро"
07.05 "Диалоги о животных"
08.00 "Вести"
08.10 "Вести-Башкортостан"
08.20 "Военная программа" Александра Сладкова
08.50 "Субботник"
09.30 "Городок. Дайджест"
10.05 "Качество жизни"
10.30 "Специальный корреспондент"
11.00 "Вести"
11.10 "Вести-Башкортостан"
11.20 "Вести. Дежурная часть"
11.55 "Честный детектив"
12.25 "Подари себе жизнь"
12.55 "Любовь и разлука". Сериал
14.00 "Вести"
14.20 "Вести-Башкортостан"
14.30 "Любовь и разлука". Продолжение
17.00 "Субботний вечер"
18.55 Шоу "Десять миллионов" с Максимом Галкиным"
20.00 "Вести в субботу"
20.45 "Биение сердца". Мелодрама
00.30 "Девчата"
01.10 "Теория заговора". Боевик
03.55 "Беги, Ронни, беги!"

### НТВ
05.45 "Фабрика грез". Сериал
07.25 "Смотр"
08.00 "Сегодня"
08.20 "Золотой ключ"
08.45 "Академия красоты" с Ляйсан Утяшевой"
09.20 "Готовим с Алексеем Зиминым"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Главная дорога"
10.55 "Кулинарный поединок"
12.00 "Квартирный вопрос"
13.00 "Сегодня"
13.20 "Дорожный патруль-4". Сериал
15.05 "Своя игра"
16.00 "Сегодня"
16.20 "Таинственная Россия"
17.20 "Очная ставка"
18.20 "Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня"
19.25 "Профессия - репортер"
19.55 "Программа Максимум. Расследования, которые касаются каждого"
21.00 "Русские сенсации"
21.55 "Ты не поверишь!"
22.50 "Последнее слово"
23.50 "Нереальная политика"
00.30 "За пределами закона". Криминальная драма
02.30 "Дорожный патруль-4"
04.25 "Кремлевская кухня"

### БСТ
**07.00, 18.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**07.15 "Доброе утро"**
**08.00 "Добро, любовь и красота. Вечер-исповедь"**
**09.30 "Замандаштар"**
**10.00 "Бахетнама"**
**10.45 "Еду я в деревню"**
**11.15 "Арслан"**
**12.00 "Следопыт"**
**12.30, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**12.45 "Дело мастера"**
**13.00 "Тэмле" (на русск. яз.)**
**13.30 "Весело живем"**
**14.00 "Дарю песню"**
**16.00 "Третий звонок". А. Чехов. "Чайка". Спектакль**
**18.45 "Сэнгелдек"**
**19.00 "Хазина"**
**19.30 "Дарман"**
**20.15 "Башкорттар"**
**20.45 "Парад планет"**
**22.00 "Башкорт йыры"**
**22.45 "Золотая осень-2011"**
**23.15 "Муз-базар"**
**23.45 Открытие 73-го концертного сезона БГФ. Часть II**

## 30 ОКТЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости
06.10 Мультфильмы
06.35 "Фиктивный брак"
07.55 "Служу Отчизне!"
08.25 "Дисней-клуб"
09.15 "Здоровье"
10.00 Новости (с субтитрами)
10.15 "Непутевые заметки"
10.35 "Пока все дома"
11.25 "Фазенда"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Круиз"
16.15 "Не надо печалиться". Комедия
18.05 "Минута славы. Мечты сбываются!"
19.50 "Специальное задание"
21.00 "Воскресное "Время"
22.00 "Большая разница"
23.05 "Все путем". Драма
00.50 "Обмани меня". Сериал
04.05 "Врата"

### РОССИЯ 1
05.50 "По данным уголовного розыска". Детектив
07.20 "Вся Россия"
07.30 "Сам себе режиссер"
08.20 "Смехопанорама" Евгения Петросяна
08.50 "Утренняя почта"
09.30 "Сто к одному"
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели"
11.00 "Вести"
11.10 "С новым домом!"
11.25 "Любовь и разлука". Сериал
14.00 "Вести"
14.20 "Вести-Башкортостан"
14.30 "Любовь и разлука". Сериал. Продолжение
15.45 "Я не жалею ни о чем". Концерт Юрия Антонова
18.00 К 100-летию Аркадия Райкина
20.00 "Вести недели"
21.05 "На всю жизнь". Детектив
23.05 "Специальный корреспондент"
00.05 "Геннадий Хазанов. Повторение пройденного"
00.35 "Зодиак". Драма
03.50 "Комната смеха"

### НТВ
05.20 "Фабрика грез". Сериал
07.00 "В поисках Франции"
08.00 "Сегодня"
08.15 "Русское лото"
08.45 "Их нравы"
09.25 "Едим дома!"
10.00 "Сегодня"
10.20 "Первая передача"
10.55 "Развод по-русски"
12.00 "Дачный ответ"
13.00 "Сегодня"
13.20 "Дорожный патруль-4". Сериал
15.05 "Своя игра"
16.00 "Сегодня"
16.20 "Следствие вели..."
17.20 "И снова здравствуйте!"
18.20 "Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня. Итоговая программа"
20.00 "Чистосердечное признание"
20.50 "Центральное телевидение"
21.55 "Николай Басков. Моя исповедь"
22.55 "НТВшники"
00.00 "Обратная тяга". Драма
02.30 "Главная дорога"
03.05 "Дорожный патруль-4"
05.00 "Кремлевская кухня"

### БСТ
07.00, 18.30 Новости (на башк. яз.)
07.15 "Доброе утро!" Концерт
08.30 "Хазина"
09.00 "Йома"
09.30 "Автограф". Р. Азнагулов
10.00 "Бауырсак"
10.10 "Городок АЮЯ"
10.25 "Семэр"
10.40 "Шатлык йыры"
10.50 "Шэп арба"
11.00 "Байтус"
11.15 "Сулпылар"
11.30 "Гора новостей"
11.45 "Дарман"
12.30 Новости
12.45 "Надо знать!"
13.00 "Тамле"
13.30 "Башкорттар"
14.00 "Дарю песню"
16.00 "Историческая среда"
16.30 "Замандаштар"
16.45 "Вестник Газпромтрансгаз Уфа"
17.00 "Дорога к храму"
17.30 "Орнамент"
18.00 "Тарихи фараз"
18.45 "Сэнгелдек"
19.00 "Весело живем"
19.30 "Волшебный курай"
20.00 "Любимое дело"
20.30 "Новости спорта"
21.00 "Урал Лото"
21.15 "За порогом"
21.30 "Новости недели"
22.00 "Байык"
23.00 "Вечер.com"
23.45 "В кругу друзей". Песни Урала Рашитова

*ЗӘҢГӘР ЭКРАН*

# "БӘХЕТНАМӘ"ЛӘ - БӘХЕТЛЕ ҒАИЛӘЛӘР

**"Киске Өфө" гәзите телевидение һәм радио аша матур ғаиләләрҙе күрһәтеү, төрлө педагогика ысулдары менән таныштырыу кәрәклеге тураһында күп тапҡырҙар яҙып сыҡҡаны булды. Ниһайәт, телевидение коллективы был эште тормошҡа ашыра башланы. Октябрь айында Башҡортостан юлдаш телеканалында ғаилә институтын пропагандалауҙы маҡсат итеп ҡуйған яңы проект- "Бәхетнамә" тапшырыуы эфирға сыға башланы.**

Унда һүҙ балалар тәрбиәләү, уларҙың зиһенен үҫтереү һәм һаулығын нығытыу тураһында бара. Программала йәш ата-әсәләр ҙә ҡатнаша. 12 аҙна дауамында һәр телевизор ҡараусы үҙе теләгән ғаиләгә тауыш бирәсәк, ә иң күп тауыш йыйған геройҙар Йоматау шифаханаһына путевка менән бүләкләнә. Әлегә өс ғаилә өсөн тауыш бирергә мөмкин. Беренсе ғаилә - Гүзәл һәм Азат Кәримовтар, улар фекеренсә, балаға матур һүҙҙәрҙе йәлләмәҫкә кәрәк, икенсе ғаилә - Баймаҡ ҡалаһынан Эльвира һәм Илдар Ишембәтовтар тәү сиратта балаларҙы яратырға кәрәк, тип иҫәпләй. Өсөнсө ғаилә лә Баймаҡ районынан. Улар Иҫке Сибай ауылында йәшәүсе Гөлнур һәм Фәнис Сирбаевтар. Фәнис тос фекерле, һүҙ ҡәҙерен белгән йәш шағир булараҡ билдәле. Хәҙер уны бөтә республика өлгөлө атай булараҡ таныясаҡ. Тауыш бирер өсөн 4345 һанын йыйырға һәм Кәримовтар өсөн БАЛА 1, Ишембәтовтар өсөн БАЛА 2, Сирбаевтар өсөн БАЛА 3 тип яҙырға кәрәк.

Сирбаевтар ҡатнашлығында тапшырыуҙы һеҙ шәмбе, **22 октябрҙә** һәм **24 октябрҙә 13.45 сәғәттә** ҡарай алаһығыҙ. Уның темаһы - баланы шәхес булараҡ тәрбиәләү.

Һәр шәмбе иртәнге унда Башҡортостан юлдаш телевидениеһының "Бәхетнамә" тапшырыуын ҡарарға һәм республикабыҙҙың күркәм ғаиләләре өсөн тауыш бирергә онотмағыҙ.

*ГӘЗИТТӘН КҮСЕРЕП...*

# ИЛЕМДӘ ИЛЕМДЕ ҺАҒЫНАМ...



## йәки Ниңә беҙ Рәсәйҙе миграция энәһенә ултыртабыҙ?

**2025 йылға шундай фараз яһайҙар: илдә эшкә яраҡлы халыҡ һаны 10 миллион кешегә кәмейәсәк. Был проблеманан сығыу юлы бер генә - бушап ҡалған эш урындарына сит ил кадрҙарын ылыҡтырыу. Федераль миграция хеҙмәте идаралығы (ФМС) етәксеһе урынбаҫары Константин Полторанин ошо хаҡта үҙенең фекерҙәре менән уртаҡлаша.**

**➔ Ысынлап та, Рәсәйгә миллионлаған сит ил эшсеһенең ҡулы кәрәкме?**

- Рәсәй әле үк миграция энәһендә ултыра. Әммә сит ил эшсе көстәренән башҡа йәшәй алмаясаҡбыҙ, тип ышандырырға тырышыуҙар - ялған. Хатта бынан 20-30 йыл элек, илдә сәнәғәт, төҙөлөш тулы ҡеүәтенә эшләгәндә лә кадрҙарға етди ҡытлыҡ һиҙелмәне. Сит ил граждандары беҙҙең территорияны баҫып бара, ә ошо ерҙә элек-электән йәшәүсе халыҡтар үҙ-үҙен күрһәтеү мөмкинлеге тапмай. Төбәктәрҙә йәштәр белем ала, эш таба, лайыҡлы эш хаҡы ала алмай. Эшлекле, амбициоз белгестәр Рәсәйҙән ситкә китеп, яҡшы тормошто Көнбайышта эҙләргә мәжбүр. Рәсәй халҡын бик йыш эскесе һәм ялҡау тип атайҙар. Ә тарих быныӊ киреһен, халҡыбыҙҙың донъя фәненә, мәҙәниәтенә, прогресына лайыҡлы өлөш индереүен раҫлай. Үкенескә күрә, илдә барған процестар яҡын киләсәктә халыҡтың 70 проценты ысынлап та эскесе, әрәмтамаҡ булыуын, ә ҡалғандары нефть-газ торбаларына хужа булып ултырған элитаны хеҙмәтләндереүселәргә әүереләсәген фаразларға мәжбүр итә. Иҡтисадтың нигеҙен мигранттар тәшкил итәсәк. Бындай осраҡта милли шырпынан сыҡҡан бер осҡон да шартлауға килтерәсәк.

**➔ Ни өсөн урындағы халыҡты түгел, ә мигранттарҙы йәлеп итеү файҙалыраҡ?**

- Ситтән килеүселәргә дауаханалар, балалар баҡсалары, мәктәптәр, тормош һәм эш өсөн яҡшы шарттар кәрәкмәй. Арзан эшсе көстәр күп булғанда юғары технологик производство булдырыу, профессионалдар эшләргә тейешле ҡиммәтле ҡатмарлы техника һатып алыу кәрәкмәй. Был хәл-тороштан ҡулы таҙа булмаған чиновниктар һәм коммерсанттар файҙа күрә. Уртаса алғанда, ай һайын Мәскәүҙең коммерция структуралары бюджетына һәр килгән мигрант өсөн 50 мең һум самаһы аҡса һалына. Әммә шуның өстән бер өлөшө генә эш хаҡы түләүгә тотонола. Ҡалған аҡсалар чиновниктарға һәм контроль органдарына ришүәт биреүгә, компания менеджерҙарына үҙ-ара бүлешеүгә китә. Бындай схема бөтөн төбәктәрҙә лә ғәмәлдә. Был хоҡуҡ һаҡлау органдарына ла, ФМС-ҡа ла уңайлы, властар һәм эшҡыуарҙар өсөн килемле, ксенофобия менән көрәшеүгә гранттар алыусы хоҡуҡ яҡлаусылар өсөн дә ҡулай.

Илдең киләсәген уйламаусы чиновниктар өсөн дә яҡшы: ришүәт менән йәшәүсе дәүләт хеҙмәткәрҙәренә эш хаҡын арттырмаҫҡа, бер ыңғайҙан ҡаршылыҡлы фекерҙә тороусыларҙан да ҡотолорға мөмкин. Тап уҡырға һәм эшләргә теләгән йәш, амбициоз кешеләрҙән торған ҡатлам йыш ҡына коррупция һәм бюрократия менән ҡәнәғәт түгел бит. Ә мигранттарҙы ил менән нимә булыры ҡыҙыҡһындырмай, уларға аҡса мөһимерәк.

**➔ Рәсәйҙән мигранттар оҙатҡан аҡса күләмен баһалай алаһығыҙмы?**

- Аныҡ статистика юҡ, Үҙәк банк бары тик 15 осраҡты ғына иҫәпкә ала. Төрлө баһалар буйынса, мигранттар үҙ иленә йылына 15 - 50 миллиард доллар оҙата. Беренсе урында Ҡытай тора. Ҡытайға Рәсәй менән ҡоралды низағ ойоштороу файҙаға түгел. Уға уның территорияһын яйлап ҡына үҙ халҡы менән баҫып алыу уңайлы. Чита өлкәһенең эшкә яраҡлы халҡы Мәскәү, Санкт-Петербург, Хабаровск кеүек ҙур ҡалаларға китеп бөткән йәки Ҡытай эшҡыуарҙарына бил бөгә. Ә аҙ ғына эш хаҡын шул уҡ Ҡытай тауарҙарына - аҙыҡ-түлеккә, спиртлы эсемлектәргә, тәмәкегә сарыф итә.

**➔ Мигранттар тарафынан ҡылынған енәйәттәр йылдан-йыл арта бара. Был йәмғиәттең тотороҡлоғона янамаймы?**

- Рәсми статистика буйынса, Рәсәйҙә сит ил граждандары өлөшөнә дөйөм енәйәттәрҙең өс проценты ғына тура килә. Әммә талаусы, көсләүсе, үлтереүселәр ролендә йыш ҡына ситтән килеүселәр булыуын күрәбеҙ. Был уларҙың йәшәү шарттары ҡолдарҙыҡы кеүек булыуға бәйле. Киләсәктә үҙ-ара конкурентлыҡ артыу һөҙөмтәһендә ситтән килеүселәрҙең араһында низағтар ҡапыл артасаҡ әле. Улар эш өсөн, айырым төбәктәрҙә йәшәү мөмкинлеге өсөн, йоғонто яһау өлкәһе өсөн үҙ-ара һуғышасаҡ. Бындай осраҡтар бер нисә урында теркәлде лә инде. Ә һуңынан, мигранттар яңы урындарҙа йәшәй башлағас, властар һәм урындағы халыҡ араһындағы ҡаршы тороуҙарҙан хәүефләнергә кәрәк. Килеүселәр һәм урындағы халыҡ араһында айырма бик ҙур - ғөрөф-ғәҙәттәрҙә, тормош рәүешендә, белем кимәлендә һ.б.

**➔ Хәл-торошто үҙгәртеү өсөн нимә эшләргә кәрәк?**

- Тәү сиратта ҡайһы бер илдәр - Тажикстан, Ҡырғыҙстан, Үзбәкстан һ.б. менән виза режимын индереү зарур. Һәм визаһы булмаған граждандарҙы эшкә алыуҙы ҡәтғи тыйырға. Кадрҙар туплауҙың уңайлы һәм үтә күренмәле схемаһын эшләргә, унда эшкә урынлаштырғанда рәсәйҙәргә өҫтөнлөк бирелергә тейеш. Был осраҡта эш биреүсе Рәсәйҙең икенсе төбәгендәге гражданды түгел, ә ни өсөн тап сит ил гражданын эшкә алырға кәрәк икәнен раҫларға ла тейеш. Бындай система, мәҫәлән, Белоруссияла уңышлы эшләй.

**Георгий АЛЕКСАНДРОВ.**
**"Аргументы и факты" гәзитенән.**

*ХОККЕЙ*

# ЕҢӘБЕҘ, ЕҢЕЛӘБЕҘ...

**Ғәмәлдәге чемпион "Салауат Юлаев" үҙ майҙанында Словакияның "Лев" командаһы менән көс һынашты. Юлаевсыларҙың теләге изге: рәттән биш еңелеүгә дусар иткән көрсөктән сығыу.**

Төрлө сәбәптәр арҡаһында элекке матчтарҙа ҡатнашмаған Игорь Григоренко һәм Сергей Зиновьевтарҙың боҙ майҙанына сығыуы командаға бермә-бер көс өҫтәне. "Лев"тың ярайһы көслө команда булыуы, унда Канада һәм Швеция хоккейсыларының уйнауына ҡарағанда, уйындың бик ауыр, үтә көсөргәнешле буласағын алдан уҡ һиҙемләргә мөмкин ине.

Юлаевсылар баштан уҡ бик көслө һөжүм башланы. Сергей Зиновьев һуҡҡан шайба ниндәйҙер мөғжизә менән ҡунаҡтар ҡапҡаһына инмәй ҡалды. Ә "Лев" командаһы иһә Виталий Колесник ҡапҡаһына беренсе булып гол индерҙе һәм тәүге осор ҡунаҡтар файҙаһына 1:0 иҫәбенә тамамланды.

Ғөмүмән, уйын ысын мәғәнәһендәге уҙышҡа әйләнде. Ҡунаҡтар алға сыға, майҙан хужалары ҡыуып етергә мәжбүр була. Икенсе осор шулай уҡ ҡунаҡтар файҙаһына 3:2 иҫәбе менән бөттө. Александр Свитов осор ахырында ғына ҡунаҡтар ҡапҡаһына икенсе шайбаны сәпәне.

Өсөнсө осор башында уҡ майҙан хужалары йәнә иҫәпте тигеҙләне. Олег Сапрыкин һуҡҡан шайбаны ҡунаҡтар ҡапҡасыһы тота алмай ҡалды. Уйын ҡыҙғандан-ҡыҙа барҙы. Әүҙемлек бермә-бер артты. Ҡунаҡтар ул арала тағы ике гол индереп өлгөрҙө. Уйындың яҙмышы ҡыл өҫтөндә ҡалды. Юлаевсыларҙан бигерәк тә С. Зиновьев, А. Радулов һәм И. Григоренко ҡунаҡтар ҡапҡаһы алдында ҡыйыу уйнаны. Тиҙҙән А. Радулов 4-се һәм 5-се шайбаны индереп, иҫәпте тигеҙләне. Ә матч тамамланыр алдынан Олег Сапрыкин еңеүсе 6-сы шайбаны ҡунаҡтар ҡапҡаһына осорҙо.

Кесаҙнала "Салауат Юлаев" хоккей командаһы Минскиҙың "Динамо"һы менән осрашты һәм 3:5 иҫәбе менән отолдо. Әйтергә кәрәк, белорустарға был еңеү еңел бирелмәне. Һәр хәлдә, юлаевсылар, наһайәт, ысынлап уйнай башланы шикелле.

**Юныс ӘХМӘҘИЕВ.**

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Ошо көндәрҙә Баймаҡ районы Ниғәмәт ауылы егете, төркөмдәшебеҙ, институт йылдары дуҫыбыҙ **Рөстәм Юлай улы Ниғмәтуллин** менән Иҫке Сибай ауылы ҡыҙы **Зилиә Шәмсетдин ҡыҙы Халисованың** ғүмерҙәрендә иң матур байрамы - туй тантанаһы. Алдағы тормошоғоҙ ҡояшлы, барыр юлдарығыҙ асыҡ, кисерер ҡыуаныстарығыҙ уртаҡ булыуын теләйбеҙ.

*Алтын ғына ҡыҙығыҙҙы*
*Алды алтын дуҫыбыҙ.*
*Ғүмер юлын башҡаларҙы*
*Көнләштереп уҙығыҙ!*
*Тик бәхетле булығыҙ!*

**Ҡотлау менән төркөмдәштәре исеменән Илгиз, Рәфил, Тимерғәле, Илдар, Ильяс.**

* * *

Уҡыусыбыҙ, Өфө ҡалаһының Муса Гәрәев исемендәге башланғыс осош әҙерлеге мәктәп-интернаты директоры, запастағы полковник **Салауат Ғиниәт улы ЯҠУПОВТЫ** күркәм юбилейы менән ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ һәм арҙаҡлы яҡташыбыҙға рух ныҡлығы, ҡоростай сәләмәтлек, бәхет-шатлыҡтар, эшендә уңыштар теләйбеҙ.

**Ҡотлау менән, Ырымбур өлкәһенең Владимир урта мәктәбе уҡытыусылары һәм уҡыусылары.**

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**28 октябрь** Башҡортостандың атҡаҙанған артисы, "Далан" фольклор-эстрада төркөмө солисы **Миңзифа Исҡужина** үҙенең моңло кисәһенә саҡыра. Яңы концерт программаһының тәүге өлөшөндә йырсы БР Халыҡ ҡоралдары милли оркестрына ҡушылып, халыҡ һәм классик йырҙар башҡара. Икенсе өлөштә эстрада йырҙары тыңлай аласаҡһығыҙ. Унда шулай уҡ "Далан" төркөмө, Рөстәм Шаһбалов, Руслан Сәйфетдинов ҡатнаша.

### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**22 октябрь "Мөхәббәт ҡарағы"** (Ф. Бүләков), музыкаль комедия.

**23 октябрь "Ҡатынымдың исеме Морис"** (Р. Шарт), комедия

**25 октябрь "Юл билдәләре - беҙҙең дуҫтар"**, әкиәт-әсбап. Башлана 11.00, 13.00

**25 октябрь "Кәкүк ояһы"** (К. Кизи), психологик триллер

**26-28 октябрь "Ҡыҙыҡ был тормош!.."** (В. Шукшин), хикмәттәр

27 октябрь "Туй" (А. Чехов), шаярыу

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**22 октябрь "Диләфрүзгә дүрт кейәү"** (Т. Миңнуллин), тамаша

**26 октябрь "Мөхәббәт китабы"** (И. Вәлиева), драматик әкиәт. Башлана 11.00

**27 октябрь "Йәнкиҫәккәйем"** (Т. Миңнуллин), музыкаль комедия

*ТӨҘӘТЕҮ*

Гәзитебеҙҙең 42-се һанында баҫылып сыҡҡан "Бөрйән егеттәренең үҙ ерҙәрен даулап алғаны" (9-сы бит, "Монолог") тигән мәҡәләлә хата ебәрелгән: Нәби ауылы урынына Иҫке Монасип ауылы тип уҡырға кәрәк.

СМСНАМӘ - ШИҒРИ ӘЙТЕШ



# ИСМАҺАМ, ХОҠУҠИ АУЫЛ

## Төҙөп ҡарайыҡ тәүҙә...

**Әйтеш дауам итә. ЫРЫҪ сәсән "Көн ҡаҙағы был түгел...", тип белдерһә лә ҡатнаш никах мәсьәләһенә бәйле һорауына КӨФӨ тулыраҡ яуап көтә барыбер. Был юлы сәсәндәргә БАТЫРыбыҙ үҙ һорауын бирә. Һәр саҡтағыса, бәйгене алдағы һандарҙа ҡуйылған һорауҙарға яуап биреүҙән башлайбыҙ.**

**АҒИНӘЙ:**

Ерҙе бирҙек ер һөйгәнгә,
Телде бирҙек тел һөйгәнгә,
Көйҙө бирҙек моң һөйгәнгә...
Былай барһа был тормош,
Донъяларҙа юҡ торош.
Аҫтырыр ҙа баҫтырыр,
Ҡосторор ҙа боҫторор.
Эткол сәсән әйтмешләй,
Йүкә шына ҡыҫтырыр.
Беребеҙ ҙә тик ятмаҫ,-
Һалпы яҡҡа һалындырып,
Һаламын да ҡыҫтырыр.
Әгәр былай йәшәһәк,
Шаҡшы һүҙҙәр һөйләһәк,
Беҙҙе кемдәр яратыр ҙа,
Беҙгә кемдәр йән атыр?
Барыһын да урынына
Ҡуйырға кәрәк,ваҡыт.
Болаҡ донъя кемгә кәрәк,
Ишек-тәҙрәләр ватыҡ.
Ирҙәр ҡайтһын асылына,
Ҡатын ҡайтһын усаҡҡа.
Мейестәрҙә икмәк бешһен,
Эш табылһын бысаҡҡа.

**КӨФӨ:**

**Буға туған әйткән һүҙгә
Ҡуҙғалды тағы ярам:
"Ҡыҙҙарыбыҙ ир тапмай,
Ситтәргә китә харап..."
Башҡаларға сеймал (сырье) өсөн
Әйтерһең дә килгәнбеҙ.
Ниңә башҡорт ҡартатайҙың
Йәһүд була ейәне?
Ниңә башҡорт ҡартәсәйҙең
Грузин була ейәне?
Ниңә башҡорт олатайҙың
Мәрйә һуң ейәнсәре?
Ниңә башҡорт өләсәйҙең
Татар һуң бүләсәре?**

**ЭТКОЛ:**

Ил ағаһы булыр ирҙәр,
Үҙегеҙҙе барлайыҡсы.
Ғаиләгеҙ нисек һеҙҙең -
Сер һандығын асайыҡсы?
"Башҡорт халҡын күтәрәйек!" -
Ҡысҡырағыҙ бер ауыҙҙан.
Арағыҙҙа күбегеҙҙең
Ҡатындары сит бауырҙан.
Бер ҡулығыҙ оло юлға,
Икенсеһе ситкә ымлай.
Халыҡ һеҙҙән үрнәк ала,
Халыҡ һеҙҙең һүҙҙе тыңлай.
Балалары белмәй үҫкәс,
Башҡорт монон, башҡорт телен.
Ейәндәргә кәрәкме ни
Башҡортостан - Башҡорт иле?
Сит милләткә сығып ҡыҙҙар
Башҡорт халҡын арттырамы?
Һабантуйҙа сәмсел улы
Бәйгелә ат саптырамы?
Сит милләткә өйләнгәндәр
Сабыйына әкиәтте
Ниндәй телдә һөйләй икән?
Борон-борон замандамы?
Жил-был, тиеп башлай микән?

**АҠЫҠ:**

Белем алған йәштәргә лә
Эш биреүсе бик һирәк.
Һылтауҙар күп: квота юҡ,
Йә стажы әҙерәк.
Хаҡлы ялда булғандар тик
Бәхетле был тәңгәлдә.
Беҙҙекеләр - ятаҡ тулы.
Һикелә йә иҙәндә.
Шуға күрә йәштәребеҙ
Ситкә барып олаға.
Шуға күрә башҡорттарҙың
Урыҫ була оноғо.

**БУҒА:**

Алданғас беҙҙең егет
Татлы телле шайтанға,-
Ҡайҙа барһын, нишләһен,
Ҡыҙҙар ҡала сеймалға,
Олатайҙар, өләсәйҙәр
Ҡоҙа була бар илгә.
Сөнки алтын, хазина
Ҡәҙерһеҙ сыҡҡан ерҙә.

**ЫРЫҪ:**

Үҙебеҙҙе хөрмәт итеү -
Наҡыҫ сара, Ағинәй!
Күкрәк киреп, яр һалмаһаң,
Башҡалар хөрмәт итмәй.
Хөрмәтте лә, тел-тарихты,
Йырҙы юғалтайыҡмы?
Һуҡыр сысҡанды ҡурҡытып,
Соҡорға сумайыҡмы?
Боҫоп ятҡан ҡуянды ла
Бүре баҫа, Ағинәй.
Бергәләшеп майҙан тотһаҡ,
Иҫәпләшерҙәр, инәй?
Шунығы хаҡ, ни булһа ла
Беҙ рухты юғалтмайыҡ.
Бала табып, бакса ҡороп
Байлыҡты арттырайыҡ.
Йор һүҙлеһен, телең ыҫпай,
Афарин, Эткол туған!
Тик һиҙелә - был һүҙҙәрҙе
Әйтәһең сараһыҙҙан.
Анлайһындыр - был бит бары
Арыу констатация.
Ватан һаулығын дауларға
Бар бит Конституция!
Инештәр күпме булмаһын,
Диңгеҙ бераү, йәмәғәт!
Һаман шуға тертөләбеҙ -
Хоҡуҡи дәүләт кәрәк!

**БАТЫР:**

Йөрөтәмен ике ҡолаҡ,
Ике күҙем бар - шөкөр,
Ауыҙым бар, тештәре лә,
Тел дә бар минең үткер!
Илебеҙ артта ҡалған шул...
Илле йылға ғынамы?
Бер мең дүрт йөҙ йылдан ашыу
Уның артта ҡалғаны!
Бәйғәмбәр шул заманынан
Динде еткерә башлай.
Яҡшы-яман, дөрөҫ-ялған
Еткерелгән бит шулай.
Еткерелгән!
Хан заманы, пан заманы -
Заманаһы заманға,
Рәми ағай әйткән кеүек, -
Барыһы бергә ялғанып бит,
Барыһы бергә ялғанған...
Хоҡуҡи дәүләт һөйләйбеҙ -
Тәртип юҡ ауылдарҙа!
Исмаһам, хоҡуҡи ауыл
Төҙөп ҡарайыҡ тәүҙә!
**Минең һорауым бар шундай,
Булһын ул файҙа-фәһем
(Бәлки, һүҙҙе борамындыр, -
Әммә был бик-бик мөһим!).
Башҡортлоҡмо иманлылыҡ,
Иманлылыҡ - башҡортлоҡ?
Иман нимә була һуң ул,
Халыҡ?**

АТЫҢ КЕМ?

# ИСЕМДӘРЕ ДИНИСЛАМ...

## барыр гел дөрөҫ юлдан



Һеҙ һүрәттә күргән егет Динислам Әлибәков булыр. Динислам гәрәп һүҙенән "дин" һәм "ислам", йәғни "мосолман" тигәнде аңлата. "Динебеҙгә тоғро ҡалһаҡ, илебеҙ ҙә нурланыр, йөҙөбөҙ ҙә саф булыр, сөнки ислам дине кешеләрҙе һәр саҡ дөрөҫлөккә саҡырған. Улыбыҙға ошо тәрән мәғәнәле исемде уның киләсәген уйлап, үҙе лә дөрөҫ юлдан яҙлыҡмаһын, тигән якты өмөттәр бағлап ҡуштыҡ", - ти Айгөл һәм Рөстәм Әлибәковтар.

Әлегә көндә Динислам Өфөләге Ф. Мосафина исемендәге 20-се һанлы гимназияла 9 синыфта белем ала. Иң әүҙем уҡыусыларҙың береһе булараҡ, класташтары араһында ла ҙур ихтирам яулап өлгөргән. Әскерһеҙ күңелле, ярҙамсыл егет һәр кем менән тиҙ уртаҡ тел таба белә. Уҡыуында ла һынатмай. Уҡыуҙан тыш төрлө сараларҙа әүҙем ҡатнаша. Кесе йәштән "Тамыр" балалар телестудияһында шөғөлләнеп, йыр, бейеү сәнғәте нескәлектәренә төшөнә. Быйыл Төркиәгә барып ҡайтыу бәхете тейгән уға. Тырыштарға һәр ерҙә лә уңыш йылмайғанын яҡшы белә егет. Ваҡытын бушҡа әрәм итергә күнекмәгән ул. Спортты һөйә, һау-сәләмәт тормош яҡлы. Уңған егеттең киләсәктә тормошта үҙ урынын табып, ата-әсәһен ҡыуандырып йәшәренә өмөт ҙур. Ҡала шарттарында көн итеүсе йәш ғаиләләрҙең башҡорт рухынан тайпылмай, балаларына матур исемдәр ҡушыуы үҙе үк батырлыҡҡа тиң күренеш түгелме ни!

**Лилиә ЯМАЛОВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйләреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ДУҪЫҢ КҮП БУЛҺА...

## дошмаһың үҙе үлер

Дошман менән дуҫ булһаң, билеңдә балтаң булһын.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Тел торошона ҡарап, был телдә һөйләшеүсе халыҡтың нисек йәшәүен аңларға була.

**(Хулио Кортасар).**

Кешеләрҙең бер-береһенә таш ташлауын һүгенеү һәм әр һүҙҙәре менән алыштырған тәүге кеше цивилизацияны ижад итеүсе булған.

**(Зигмунд Фрейд).**

Тормош эре планда ҡарағанда - трагедия, йыраҡтан ҡарағанда - комедия.

**(Чарли Чаплин).**

Һәр кем үҙ фекерен әйтә ала, ләкин закон барыһы өсөн дә бераү.

**(Теренций).**

Үткәндәге хаталарҙы төҙәтеүгә ҡарағанда... тәнҡитләү еңелерәк.

**(Джованни Бокаччо).**

Теләһә ниҙән көләргә була, әммә теләгән урында түгел. Мәҫәлән, үлем тураһында төрлө мәрәкәләр һөйләһәк тә, мәйет янында мәрәкәләй алмайбыҙ. Тормош һәр ваҡыт үтә етди, әммә һәр ваҡыт етди йәшәргә ярамай.

**(Гилберт Честертон).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Яҙыу өҫтәләндә бер өйөм таҙа ҡағыҙ биттәре ята. Ләкин берҙән-бер көндө кемдер бер ҡағыҙ битен алып, уны арҡыры-буйға һыҙғылап, һүрәттәр төшөрөп, нимәләрҙер яҙғылап һалып ҡуя. "Ниңә һин мине шундай мыҫҡыллауҙарға дусар иттең? - тип һорай йәнә әрнеп ҡағыҙ бите ҡәләмдән. - Минең аҡ ҡына йөҙөмдө һин ҡара буяуың менән бысраттың. Хәҙер мин кемгә кәрәк булам инде?.." "Улай үк борсолма әле һин, - ти уға ҡәләм. - Һине бераү ҙә мыҫҡыл итмәне һәм бысратманы ла, ә яҙыуҙар ярҙамында кәрәкле мәғлүмәттәр теркәне, һүрәттәр яһаны. Хәҙер һин айға ғына ҡағыҙ киҫәге түгел, ә кешенең аҡылын, фекерен һаҡлаусы - ошонда инде һинең бөтөн ҡиммәтең..."**

**Ҡәләм хаҡлы булып сыға. Эш өҫтәлен йыйыштырған саҡта кеше ваҡыт үтеү менән һарғайған таҙа ҡағыҙ биттәрен күреп ҡала һәм йыйып алып, уларҙы мейескә ырғытырға итә. Шул саҡ ҡағыҙ өйөмө араһында баяғы ниндәйҙер яҙыуҙар яҙылған, һүрәттәр төшөрөлгәнен күреп ҡала һәм уны башҡаларынан айырып алып, һаҡ ҡына өҫтәл тартмаһына һалып ҡуя. Кеше аҡылын һаҡлаған ҡағыҙ шулай юҡ ителеүҙән ҡотолоп ҡала..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 21 октябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5203
Заказ 4172